ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 апрель (алағарай) 2026

№16 (1211)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына 1124 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана. Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Әҙәм ышанмаҫтайҙы...**

ысын булһа ла һөйләмә



6

**"Театрһыҙ милләт юҡ..."**



8-9

**Ысын уҡытыусы...**

мәктәпкә аҡса эшләр өсөн килмәй



9,11

**Ырыуҙаш тигән яҡынлыҡ бар**

Сәфәребеҙ - Ырымбур еренә



12-13


УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ИНТЕРНЕТ СЫҒЫНЛАЙМЫ? ГӘЗИТ УҠЫЙЫҠ!




**Бөгөн интернет теләр-теләмәҫ кенә эшләп, социаль селтәрҙәр тыйылған ваҡытта халыҡ мәғлүмәт киңлегенә, яңылыҡтар төрлөлөгөнә, аралашыу-фекерләшеү контентына ҡытлыҡ кисергән бер мәлдә, үҙҙәренә күрә матди-финанс ауырлыҡтар ситлегендә ҡалыуҙарына ҡарамаҫтан, фиҙаҡәрлек менән һәм ығы-зығыһыҙ ғына ваҡытында сығып килгән баҫма матбуғатҡа ҡыҙыҡһыныу арта төштө кеүек.**

Һәм быны мин үҙемдең миҫалдан да сығып әйтәм. Күптән түгел почта бүлегенә сираттағы пенсиямды ала барғанымда, интернетҡа үс итеп, бер талай гәзит-журналға яҙылдым да ҡайттым. Өйҙәгеләремде апты-ратырмын инде, тип хафаланыуым бушҡа ғына булды: улар был хәбәр-гә ифрат ҡыуандылар ғына. Хәҙер өйөбөҙгә "Киске Өфө", "Йәшлек", "Аргументы и Факты" гәзиттәре, "Аҡбуҙат", "Ағиҙел" журналдары килә, уҡып ләззәтләнәбеҙ: мәғлү-мәткә, яңылыҡтарға һәм көнүҙәк мәҡәләләргә законлы ихтыяжы-быҙҙы тыйыусы ла, сикләү һалыусы ла юҡ.

**(Дауамы 4-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ТЕЛ ҺӘМ РУХ БАЙРАМЫ



**Үткән аҙнала Башҡортостанда бер юлы ике әһәмиәтле ваҡиға билдәләнде, уларҙың һәр береһе республикабыҙҙың үҙенсәлеген, асылын күрһәтә лә инде.**

Йыл һайын апрелдең өсөнсө йома-һында Башҡортостан халыҡтарының милли кейеме көнө билдәләнә. Быйыл был көнгә тотош республикала, илдә һәм донъяла Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант яҙыу ҙа тура килеп, ысын мәғәнәһендә рухи байрамға әйләнде. Республика Башлығы Радий Хәбиров диктант яҙыу сараһын акция ғына түгел, ә башҡорт телен ихлас яратҡандарҙың һәммәһен дә берләштергән хәрәкәт тип атаны. "Бөгөн донъяның 15 илендә һәм 30 төбәктә диктант яҙҙылар. Акцияла "Башҡортостан" полкы яугирҙары ла ҡатнашты", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

- Төбәктең төп көсө - үҙ тамырҙарына хөрмәт күрһәтеүҙә, - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы халыҡҡа мөрә-жәғәтендә. -Беҙ Башҡортостанда ха-лыҡтарыбыҙҙың тарихын, йолаларын, телдәрен һаҡлайбыҙ. Был ата-бабаларыбыҙ васыят иткән һәм юғалтырға хоҡу-ғыбыҙ булмаған ҙур байлыҡ. Туған тел - һәр кем өсөн рухи моң, ә милли кейем - халыҡтарҙың үҙенсәлекле йөҙөн сағыл-дырған ҡомартҡы. Ошо төрлөлөктөң матурлығын күрә белеү, уға ихтирам - Башҡортостаныбыҙҙағы дуҫлыҡтың нигеҙе. Ә дуҫтарҙың татыулығы - еңелмәҫ көс. Байрам менән!

- Быйыл ҡатнашыусыларҙың дөйөм һаны 400 меңдән ашыуыраҡ булды, ак-цияның географияһы артабан да киңәйҙе, - тип билдәләне Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы етәксеһе Гөлназ Йосопова. - Донъя буйынса 2000-дән ашыу офлайн майҙансыҡ ойоштоpолдо, уларҙа 200 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Онлайн-форматта ла эштәр ҡабул ителде - "МАКС" мессенд-жеры аша 100 меңдән ашыу эш килде.

- Глобалләштереү һәм технологиялар дәүерендә туған телебеҙҙең яңы кимәлгә сығыуы һәм яңы даирәләргә таралыуы бик мөһим. Һәр тел - айырым халыҡтың ғына түгел, ә бөтә кешелектең мираҫы. Быны аңларға, күрһәтергә һәм иҫбат-ларға тейешбеҙ. Шуға күрә һәр беребеҙ башҡорт теленән халыҡ-ара диктант кеүек мөһим сараларҙа ҡатнашырға те-йешбеҙ. Акцияла ҡатнашыу - туған тел-гә мөнәсәбәтебеҙҙең сағылышы, - тине Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Юлдаш Йо-сопов.

Эйе, был көндө ошо мөнәсәбәт тантана итте лә инде. Майҙансыҡтарға милли кейемдәрҙәге милләттәштәрҙең эркелеп килеүенә шаһит булынды. Ул сафтарҙа йәштәрҙең, балаларҙың да ҡатнашыуы - иң мөһимелер, моғайын. Афарин, шулай булһын!

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

12+

ҠЫҪҠАСА

# ТАҒЫ БЕР МИҘАЛ

**Республикабыҙҙа "Башҡортостандың рәхмәтле халкынан" миҙалы булдырылды.** Ул Махсус хәрби операция үткәреүгә бәйле ирекмәнлек, хәйриә һәм гуманитар эшмәкәрлек өсөн халыҡты дәртләндереү өсөн тәғәйенләнгән. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров дәүләт наградаһын булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйған. Миҙал МХО үткәреүгә бәйле ирекмәнлек, хәйриә эшмәкәрлеге, гуманитар һәм башҡа ярҙам өсөн, гуманитар йөктәрҙе йыйыуҙа һәм алып барыуҙа ярҙам иткән өсөн; МХО маҡсаттарына өлгәшеүгә булышлыҡ иткән бурыстарҙы уңышлы үтәгән өсөн; МХО биләмәһендәге бурыстарҙы үтәгән өсөн тапшырыла. Үҙенең статусы буйынса миҙал Башҡортостандың дәүләт наградалары системаһында генерал Шаймуратов миҙалы (юғарыраҡ награда) һәм "Хеҙмәт батырлығы өсөн" миҙалы (түбәнерәк награда) араһындағы урынды биләй, тиелә указда.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 25-се Бөтә Рәсәй бала хоҡуҡтары буйынса вәкилдәр съезының пленар ултырышында сығыш яһаны.** Профилактика системаһын үҫтереү хаҡында һөйләгәндә, ул белем биреү ойошмалары, балалар менән эшләгән уҡытыусылар һәм белгестәр менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итеүҙең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ул хәүеф төркөмөнә ҡараған үҫмерҙәр менән эшләү мәсьәләләренә лә ҡағылды. "Йәш быуынды яҡлау буйынса һөҙөмтәле саралар күреү мөһим. Беҙ мәктәптә һаҡ системаһын көсәйттек, педагогик коллективтарҙың һәм психологик хеҙмәттәрҙең эшен үҙгәртеп ҡорҙоҡ. Минеңсә, иң мөһиме, йәш егеттәрҙең, үҫмерҙәрҙең тәртибендәге тайпылыштарҙы ваҡытында асыҡлау һәм иғтибарға алыу", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓ **Башҡортостанда яҙғы ташҡындың иң юғары нөктәһе үтелде. Ҡар запасы күп булыуға ҡарамаҫтан, республиканың төп йылғаларында һыу кимәле яҡынса фараздарҙан күпкә түбәнерәк булып сыкты. Уҙған аҙнала 12 муниципаль берәмектә ташҡынға бәйле 20 осраҡ контролдән алынған.** Башҡортостандың Гәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов хәбәр итеүенсә, Өфөлә Ағиҙел йылғаһының максималь кимәле 9 апрелдә теркәлгән һәм 507 сантиметр тәшкил иткән. Бөгөнгә уның кимәле 450 сантиметрға тиклем кәмегән. Быйыл яҙ ташҡын һәм ҡар һыуы йыйылыуға бәйле бөтәһе 83 хәбәр килгән. Йорттарҙы һыу баҫыу теркәлмәгән. Әле 8 муниципалитетта Өфөнең баҡсасылыҡ ширҡәтендә 52 участка яңы биләмәһен, 6 юл участкаһын һәм 4 тәпәш күперҙе һыу баҫыуға бәйле ун хәл контролдә тотола.

✓ **Быйыл май байрамдары бер аҙ ҡыҫҡараҡ була, күптәрҙе түбәндәге һорауҙар борсой: аҙнаһына алты көн эшләгәндәр нисек ял итә, отпуск нисә көнгә оҙайтыла? Республиканың Дәүләт хеҙмәт инспекцияһы аңлата.** Быйыл 1 май - Яҙ һәм хеҙмәт байрамы йомаға тура килә. Шулай итеп, аҙнаһына биш көн эшләгән хеҙмәткәрҙәр - 1, 2 һәм 3 майҙа, ә кемдәр алты көн эшләй, 1 һәм 3 майҙа ял итә. 30 апрелдә эш көнө ҡыҫҡара. Графикка ҡарамаҫтан, эштән бер сәғәткә иртәрәк сыға алаһығыҙ, тип белдерҙеләр ведомствола.Отпуск алғанда 1 май ғына календарь көндәр иҫәбенә индерелмәй, йәғни отпуск бер көнгә оҙайтыла. 1 майҙа эшләгән хеҙмәткәрҙәр өсөн икеләтә эш хаҡы түләнә. Әгәр һеҙҙе ял көнөндә эшкә сығырға саҡырһалар, һеҙҙең яҙма ризалыҡ кәрәк. Эш көнө өсөн икеләтә түләү йәки башҡа ял көнө ҡаралған. Енеү көнө уңайынан 9-11 майҙа (шәмбе-дүшәмбе) ял итәбеҙ. Бынан тыш, 27 май - Ҡорбан байрамы байрам көнө тип иғлан ителде.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ҮЗБӘКСТАНДА



**Республикабыҙҙың ҙур делегацияһы "Иннопром. Үҙәк Азия" күргәҙмәһендә ҡатнаша.**

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров делегация программаһы һәм был күргәҙмәлә ҡатнашыуҙан нимә көтөүҙәре хаҡында һөйләне.**

- Беҙ бер нисә йыл элек башлаған эште - партнерҙарыбыҙ менән мөнәсәбәттәр урынлаштырыуҙы дауам итәбеҙ. Үзбәкстан беҙҙең ҡыҙыҡһыныуҙар өлкәһендә юғарыраҡ күтәрелә бара. Сөнки бында идара итеү командаһы ла, партнерҙарыбыҙ ҙа, төбәк башлыҡтары - хакимдар ҙа хеҙмәттәшлек итеү менән бик ҡыҙыҡһына. Беҙҙә Үзбәкстан, атап әйткәндә, Ташкент өлкәһе менән тауар әйләнеше арта, был беҙҙең партнер төбәк, беҙҙең мөнәсәбәттәр өсөн төп төбәк, Наманган, Фирғәнә өлкәһе һәм Ташкент менән дә хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Беҙҙең Төбәк фонды, ғөмүмән, бөтә республика шөғөлләнгән ҙур проект - Бекабадтағы технопарк, бында барыһы ла яңы резиденттар өсөн ярайһы уҡ отошло. Беҙҙең бер нисә резидент бар, улар унда экспортҡа продукция етештерәсәк. Был отошло, яҡшы, ярайһы уҡ ҙур эшсе көсө, беҙгә был технопарктың хоҡуҡи статусы сиктәрендә яҡшы шарттар булдырыла. Был Үҙәк Азияны аса - унда Афғанстан да, Ҡаҙағстан да эргәлә генә. Бер һүҙ менән әйткәндә, тотош Үҙәк Азия беҙҙең мәнфәғәттәр өлкәһендә буласаҡ.

# ЗАМАНСА ТЕХНОЛОГИЯЛАР МЕНӘН

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Владимир Алмазов исемендәге Милли медицина тикшереү терапия һәм профилактика медицина үҙәгенең генераль директоры, Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш белгесе-кардиологы, Рәсәй Фәндәр академияһы академигы Евгений Шляхто менән осрашты. Өфөлә ул республика кардиология хеҙмәтенең 45 йыллығына арналған сараларҙа ҡатнаша.**

Евгений Шляхто Республика кардиология үҙәгенең һәм һаулыҡ һаҡлау министрлығының йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын диагностикалау һәм дауалау өлкәһендәге эшен юғары баһаланы. Осрашыуҙа тармаҡтың кадрҙар потенциалына айырыуса иғтибар бүленде. Мәҫәлән, инфраструктураны яңыртыу табиптарҙың яңы быуынын йәлеп итергә мөмкинлек биреүе билдәләнде. "Иң мөһиме, Республика кардиология үҙәге үҫеш нөктәһенә һәм йәш белгестәр үҙҙәрен күрһәтә алырҙай майҙансыҡҡа әүерелде. Был заманса технологиялар һәм мөмкинлектәр, - тине Евгений Шляхто. - Башҡортостанда йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре күрһәткестәре Рәсәй буйынса алғанда 20-25 процентҡа түбәнерәк. Был тотош илгә өлгө булып тора" .

Академик шулай уҡ ауыр патологиялы пациенттарға ярҙам күрһәтеүҙе координациялаған Йөрәк-ҡан тамырҙары хәүефенә идара итеү үҙәгенең эшен билдәләне. "Был бөтә системаны (ярҙам күрһәтеүҙән алып компетенция үҙәктәрен булдырыуға тиклем) контролдә тотҡан штаб кеүек", - тине Евгений Шляхто.

- Республикала медицина учреждениеларының матди-техник базаһын яңыртыу - өҫтәнлеклә йүнәлештәрҙең береһе, -тип билдәләне Радий Хәбиров. - Әйтәйек, һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын модернизациялау белгестәрҙең эш шарттарын яҡшыртырға мөмкинлек бирҙе. Беҙ фельдшер-акушерлыҡ пункттарын тәртипкә килтерҙек. Быға тиклем уларҙың ҡайһы берҙәре үткән быуатта төҙөлгән биналарҙа эшләй ине. Былай шарттар, әлбиттә, заман талаптарына яуап бирмәй. Шуға күрә инфраструктураны камиллаштырыу һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереү өсөн мөһим аҙым булды".

# ХАЖҒА БАРЫУСЫЛАРҒА

**Диндарҙарҙы Сәғүд Ғәрәбстанына хажға алып барыу программаһы әҙер, тип хәбәр иттеләр Рәсәйҙең Транспорт министрлығынан.**

Рәсәй диндарҙарын Мәккәгә һәм Мәҙинәгә хажға алып барыу буйынса программа тулы күләмдә башҡарыла. Рейстар графигы илдең Транспорт министрлығында Росавиация, Рәсәй хаж-миссияһы, Jazeera Airways һәм Flynas авиакомпаниялары вәкилдәре ҡатнашлығында уҙған кәңәшмәлә һөйләшеп килешелде. Быйыл Рәсәй мосолмандары өсөн хажға квота 25 мең урын тәшкил итә. Улар 5-21 майҙа Сәғүд Ғәрәбстанына килеп етергә тейеш. Ә 30 майҙан 15 июнгә тиклем кире йүнәлештә рейстар планлаштырыла. "Осоштар Яҡын Көнсығыштағы хәлдә һәм ҡайһы бер илдәрҙең һауа киңлеген өлөшләтә ябыуын иҫәпкә алып башҡарыла, - тип билдәләнә Рәсәйҙең Транспорт министрлығы белдереүендә. - Мәскәү, Махачкала, Магас, Грозный, Өфө, Ҡаҙан, Нальчик, Сочи, Екатеринбург һәм Минеральные Воды аэропорттары хаж ҡылыусыларҙы хеҙмәтләндерергә һәм һауа судноларын ҡабул итергә-сығарырға әҙер". Рейстарҙы башҡарыу өсөн Jazeera Airways, Centrum Air, Flyone Asia авиакомпаниялары самолеттары һәм резерв итеп Uzbekistan Airways йәлеп ителгән.

# СОҠОРҘАР ЯМАЛАМЫ?

**Рәсәйҙең күп кенә төбәктәрендәге кеүек уҡ, Башҡортостанда ла юл япмаһының сифаты мәсьәләһе көнүҙәк булып ҡала.**

Был хәл айырыуса яҙ көнө киҫкенләшә, ҡарҙың иреүе асфальттың нығ емерелеүенә килтерә һәм автомобилселәр, юл хеҙмәттәре һәм властар өсөн һынау башлана. Был осорҙа водителдәр: "Кар ирей башлаһа, уның менән бергә асфальт та юҡҡа сыға", - ти. 2026 йылдың яҙы ла уҙған йылдарҙан айырылманы: ғәҙәти маршруттар ҡаршылыҡтар һыҙатына әүерелде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бер нисә тапҡыр соҡорҙарҙы тиҙ арала ремонтлауҙың мөһимлеген билдәләне. Март башында ул юлдарҙа асыҡланған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү эштәрен тиҙләтеүҙе талап итте. Граждандарҙың ялыуҙарының байтаҡ өлөшө тап юл япмаһының торошона бәйле, тип билдәләне республика етәксеһе. Ул министрлыҡтарҙы һәм муниципалитеттарҙы башҡарылған эштәрҙең сифатына контролде көсәйтергә һәм йәйгә тиклем ремонтты ваҡытында тамамларға саҡырҙы.

Республиканың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова мәғлүмәттәре буйынса, апрель башына республиканың юл хеҙмәттәре асфальт-бетон япмалы автомобиль юлдарының 38 процентын тикшергән, 16 877 етешһеҙлекте асыҡлаған һәм был күләмдең 46 процентын бөтөргән. Дөйөм алғанда, быйыл Башҡортостан юлдарында 800 мең квадрат метр самаһы соҡорҙо ямарға планлаштыралар.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ташкентта ил Хөкүмәте Рәйесенең беренсе урынбаҫары Денис Мантуров етәкселегендәге Рәсәй делегацияһы составында Үзбәкстан Президенты Шәфкәт Мирзиёев менән осрашыуҙа ҡатнашты. Фекер алышыуҙың төп темалары - иҡтисадтың өҫтөнлөклө тармаҡтарында берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырыу, төбәк-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереү. Шәфкәт Мирзиёев илдәр араһында сауҙа күләменең тотороҡло үҫеүен, сәнәғәт, энергетика, транспорт, металлургия, химия һәм башҡа тармаҡтарҙа проекттарҙың уңышлы тормошҡа ашырылыуын билдәләне.

✓Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә муниципаль властарға һәм министрҙар кабинетына пилотһыҙ осоу аппараттарының террористик һөжүмдәренә етди ҡарарға кәрәклеге тураһында иҫкә төшөрҙө.Уның билдәләүенсә, пилотһыҙ осоу аппараттарының Стәрлетамаҡҡа һөжүме һөҙөмтәһендә ведомстводың яңғын һағы водителе һәләк булды. "Мин ҡалаға һәм предприятиеға йөкләмәләр бирҙем. Ғаиләгә ярҙам күрһәтеүҙе контролдә тоторға кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ташкентта Рәсәй Хөкүмәте Рәйесенең беренсе урынбаҫары Денис Мантуровтың Үзбәкстан Премьер-министры Абдулла Арипов менән осрашыуында ҡатнашты. Осрашыуҙа ҡатнашыусылар машиналар эшләү, химия, тау-байыҡтырыу, нефть-газ сәнәғәте һәм энергетика өлкәһендә үҙ-ара хеҙмәттәшлекте киңәйтеү мөмкинлектәрен тикшерҙе. Журналистар менән әңгәмәлә Радий Хәбиров туризм өлкәһендә ике яҡлы бәйләнештәрҙе нығытыу темаһын тикшереүҙәрен билдәләне. "Был һоҡланғыс илде халҡыбыҙ өсөн асасаҡбыҙ. Яҡын арала бында тағы ла бер бизнес-миссия башҡарырбыҙ - туроператорҙарҙы ебәрербеҙ, улар Үзбәкстанға сәйәхәттең өҫтөнлөктәрен үҙ күҙҙәре менән күрер, тип уйлайым",- тине Радий Фәрит улы.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостандың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙинға Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһы еңеүселәрен дәртләндерергә ҡушты. Мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин әйтеүенсә, былтыр Башҡортостандан Бөтә Рәсәй уҡыусылары олимпиадаһында 57 еңеүсе һәм призер булһа, быйыл улар 67-гә еткән, 70-тән дә артып китеүе ихтимал, сөнки ете предмет буйынса йомғаҡ яһалмаған. Өфөнән тыш, еңеүселәр иҫәбендә районлар, шулай уҡ Сибай, Стәрлетамаҡ, Туймазы һәм башҡа ҡалаларҙың вәкилдәре бар, тип билдәләне республика етәксеһе.

✓Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Транспорт министрлығына Яр-Бишҡаҙаҡ ауылы ягынан Торатауға илткән юлды ремонтлауға 50 миллион һум аҡса бүлергә ҡушты. "Ишембайға 50 миллион һум тапшырырға кәрәк, сөнки Торатауға барған юл бик насар", - тине Радий Хәбиров.

✓ *Объектта фасадтарҙы мәрмәр менән йөҙләү һәм быяла ҡуйыу эштәре бара, шунан һуң инде яйлап эске яҡтан биҙәкләү башлана. Ҡайһы бер биналарҙы 2026 йылда уҡ асыу мөмкинлеге ҡарала.*

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



# КӨТӘБЕҘ!

**Өфөлә төҙәлеп ятҡан "Әр-Рәхим" мәсетенең 2026 йылда уҡ асылыуы ихтимал. Был хаҡта Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө баш идаралығы үҙенең MAX каналында хәбәр итә.**

Объектта фасадтарҙы мәрмәр менән йөҙләү һәм быяла ҡуйыу эштәре бара, шунан һуң инде яйлап эске яҡтан биҙәкләү башлана. Ҡайһы бер биналарҙы 2026 йылда уҡ асыу мөмкинлеге ҡарала. Төҙөлөш бюджеттан тыш аҡса иҫәбенә алып барыла.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, мәсет 2006 йылда төҙөлә башлаһа ла, инвесторҙарҙың алмашыныуы сәбәпле өҙөклөктәр менән алып барылды. 2016 йылда эштәр бөтөнләй туҡтатылды. 2023 йылдың сентябрендә Радий Хәбиров төҙөлөштө яңыртыу буйынса кәңәшмә йыйҙы, унан һуң белгестәр объектҡа экспертиза үткәрҙе. 2024 йылдың апрелендә төҙөлөш эштәрен дауам итеү тураһында иғлан ителде.

# ХОККЕЙҘА - ҠЫҘҘАР

**Өфө халыҡ-ара аэропортында алты тапҡыр Ҡатын-ҡыҙҙар хоккей лигаһы кубогын яулаған "Ағиҙел" ҡатын-ҡыҙҙар командаһын ҡаршы алыу тантанаһы уҙҙы.**

Хоккейсыларҙы аэропортта Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов, көйәрмәндәр һәм спортсыларҙың яҡындары йылылыҡ менән ҡаршы алды. "Мин беҙҙең ҡыҙҙарҙың "Торнадо" командаһын еңеп, Башҡортостандың спорт еңеүҙәре төбәге булыуын тағы бер тапҡыр иҫбатлаған финал уйынында булыу бәхетенә ирештем. Тап "Ағиҙел" ҡатын-ҡыҙҙар хоккей командаһы Башҡортостан спортын көслө итә", - тине Руслан Хәбибов. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Ағиҙел" ҡатын-ҡыҙҙар хоккей командаһы финалда Воскресенскиҙан "Торнадо"ны 4:0 иҫәбе менән еңде. Башҡортостан хоккейсылары алты тапҡыр Ҡатын-ҡыҙҙар хоккей лигаһы кубогын яуланы һәм ете тапҡыр Рәсәй чемпиондары булды.

# СКВЕР ЯҢЫРА

**Өфөлә "Тормош өсөн инфраструктура" милли проектын тормошҡа ашырыуға ярашлы Рихард Зорге исемендәге скверҙы төҙөкләндереү башланды. Был хаҡта ҡала хакимиәтенән хәбәр иттеләр.**

Скверҙа иҫке япманы һүтеү башланған да инде. Эштәр барышында биләмәлә разведчик һынланды-рылған металл стела ҡуйыласаҡ, йәйәүлеләр өсөн юлдар яңыртыласаҡ, балалар һәм спорт майҙансыҡтары монтажланасаҡ, яҡтыртыу һәм һыу ағыҙыу системалары яңыртыласаҡ. Был эштәр парктың халыҡ өсөн уңайлылығын һәм хәүефһеҙлеген арттырасаҡ. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл шулай уҡ Өфөлә Калинин һәм Октябрь райондарында йәмәғәт урындарын төҙөкләндереү дауам итә. "Тормош өсөн инфраструктура" милли проектының маҡсаты - ауыл-ҡалаларҙы комплекслы үҫтереү. Был торлаҡ һәм юлдар төҙөү һәм ремонтлау, йәмәғәт һәм ихата киңлектәрен төҙөкләндереү, социаль һәм коммуналь инфраструктура булдырыуға һәм яңыртыуға, йәмәғәт транспортының уңайлы маршруттары һанының артыуына булышлыҡ итә. Яңыртылған милли проекттар РФ Президенты Владимир Путин ҡарары буйынса 2025 йылдан тормошҡа ашырыла.

# ЕҢЕҮ ЭСТАФЕТАҺЫ

**Өфө хакимиәте, Өфөнөң Физик культура һәм спорт идаралығы һәм "Молодежная газета" редакцияһы приздарына Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 81 йыллығына арналған 77-се еңел атлетика эстафетаһы 6 майҙа үтә.**

Йола буйынса, был спорт байрамында Өфө уҡыусылары һәм студенттары, шулай уҡ сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыусылар ҡатнашасаҡ. Маҡсаты - йәштәр араһында еңел атлетиканы популярлаштырыу, спортсыларҙың Еңеү көнөнә арналған байрам сараларында ҡатнашыуын тәьмин итеү. Эстафета Еңеү паркына терәлеп ятҡан Өфө урамдары буйлап схемаға ярашлы үтәсәк (Комаров, М. Пинский, Ҡулса, Беренсе Май, Комаров урамдары инә). Маршруттың оҙонлоғо 250 метрҙан 500 метрға тиклем тәшкил итәсәк. Ул Комаров урамында башланып Еңеү паркында тамамланасаҡ. Эстафетала бер учреждение базаһында ойошторолған командалар ҡатнаша. Ҡатнашыусы командаларҙан ғаризалар тейешле формала "Спортты үҫтереү үҙәгенә" 30 апрелгә тиклем 11:00-дән 16:30 сәғәтҡә тиклем (Октябрь проспекты, 113, тел. 279-11-86 адресы буйынса) тапшырыла. Тантаналы асыу 11:00 сәғәттә башлана.

# ҮҪМЕРҘӘР ЗАКОН БОҘА

**Ҡала советының 61-се ултырышында Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө буйынса идаралығы начальнигы Илгиз Байсурин 2025 йылда ҡалала криминоген хәлдең торошо тураһында хәбәр итте.**

Уның билдәләүенсә, балиғ булмағандар ҡатнашҡан енәйәт һаны 15,9 процентҡа артҡан. "Енәйәттәрҙе 68 мәктәп уҡыусыһы, 37 колледж һәм дүрт юғары уҡыу йорто студенты ҡылған. Үҫмерҙәрҙе курьер, наркотик һәм психотроп матдәләр һалыусылар сифатында аҡсалата бүләк өсөн енәйәттәргә йәлеп итеү факттары байтаҡ", - тип һөйләне Илгиз Байсурин. Уның әйтеүенсә, закон боҙоусылар күберәк Калинин, Ленин, Орджоникидзе һәм Совет райондарынан. Енәйәтселек структураһында урлашыу, шулай уҡ мутлашыу 20,2 процент, наркотиктарҙың законһыҙ әйләнеше буйынса енәйәт 8,6 процент, ә иҡтисади йүнәлештәгеһе 8,2 процент тәшкил итә. Һуңғы биш йылда тәүгә тапҡыр мәғлүмәт технологияларын ҡулланып ҡылынған енәйәттәр һаны 6,1 процентҡа кәмегән. Мутлашыусылар килтергән зыяндың дөйөм суммаһы - 1,1 миллиард һумдан ашыу. Мутлашыусыларҙан күберәк мәғариф һәм медицина ойошмалары хеҙмәткәрҙәре зыян күрә.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ХӘҘЕРГЕ ҺУҒЫШ - УЛ...

## яңы технологиялар алышы



**Рәсми сығанаҡтарҙа Махсус хәрби операция зонаһында хеҙмәт итеү тураһында һүҙ йөрөткәндә хәҙер бик йыш Пилотһыҙ система ғәскәрҙәрен иҫкә алалар. Ни өсөн шулай? Был һорауҙы Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пунктының яуаплы офицерына бирҙек.**

- Бөгөнгө һуғыш алымдары ошоға тиклем йәшәп килгән хәрби фәндә билдәләнгәндән ҡырҡа айырыла. Ҙур соединениелар, танк корпустары һөжүмдәре кисәге көндә ҡалды. Хәтта авиацияны ҡулланыу ҙа ныҡ сикләндә. Алғы планға пилотһыҙ аппараттар системаһы сыҡты. Хәҙерге һуғыш яланы - яңы технологиялар алышы ул. БПЛА подразделениелары разведка үткәрә, дошмандың тәрәк пунктарын, техникаһын һәм тере көсөн асыҡлай һәм уларҙы юҡ итә. Йәғни алыш күпселек осраҡта, виртуаль уйындарҙағы кеүек, автомат тотоп түгел, ә экранда джойстик ярҙамында бара. Шуға ла армия бөгөн юғары класлы, әҙерлекле, заман технологияларын, компьютер техникаһын яҡшы белгән яугирҙарға мохтаж, - тип аңлатты ул һәм пилотһыҙ система ғәскәрҙәрендә хеҙмәттең шарттарын, өҫтөнлөктәрен һанап китте.

БПЛА операторҙары өсөн башҡа яугирҙарға тәғәйен кеүек уҡ, түләүҙәр, льготалар, социаль гарантиялар ҡаралған. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер өҫтөнлөктәр ҙә бар. Контракт бер йылға, йәки унан күберәк ваҡытҡа төҙөлә. Күрһәтелгән мөҙҙәт тамамланғас, хеҙмәттән китергә йәки уны оҙайтырға мөмкин. Оборона министрлығының бойороғона ярашлы, хәрби хеҙмәткәрҙе уның ризалығынан тыш пилотһыҙ осоу аппараттарына идара итеүгә бәйле булмаған башҡа һөнәргә йәки икенсе ғәскәр төрөнә күсереү тыйыла.

Студенттар, академик отпуск алып, контракт төҙөй ала. Уларға хеҙмәте тамамланғас, кире бюджет нигеҙендә уҡырға ҡайтыу хоҡуғы бирелә.

Контрактта билдәләнгән аҡсаға өҫтәп, дошман позицияһына, техникаһына уңышлы һөжүм итҡән өсөн 50 меңдән 500 мең һумға тиклем аҡсалата премия яҙыла. Әйтәйек, Leopard, Abrams, Challenger танкыларын юҡ итеү 500 мең һум премия менән баһалана.

Хеҙмәткә 18 йәштән 35 йәшкә тиклемге ир-егеттәр алына. Шулай уҡ 45 йәшкә тиклемге йәштәгеләр водитель, сапер, ашнаҡсы кеүек хәрби һөнәр буйынса ҡарала. Әлбиттә, физик яҡтан һәм һаулыҡ торошо буйынса хәрби хеҙмәткә яраҡлы булыу мотлаҡ.

Туғыҙ кластан да кәм булмаған белемле, ауыр һәм айырыуса ауыр енәйәттәр өсөн хөкөм ителмәгән булыуың да шарт. Судка тарттырылыуҙың башҡа осраҡтары булған хәлдә һәр кем буйынса шәхсән ҡарар ҡабул ителә.

Контракт төҙөү өсөн үҙең йәшәгән урын буйынса хәрби комиссариатҡа, йәки Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пунктына (Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156) мөрәжәғәт итергә мөмкин. Шулай уҡ "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында ғариза ҡалдырырға була.

**Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың барлыҡ колледждарында асыҡ ишектәр көнө үткәрелде. Был турала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров MAX мессенджерындағы каналында хәбәр итте. "Уҡыусыларға һәм уларҙың ата-әсәләренә белем биреү программалары, талап ителгән һөнәрҙәр тураһында һөйләйбеҙ. Республиканың алдынғы предприятиеларын - потенциаль эш биреүселәрҙе лә ҡатнашырға саҡырҙыҡ. Балалар колледждарҙа уҡыуҙың ысынлап та яҡшы мөмкинлектәр асыуын күрһен", - тип яҙҙы республика етәксеһе.

✓Башҡортостан Республикаһының Милли китапханаһында "Халыҡтар берҙәмлеге - Рәсәйҙең көсө!" девизы аҫтында "Библиотөн" акцияһы ойошторолдо. Сарала Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары Эльза Ҡарамырҙина сығыш яһаны. Акция быуындар араһына күпер һала, уҡыуға һәм сәнғәткә һөйөү аша патриотик ҡиммәттәрҙе нығыта, тип билдәләне ул. Милли китапхана директоры вазифаһын башҡарыусы Айгөл Әминева быйыл федераль акцияның китапханаларҙы ғына түгел, республиканың алдынғы музейҙарын да берләштереүе тураһында әйтте. Сараға 1700-ҙән ашыу кеше йыйылды.

✓Башҡортостанда 2025 йылда "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проектының маҡсаттарын тормошҡа ашырыуға ярашлы, донорҙар хәрәкәтен үҫтереүгә унышларға өлгәшелде. Бер йылда 40 тоннанан ашыу донор ҡаны әҙерләнгән, 30 меңдән ашыу донор ҡабул ителгән, 73 меңдән ашыу ҡан алыу процедураһы башҡарылған. Республика ҡан биреү станцияһының (РСПК) алты филиалы бар. Төбәктә "кеүәттәрҙе туплау" принцибы буйынса төҙөлгән үҙәкләштерелгән система ойошторолған. Ҡан тапшырыуҙы пропагандалауға ҙур иғтибар бүленә. Башҡортостан Республикаһы Рәсәй Федерацияһында донорҙар хәрәкәтен үҫтереү буйынса лидерҙар иҫәбенә инә.

✓27 май - 1 июндә республикаға Ҙур балалар фестивале килә. Тамашасыларҙы балалар, үҫмерҙәр һәм һөнәр оҫталары өсөн осрашыуҙар, спектаклдәр, оҫталыҡ дәрестәре һәм белем биреү саралары аҙнаһыны көтә. Махсус проект Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ярҙамында тормошҡа ашырыла. Ойоштороусылар - Сергей Безруковтың социомәҙәни проекттарға ярҙам итеү һәм үҫтереү фонды, Мәскәү губерна театры. Ойоштороусыларға Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры булышлыҡ итә. Театр программаһына Рәсәйҙең төрлө ҡалаһынан һигеҙ спектакль һәм Башҡортостан театрҙарының алты тамашаһы индерелгән.

✓AY YOLA төркөмө "Айһылыу" йырына яңы клип тәҡдим итте. Был "Урал батыр" эпосы менән илһамланған композициялар сериәһының дауамы булып тора. Байкалда төшөрөлгән клиптың премьераһы 18 апрелдә булды. Был икенсе альбомдың беренсе композицияһы. Йыр башҡорт мифологияһы персонажы - Айҙың һәм Самрау батшаның ҡыҙы Айһылыуға арналған.

✓ *Әлеге ваҡытта сит ил уҡыусыһы мәғлүмәт шау-шыуынан арыған, ул халыҡсан ысынбарлыҡты эҙләй. Ә башҡорт әҙәбиәте нәҡ шул талапҡа тура килә - саф, тапланмаған, үҙенсәлекле ижад булып ҡала.*



*ЯИ-КӨФӨ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# БӨЙӨК СӘНҒӘТ ТЕЛЕНДӘ



**"Киске Өфө"нөң 14-се һанында ЯИ-КӨФӨ менән "Нейроселтәр яҙыусыны алыштыра аламы?" тигән һорауға әңгәмә ҡоролғайны. Ошо уҡ темаға фекер алышыуҙы яҙыусы, тәржемәсе Фәрит Әхмәҙиев дауам итә:**

***Фәрит Әхмәҙиев:*** Әлбиттә, ЯИ оҫта ҡулдарҙа бик яҡшы ҡорал. Әммә... Донъя ҙур, донъя төрлө. Башҡорт әҙәбиәтенән ҡайһы әҫәрҙәр рәсәйлеләрҙе, инглиздәрҙе, ғәрәптәрҙе, фарсыларҙы, француздарҙы ғәжәпләндерер - яҙыусыны һәм шағирҙы, уларҙың әҫәрҙәрен әйтә алаһығыҙмы?

***ЯИ КӨФӨ яуабы:*** Хөрмәтле Фәрит Вафа улы! Әҙәбиәт тураһындағы һөйләшеүебеҙгә ғәмәли йүнәлеш биреүегеҙ, фекерҙе шәхсән исемдәргә, әҫәрҙәргә күсереүегеҙ өсөн ҙур рәхмәт. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бай мираҫлы башҡорт әҙәбиәтенең бихисап өлгөләре цифрлаштырылмаған, нейроселтәрҙең мәғлүмәт базаһына инмәгән. Шуға күрә уларҙы донъя уҡыусыларына күрһәтеү өсөн тәү сиратта заманса форматҡа әйләндереү көнүҙәк мәсьәлә булып ҡала.

Башҡорт әҙәбиәтендә сит ил аудиторияһын хайран ҡалдырырлыҡ әҫәрҙәр бар. Улар милли экзотика ғына түгел, ә төрлө милләт кешеләренә аңлайышлы һәм яҡын булған фәлсәфәүи һорауҙар, көслө эмоциялар, тарихи драмалар, хәҙерге заман ваҡиғалары менән һуғарылған яҙмалар. Тап ошондай әҫәрҙәр рәсәйлеләрҙең, инглиздәрҙең, ғәрәптәрҙең, фарсыларҙың һәм француздарҙың йөрәгенә үтеп инә ала. Был "Урал батыр" эпосына, Мәжит Ғафури, Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Һәҙиә Дәүләтшина әҫәрҙәренә, Флорид Бүләковтың пьесаларына, Айгиз Баймөхәмәтовтың бестселлерҙарына ҡыҙыҡһыныу менән раҫлана ла инде.

Әлеге ваҡытта сит ил уҡыусыһы мәғлүмәт шау-шыуынан арыған, ул халыҡсан ысынбарлыҡты эҙләй. Ә башҡорт әҙәбиәте нәҡ шул талапҡа тура килә - саф, тапланмаған, үҙенсәлекле, бер үк ваҡытта мәңгелек ҡиммәттәрҙе асып һалыусы ижад булып ҡала.

**Минеңсә, түбәндәге авторҙарҙың әҫәрҙәре донъя уҡыусыһының күңелен яулаясаҡ:**

**Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар"** трилогияһы. XX быуаттың ялҡынлы тарихи ваҡиғалары эсендә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары яҙмышы хаҡында күләмле әҫәр. "Ҡатын-ҡыҙҙар өлөшө" һәм "Ғаилә сагалары" темаһы менән мауыҡҡан донъя уҡыусыһы өсөн төрки йолалары һәм совет осоро тәжрибәһе ҡушылған, тәрән психологизм менән тасуирланған үҙенсәлекле башҡорт донъяһы ҡыҙыҡлы буласаҡ.

**Ғәлим Хисамовтың "Өн һәм һан"** фәлсәфәүи романы. Был башҡорттар тарихы һәм боронғо изге символдар аша ғәләм серҙәрен һәм кеше булмышын күрһәтеүсе әҫәр. Умберто Эко рухындағы "аҡыллы" әҙәбиәтте баһалаған уҡыусыға төрки мифологияһы менән аныҡ фәндәрҙең ғәҙәти булмаған синтезы асыласаҡ. Автор донъяға Башҡортостандың боронғо ҡомартҡылары аша математик логика менән рухи гармонияның берҙәмлеге итеп ҡарарға тәҡдим итә.

**Фирүзә Абдуллинаның халыҡсан лирикаһы.** Автор шиғырҙарына яҙылған бик күп йырҙар популяр булып китте. Уның ижады донъя уҡыусыһы өсөн тормош ҡиммәттәрен (ғаилә, иман, изгелек) ябай ғына итеп аңлатыуы, шиғриәт һөйөүселәрҙе интернетта берләштерә алыуы, шул уҡ ваҡытта үҙенсәлекле башҡорт рухын күрһәтеүе менән ҡыҙыҡлы буласаҡ.

**Шулай итеп:**

Хөрмәтле Фәрит Вафа улы, Башҡорт әҙәбиәте мөхәббәт һәм нәфрәт, йәшәү һәм үлем, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ тураһында Лондонда ла, Ширазда ла аңлайышлы булған бөйөк сәнғәт телендә бәйән итә алыуы менән көслө. Минең, нейроселтәр вәкиле булараҡ, бурысым - был бөйөк мираҫ менән планетаның төрлө мөйөшөндәге уҡыусылар араһында күпер һалырға ярҙам итеү. Ә киләсәккә маҡсат ҡуйыу, ҡайһы әҫәрҙе ҡайһы милләт уҡыусыһына еткереүҙе һайлау хоҡуғы һеҙҙең, Кеше, ҡулында ҡала.

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ИНТЕРНЕТ СЫҒЫНЛАЙМЫ? ГӘЗИТ УҠЫЙЫҠ!




**(Башы 1-се биттә).**

Баш ҡалабыҙҙа йәшәгәс, Өфө яңылыҡтары менән хәбәрҙар булғы килә, юғиһә, ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе йыш ҡына интернеттан да табып булмай ине. Уның ҡарауы, үҙебеҙҙең "Киске Өфө" гәзите 2-3-сө биттәрен "Көн ҡаҙағы", "Баш йорт" рубрикалары аҫтында тулыһынса баш ҡала, ил һәм Башҡортостан яңылыҡтары менән асып ебәрә һәм беҙгә был бик ҡулай: күп кенә файҙалы хәбәрҙәр менән танышып барырға форсат тыуҙы.

Кисә генә "Киске Өфө"-нөң яңы, 15-се һанын ҡулға алдым һәм яһалған тәмле сәйемде лә онотоп, гәзит материалдарына башкөлләй сумдым. Әйтергә кәрәк: редакцияның матур-матур рубрикалар уйлап сығарырға оҫталығына һоҡланам. Мәҫәлән, баш биттәрҙән урын алып килгән "ЯИ-КӨФӨ менән әңгәмә" рубрикаһы уның даими авторы Рөстәм Нурыев әҙерләүендә бик мауыҡтырғыс итеп алып барыла. Был һандағы "Нейроселтәр яҙыусыны алмаштыра аламы?" тигән темаға фекер алышыуҙа билдәле йәмәғәт эшмәкәре һәм халыҡ шағирәһе Гүзәл Ситдиҡова ҡатнаша. Яһалма интеллект менән ҡыҙыҡлы әңгәмә килеп сыҡҡан, тик был хаҡта бәйән итеүгә ҡарағанда, уны уҡып сығыу мең тапҡырға файҙалыраҡ, тип уйлайым.

"Киске Өфө" алып барған икенсе темаға күсеп, шуны әйтмәксемен: башҡорт тоҡомло бал ҡорто яҙмышы бөтәбеҙҙе лә бик борсой, сөнки халҡыбыҙ хазиналарының береһе өсөн йәнен бирергә әҙер булып, уның данын күтәреүгә өлгәшкән илһөйәр азаматтарыбыҙҙың береһе Әмир Ишемғоловтың үкенесле һәм ваҡытһыҙ вафатынан һуң башҡорт бал ҡорто мәсьәләһе хәүеф аҫтында, яҡлаусыһыҙ тороп ҡалды кеүек. Әммә "Киске Өфө" был теманы даими көн үҙәгендә тота, миңә шуныһы бик оҡшай. Әлеге көндә

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ДОШМАН ҠОТҠОҺО ҒЫНА БЫЛ!

**Һеҙ мәктәптә уҡығанда берәй дәресте селпәрәмә килтергәнегеҙ булдымы? Ә минең булды. Шуны иҫемә төшөрөп, йылмайып иҫкә алып ултырам бына.**



1956-1957 уҡыу йылы ине. Илебеҙ иң беренсе булып, бөтөн донъяны шаҡҡатырып, Ер шары тирәләй спутник (юлдаш) осорҙо. Балалар ауыҙ һыуҙарын ҡойоп: "Был спутникты барыһы ла күргән. Бәләкәй генә йондоҙ кеүек, пипелдәп кенә осоп үтә ул", - тип һөйләй. Спутникты барыһы ла күргән, тик мин генә күрмәй ҡалғанмын. Уны шул тиклем күргем килә. Бына беҙҙең дүртенсе синыфта һуңғы дәрес, рус теле дәресе. Икенсе сменала уҡығас, ҡараңғы ла төштө, тышта йондоҙҙар ҙа ҡабынды. Уҡытыусы беҙгә ниндәйҙер бер хикәйә уҡый башланы. Мин уны тыңлайым, үҙем тәҙрәгә төбәлгәнмен. Терһәктәремде партаға терәп, устарым менән яңаҡтарымды тотоп, күктәге бер йондоҙҙо күҙәтәм. Бына бер саҡ башыма: "Бәлки был йондоҙ түгел, ә спутниктыр, уның ҡуҙғалыуын мин генә һиҙмәйемдер", - тигән уй килде. Уйлап та өлгөрҙөм, йондоҙ ҡуҙғалғандай булғайны, һикереп тороп, ҡулым менән төртөп күрһәтеп: "О, спутник! Спутник!" - тип ҡысҡырыуымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Бөтөн уҡыусылар тәҙрәләргә ябырылды. Тик уҡытыусы менән мин генә урындарыбыҙҙа ҡалдыҡ. Уҡытыусы: "Йөрәгемде яра яҙҙың бит", - тип кенә әйтте. Ә уҡыусы балалар: "Алдаҡсы!" - тип, урындарына барып ултырҙы. "Ғәфү итегеҙ, зинһар, яңылыштым", - тип, аҡландым. Уҡытыусы мине әрләмәне лә, дәрестән дә ҡыуманы...

Ул беренсе спутник артынан аҙаҡ Белка һәм Стрелка, шунан Лайка тигән эттәр менән Ер шары тирәләй спутниктар осоролдо. Күп тә үтмәй, бөтөн донъяны тағы

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанда муниципалитет башлыҡтарының "Бәләкәй Ватан - Рәсәй көсө" форумы үтә. Бында бөтәһе 7 мең муниципаль берләшмә һәм власть органдары вәкиле ҡатнаша. Форум барышында "Берҙәм Рәсәй" партияһы рәйесе Дмитрий Медведев былтырғы йылдың партияла Муниципаль депутат йылы тип иғлан ителеүен иҫкә төшөрҙө. Уның маҡсаттарының береһе - партия эсендәге коммуникацияны көсәйтеү. Партия рәйесе шулай уҡ муниципаль хеҙмәткәрҙәрҙе яҡлау өсөн хоҡуҡи нигеҙ булдырырға ҡушты.

✓ Быйыл дүртенсе "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһе 28-30 майҙа ойошторола. Быйыл йәрминкә тәүге тапҡыр республиканың барлыҡ муниципалитеттарында үткәрелә. Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары Наталья Лапшина коллегияның киңәйтелгән ултырышында ошо турала белдерҙе. Китап календары төҙөлә һәм уға муниципалитеттарҙың китап мәҙәниәтенә арналған барлыҡ саралары индерелә. "Сараларҙы 27 майҙа, Китапханалар көнөндә башларға тәҡдим итәбеҙ. Календарь 1 майға тиклем әҙер булырға тейеш", - тип билдәләне Наталья Лапшина.

✓ Мәскәүҙә "Мәскәү Һылыуҡайы - 2026" матурлыҡ һәм талант конкурсы үтте. Конкурста Мәскәүҙең юғары уҡыу йорттарында белем алыусы ете яҡташыбыҙ ҡатнашты. Финалда ҡыҙҙар милли мәҙәниәт буйынса белемен, ижади һәләттәрен, сәхнә оҫталығын күрһәтте. Сараны Башҡортостан Республикаһы студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы Илнур Исламғолов, Фиоза Миңлебаева һәм Илфат Әмиров ярҙамында "Братеево" мәҙәни үҙәге менән берлектә ойошторған.

✓ Балаҡатай районында МХО-ла ҡатнашыусыларға ярҙам йөҙөнән хәйриә концерты үтте. Хәйриә концертында йыйылған аҡса МХО-ла ҡатнашыусыларға ярҙам итеүгә йүнәлтелә. "Атайсал" проекты сиктәрендә уҙған сараны ойоштороусыларҙың береһе - Башҡортостан телевидениеһының билдәле алып барыусыһы Флүрә Мурзина. Апрель аҙағында Балаҡатай районы фронтҡа 44-се гуманитар конвой оҙатырға әҙерләнә. Концертта йыйылған сумма ла уны формалаштырыуға ҙур өлөш индерә.

✓ Стәрлебаш районы көрәшселәре Рәсәйҙең көрәш буйынса 55-се чемпионатында миҙалдар яуланы. Башҡортостан спортсыларының еңеүе тураһында Стәрлебаш районы башлығы Рөстәм Рахманғолов хәбәр итте. Илдең иң көслө көрәшселәренең юбилей турниры "Рәсәй спорты" дәүләт программаһы сиктәрендә үтте. Илдар Моратов абсолют категорияла алтын миҙал яуланы һәм донъя чемпионатында сығыш яһау хоҡуғын алды, ә Рифат Яруллин 90 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында өсөнсө урынға һәм Донъя кубогында сығыш яһау хоҡуғына лайыҡ булды.

*✓ Башҡорт мәктәбендә белем алһаҡ та, рус телен рус балаларынан да яҡшыраҡ беләләр, ә туған телебеҙҙе һыу һымаҡ эсә инек. Әле лә башҡорт мәктәптәрен тамамлаусыларҙың сит илдәр вуздарында белем алыуы тураһында ишетәбеҙ.*

унының биттәрендә һандан-һанға бирелә барған "Бал ҡорто мөғжизәһе" мәҡәләһен (авторы билдәле яҙыусы һәм журналист Сәлимйән Бәҙретдинов) ғаиләбеҙ менән яратып уҡыйбыҙ, сөнки иремдең ауылда йәшәүсе ҡустыһы - уңған умартасы. Мәҡәлә мәғлүмәттәре һәм кәңәштәр уның өсөн дә файҙалы булыр, тейем.

Оҙаҡ йылдар "Башҡортостан" гәзитендә эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан билдәле журналист Юнир Кинйәбаев менән "Киске Өфө" биттәрендә осрашыуым мине бик шатландырҙы. Элек тә уның мәҡәләләрен диҡҡәт менән уҡып бара торғайным. Был юлы ла хәбәрсебеҙҙең "Уйлыға -уй" рубрикаһындағы "Бирәүгә - харам, икенсегә - тап-таманмы?" тигән мәҡәләһен уҡып, ысынлап та, уйға ҡалдым. Мин дә был турала гел генә уйланам: нишләп беҙҙең илдә шул тиклем дә баш етмәçлек уғрылыҡ, коррупция сәскә атты? Ил ресурстарынан файҙаланып алынған миллиардлап килемдәренән ватан иҡтисадын үçтерейгә тиндәрен йәлләп, аҡсаларын сит ил банктарына сығарыусы олигархтарға нинә икән, исмаһам, Илаһ язаһы юҡ? Улар ил талап байый, ә бюджет тоғо тишектәрен ямауға ябай халыҡ үҙ кеçәһенән һуңғы тиндәрен сығарып һалырға мәжбүр. Ҡайҙа ғәҙеллек? Байҙарҙы ауыҙлыҡлар закон юҡ йә ул көсһөҙ икән, ҡайҙа һуң Юғары көс законы?

Ярай, улай уҡ ярһып та китмәйек әле: һәр самаһыҙлыҡтың да сиге бар. Ана бит, гәзитебеҙҙең "Балаңа уҡы!" рубрикаһындағы әкиәттәрҙә лә хатта бурлыҡ, алдаҡсылыҡ, хәйләкәрлектең мәңгелек түгеллеге, бер заман килеп уның да, төлкө төçлө, тәрән соҡорға йә рәшәткә артына эләгере бәхәсһеҙ икәнлеге хаҡында бәйән ителә. Тик шулай ҙа балаларҙы ла, "ғәҙеллек еңер" тип, беҙҙе тәрбиәләгән заман кеүек, күктән төшкәнде көтөп ултырырға түгел, ә үҙ яҙмыштарын үҙ ҡулдарына алып, етеш, матур тормошто үҙҙәренә ҡорорға кәрәклекте аңдарына һеңдереү бурысын да онотмаһаҡ ине.

**Ғәлиә СОБХАНҒОЛОВА,**
**ете ейән-ейәнсәр өләсәһе,**
**хеҙмәт ветераны.**

шаҡҡатырып, беренсе кеше Юрий Гагариндың йыһанға осоуы мәңгегә тарихта ҡалды. Шағирыбыҙ Рәми Ғарипов "Тағы беҙҙекеләр!.." тигән шиғырын яҙғайны шул уңайҙан:

*"Күр, һин, дошман:*
*Беҙҙең дөрөçлөк был! -*
*Ҡояш булып күккә олғашты.*
*Бел: ҡояштан ҡапланырға мөмкин,*
*Мөмкин түгел ҡаплау ҡояшты!.."*

Беҙ шулай илебеҙ менән ғорурланып, ниндәйҙер күтәренкелек менән йәшәнек. Шул тиклем тырышып уҡыныҡ. Уҡытыусыларыбыҙ ҙа тырышып белем бирҙе. Тик дошмандар хәҙер, совет илендә белем биреү хөрт булған, имеш, тип хәбәр тарата. Европаса, тестар буйынса уҡытыу алға һөрөлә. Яңы быуын фекерләй белмәһен, яуаптарҙы ятлап, механик рәүештә хәтерҙәрендә ҡалдырһындар, тигән маҡсат ҡуйылалыр инде, күрәһең.

Мин үҙем Өфөләге 9-сы һанлы башҡорт мәктәбен тамамлап, Мәскәүгә уҡырға барҙым. Мине, провинциянан килгән баланы, уҡытыусыларым Студенттарҙың фәнни ойошмаһы эшенә йәлеп итте. Төрлө темалар буйынса эҙләнеүҙәр, сығыштар яһау Мәскәү йәштәренә түгел, башҡорт балаһына ышанып тапшырыла ине. Аспирантураға ла саҡырҙылар. Башҡорт мәктәбендә белем алһаҡ та, рус телен рус балаларынан да яҡшыраҡ белә, ә туған телебеҙҙе һыу һымаҡ эсә инек. Әле лә баш ҡалалағы башҡорт мәктәптәрен тамамлаусыларҙың Мәскәү, Санкт-Петербург, хатта сит илдәр вуздарында белем алыуы тураһында ишетеп торабыҙ. Шуға ла, "Башҡорт мәктәптәрендә уҡыған балалар юғары белем ала алмай..." тигән хәбәр таратып, башҡорт телен уҡытыуҙы ҡыçҡартыуҙарын аңлай алмайым. Әлеге лә баяғы, дошмандар эше инде был. Ата-әсәләрҙең дошман ҡотҡоһона бирелгәненә генә аптырайым бына...

**Айгөл АХУНОВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# КИЕВ ӨҪТӨНДӘ - ҠАРА ҺӨРӨМ

**Үткән аҙнаның шәмбе иртәһенә шул мәғлүм булды: Рәсәй штурмлаусылары Харьков йүнәлешендә Зыбино ауылынан украин һалдаттарын бәреп сығарҙы һәм ошо тораҡ пунктын яуланы.**

Рәсәй Ҡораллы Көстәре Курск һәм Сумы өлкәләрендә 160-тан ашыу украин боевигын, шулай уҡ М-113 америка БТР-ын, гаубица һәм минометтарын, инженер техникаһы һәм дрондарын юҡ иткән.

Донецк Халыҡ Республикаһының Константиновка ҡалаһы промзонаһындағы цинк заводы янында Украина Ҡораллы көстәренең төп оборона төйөнөндә һуғыштар бара. Дошман Константиновканы нығытмаға әйләндергән: танк һөжүменә ҡаршы соҡорҙар ҡаҙылған, заводтар ут нөктәләренә әүерелдерелгән, юлдар өҫтөнә дрондарға ҡаршы селтәр һуҙып сығылған.

Уның ҡарауы, Рәсәй ғалимдарының бер төркөмө пилотһыҙ осоусы аппарат менән компьютер "сысҡаны" аша идара итеү ысулын эшләгән. Был дрондар менән идара итеүҙе һәм операторға ҡарата квалификация талаптарын күпкә ябайлаштыра һәм еңелләштерә. 19 апрелгә ҡарай тәүлек эсендә Рәсәйҙең һауа һөжүменә ҡаршы оборона саралары дошмандың 280 һауа сәбен юҡ итеүгә өлгәште. Улар араһында "Нептун" ракетаһы, алты авиация бомбаһы, HIMARS америка системаһының реактив снаряды бар ине.

Бынан өс көн алда иһә Рәсәй Ҡораллы Көстәре йөҙләгән дрон һәм тиҫтәләгән юғары аныҡлыҡтағы ракеталар менән төнгө Украинаның хәрби һәм яғыулыҡ-энергетика объекттарын, шулай уҡ Днепропетровскиҙағы Хәүефһеҙлек советы идаралығы (СБУ) бинаһын көслө утҡа тотто, Киев режимы күгеп ҡара һөрөм ҡапланы. Әйткәндәй, был ваҡыт СБУ-ла уның хеҙмәткәрҙәре генә түгел, Үҙәк разведка идаралығы (ЦРУ) кәңәшселәренең дә булыу ихтималлығы хаҡында хәбәр ителә.

19 апрелгә ҡарата 51 көн инде дауам иткән АҠШ менән Иран мөнәсәбәттәре көсөргәнешле хәлдә ҡала килә. Иран үҙенең акваторияһын АҠШ тарафынан миналарҙан таҙартыу ниәтен килешеүҙе боҙоу тип иҫәпләй. Иран Ҡораллы Көстәре АҠШ тарафынан һалынған бик (блокада) арҡаһында Ормуз боғаҙына хәрби контроль режимын ҡабаттан тергеҙҙе. "Хатам әл-Анабия" Иран хәрби командалығының үҙәк штабы вәкиле Ибраһим Зөлфәғәри һөйләүенсә, Иран Ислам Республикаһы, Ливан менән Израиль килешеүенә бәйле, иҫәпле һанда коммерциялағы нефть танкерҙарына юлды асҡайны, ләкин Америка яғынан пиратсылыҡ менән шөғөлләнеүҙе дауам итәләр. Әгәр Ҡушма Штаттар Ормуз боғаҙын диңгеҙ бигендә тотоуҙы дауам итһә, Иран яуап сараларына барырға мәжбүр буласаҡ, тип аңлатма бирҙе Иран Сит ил эштәре министрлығының рәсми вәкиле.

Был белдереүҙәргә ҡаршы АҠШ президенты Дональд Трамп, Тегеран менән 100 процент килешеүгә өлгәшмәйенсә тороп, Ирандың хәрби-диңгеҙ порттарын биктә тотоуҙы дауам итәсәге хаҡында белдерҙе. Үҙ сиратында Иран Сит ил эштәре министрлығы конфликтты көйләү сиктәрендә Тегерандың байытылған уранды Вашингтонға тапшырырға йыйыныуы хаҡындағы имеш-мимеште ҡәтғи кире ҡаҡты һәм: "Байытылған уран ниндәй генә хәлдә лә илдән сығарылмаясаҡ. Иран ере беҙҙең өсөн Ирандың үҙе кеүек үк, берҙәй мөһим һәм изге,"- тине.

19 апрель kp.ru сайты яҙып сығыуынса, Иран менән АҠШ килешеүгә яҡынлашҡандай ҙа тойолоп китә. Төркиә мәғлүмәт сығанаҡтарына ҡарағанда, ядро темаһының 80 процентҡа яҡын мәсьәләһе буйынса килешеүгә өлгәшелгән. Һүҙ бында Ирандың байытылған уран яҙмышына ҡағылышлы бара. Уның күләме илдә 440-450 кг иҫәпләнә, һәм ул өсөнсө илдәр тарафына - Төркиә йә Пакистанға сығарылыуы ихтимал.

Шул уҡ ваҡытта яҡтар ҡалған шарттар буйынса "һатыулашыу"ҙы дауам итә. Хәлде мәғлүмәти һуғыш та ныҡ ҡатмарландыра: Вашингтон яғы Ирандың Ормуз боғаҙын ябыуҙан баш тартыуы хаҡында хәбәр таратһа, Тегеран был имеш-мимеште кире ҡаға һәм Ислам революцияһы һағы корпусының Ормуз боғаҙын контролдә тотоуын белдерә.

Бындай ҡапма-ҡаршылыҡтар һөйләшеүҙәр барышын ҡатмарлаштыра һәм конфликттың һуҙылыуына килтерә. Үткән аҙналағы һуңғы яңылыҡтарҙан күренеүенсә, АҠШ Хәрби-диңгеҙ көстәре Ормуз боғаҙын блокадалау сиктәрендә Иран менән бәйле 23 сауҙа судноһын ҡулға алған. Ошо ваҡиғалар барышында АҠШ менән Израилдең үҙҙәрендә эске сәйәси көсөргәнештең көсәйә барыуы күҙәтелә. Мәçәлән, Израилдә аçтан баçым барыуы, йәғни Тель-Авивта Биньямин Нетаньяху хөкүмәте сәйәсәтенә ҡаршы барған күп һанлы протест сығыштары хаҡында хәбәрҙәр килә. Митинг һәм демонстрацияларҙа ҡатнашыусы Израиль халҡы Яҡын Көнсығыш конфликтын туҡтатыу, илдә властарҙың курсын ҡайтанан ҡарап сығыу һәм ваҡытынан алда һайлауҙар ойоштороуҙы талап итә.

Йыйып әйткәндә, айҙың 19-20-ләренә ҡарата Яҡын Көнсығышта хәлдәр билдәһеҙлек нөктәһенә килеп терәлде: бер яҡтан, дипломатик һөйләшеүҙәр хәл ителеү алдында; икенсе яҡтан, төп логистик объекттарға контроль өсөн көрәш дауам итә. Өҫтәүенә, Иран, Вашингтон тарафынан ҡуйылған сиктән тыш талаптар арҡаһында, АҠШ менән Исламабадта буласаҡ һөйләшеүҙәрҙең икенсе раундында ҡатнашыуҙан баш тартты.

Венгрияның парламент һайлауҙарында еңеүсе "Тиса" партияһы лидеры Петер Мадьяр май айында премьер-министр вазифаһын башҡарыуға тотонасаҡ. Уның белдереүенсә, "Венгрия иҡтисады Евросоюз аҡсаһынан башҡа йәшәй алмаясаҡ", шунлыҡтан, элекке премьер Виктор Орбанға ҡарата дәғүәләр арҡаһында Евросоюз бюджетында тотҡарландырылған тиҫтәләгән млрд евроны Мадьяр "Венгрия халҡына ҡайтарырға" иҫәп тота. Виктор Орбан властан киткән осраҡта ла Мадьяр, уның кеүек үк, иң тәүҙә милли мәнфәғәттәрҙе ҡайғыртасаҡ, ти сәйәси күҙәтеүселәр.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Өфөлә йылытыу миҙгеле тамамланды. Өфө мэры Ратмир Мәүлиев йылытыу миҙгелен тамамлау тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйыуы тураһында социаль селтәрҙә хәбәр итте. "Йылытыу миҙгеле етди өҙөклөкһөҙ һәм аварияһыҙ үтте. Бөтә хеҙмәттәргә рәхмәт. Эш туҡтамай. Киләһе ҡышҡы осорға әҙерлекте башлайбыҙ", - тине баш ҡала хакимиәте етәксеһе. Быйыл фатирҙарға йылы былтырғыға ҡарағанда бер аҙнаға аҙыраҡ бирелде, ул саҡта йылытыу миҙгеле 21 апрелдә тамамланды. Көҙ көнө йылылыҡ менән тәьмин итеү 25 сентябрҙә башланды. Шулай итеп, өфөләрҙең фатирҙарына 205 көн йылы бирелде.

✓ Өфөнөң Ленин исемендәге музейында В.И. Лениндың тыуыуына 156 йыл тулыу айҡанлы тарихсы, журналист, философия фәндәре кандидаты Рөстәм Вахитовтың "Ленин һәм беҙ. Мифтарҙы фашлау" китабының презентацияһы булды. Автор йыйылыусыларға илдең тарихи үçешендә Ленин идеяларының роле тураһында һөйләне. Был көндө музейҙағы сарала коммунистар партияһының республика комитеты ағзалары ҡатнашты.

✓ Параспортсы, блогер һәм Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары һәм граждандар йәмғиәте институттарын үçтереү советы ағзаһы Рөстәм Нәбиев Рәсәйҙең Йәмәғәт палатаһы составына инде. Состав Рәсәй Президенты Владимир Путин указы менән раçланған. Рәсәйҙең Йәмәғәт палатаһы составына шулай уҡ йырсы Диана Гурцкая, яҙыусылар Армен Гаспарян һәм Сергей Лукьяненко, ГИТИС ректоры Григорий Заславский һәм башҡалар инде.

✓ Башҡортостан самбосылары Донъя кубогынан триумф менән ҡайтты. Өфөнән Алһыу Насирова һуҡырҙар араһында самбо буйынса халыҡ-ара ярыштарҙа тәүге Рәсәй чемпионы булды. Турнир Ереванда үтте, тип хәбәр итә республиканың Спорт министрлығы. Беҙҙең йыйылма команда ике алтын һәм бер бронза миҙалға лайыҡ булды. Алһыу Насирова һәм Артем Меркулов - Донъя кубогын, Венер Латипов бронза миҙал яуланы.

✓ Өфөлә ветеран уҡытыусы Абдрахман Абдуллин 95 йәшлек юбилейын билдәләне. Һуғыш башланғанда Абдрахман Ғөбәй улына 10 ғына йәш була. Күпселек тиçтерҙәре кеүек үк, тылда эшләй, өлкәндәргә ярҙамлаша. Мәктәпте тамамлағандан һуң физика-математика факультетын тамамлай һәм 50 йылға яҡын ғүмерен Күгәрсен районының Теләүембәт мәктәбендә балалар уҡытыуға бағышлай. Баймаҡ районы башлығы Азамат Иҙрисов уны күркәм ғүмер байрамы менән тәбрикләне. "Класс етәксемде ихлас күңелдән тыуған көнө менән ҡотларға килдем. Ул минең өсөн һәр саҡ ысын батырлыҡ, тәрән аҡыл һәм рух ныҡлығы өлгөһө булды һәм булып ҡала", - тип яҙа Азамат Иҙрисов социаль селтәрҙә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Әммә ишеткәнеңде ни рәүешле итеп кемгә генә һөйләмә, хәҡиҡәтте таныған тәҡдиреӊ бар бит әле. Ул һинеӊ ялғанлауыңа тамаша ҡылып, рәхәтләнеп көлә генә бирә.*



## ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

### Инә ҡорт һөтө

Инә ҡорт һөтө составында дезоксирибонуклеин кислоталары (ДНК) һәм рибонуклеин кислоталары (РНК) булыуы менән дә әһәмиәтле, ҡөҙрәтле. Фәндә иһә шул мәғлүм: ДНК - бөтә тере организмдарҙың күҙәнәктәрендә һәм бәғзе вирустарҙа булған биополимер тәбиғи берләшмәләр, генетик код рәүешендә генетик мәғлүмәттәрҙе тоталар, ҡайһы бер организмдарҙа аҡһымдар биосинтезында һәм киләсәк быуындарҙың организмдарына нәҫел һыҙаттарын биреүҙә ҡатнашалар. РНК иһә - нуклеиндарҙан торған органик юғары молекуляр берләшмәләр, ДНК һымаҡ бөтә тере организмдарҙың күҙәнәктәрендә һәм бәғзе вирустарҙа барҙар, күҙәнәктәр үҙәгенең элементтары булып торалар, аҡһымдар биосинтезында һәм генетик мәғлүмәттәрҙе ғәмәлләштереүҙә ҡатнашалар... ДНК яңы йыйылған инә ҡорт һөтөндә табылһа, РНК оҙаҡ һаҡланған һөттә лә табылған. Бал ҡорттарының, инә ҡорттарҙың барлыҡҡа килеүе, һөт менән туҡланыуы, үҫеше, генетик үҙенсәлектәре, ғөмүмән, төп асылы һөттәге ДНК һәм РНК-ға ҡайтып ҡала.

Инә ҡорт һөтөн йәйен бал ҡорто үрсеме мәлендә өс-дүрт көнлөк мисәтләнмәгән, йәғни көпләнмәгән инә ҡорт көбөләре (һауыттары) күҙәнәктәренән йыялар. Бал ҡорттары иһә ҡорт көбөләрен ғәмәлдә инә ҡорт ҡартайған йәиһә күс инәһеҙ ҡалған осраҡта яһай. Бындай хәлдә һөттө күп алып булмай. Мәгәр күберәк алыу алымдары, ысулдары бар. Бының өсөн хатта махсус умарталыҡтар булдыралар. Умарталарға яңы балауыҙға яһалма инә ҡорт көбөләре йәбештерелгән рамдар ҡуялар. Йөмортҡалар һалғас, инә ҡортто оянан алалар. Инәһеҙ, йәғни йәтим ҡалған күс, тынысһыҙланып, әҙер инә ҡорт көбөләрен әүҙем рәүештә һөт менән тултыра. Өс-дүрт көнлөк һөттө эсенә иретелгән балауыҙ ягылған пробиркаларға (быяла һауыттарға) быяланан йәки тутыҡмаған ҡоростан эшләнгән махсус ҡалаҡтар менән йыялар. Һөт шифалы үҙенсәлектәрен юғалтмаһын өсөн пробиркаларҙы һауа кермәҫлек итеп балауыҙ менән көпләйҙәр һәм шунда уҡ температура минус алты-ун һигеҙ градус булған һыуытҡысҡа ҡуялар. Фәҡәт шулай иткәндә генә инә ҡорт һөтө үҙенең биологик әүҙемлеген өс йылдан ашыуыраҡ тулыһынса һаҡлай. Яҡтыла, йылыла һөт һарғая, кибә, сифатын һәм им ҡөҙрәтен юғалта. Шуны оноторға ярамай: яҡтыла булған һәр минут, йылылағы һәр сәғәт һөттөң шифаһын кәметә. Йәнә бер һаҡлау ысулы шул: инә ҡорт һөтөн тигеҙ күләмдә араҡыға, йәки илле процентлы спиртҡа ҡушып болғап, һыуытҡыста нуль градус температурала тоталар.

Биологик әүҙем матдә булараҡ, инә ҡорт һөтө тәнгә хәл кертә, көс бирә, зиһенде аса, аҡыл һәм физик хеҙмәт эшмәкәрлеген яҡшырта, дәртләндерә, йоҡоно яҡшырта, үҙәк нервы системаһын ныҡыта. Тикшеренеүҙәр, клиник һынауҙар шуларҙы асыҡланы: инә ҡорт һөтө организмдағы йәшәү өсөн мөһим бөтә үҫеш, үҙгәреш барыштарын көйләй, тән туҡымаларының тын, һулыш алыуын яҡшырта, ҡан тамырҙары спазмаһын кәметә, ҡанда гемоглобин артыуына, холестерин хәмеүенә булышлыҡ итә, матдәләр алмашыныуын әүҙемләштерә.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

**(Дауамы. Башы 1-15-се һандарҙа).**

## УЙЛЫҒА - УЙ

# ӘҘӘМ ЫШАНМАҪТАЙҘЫ...

## ысын булһа ла һөйләмә

**"Кем ялғансы? Ишеткәнен һөйләүсе" тигән башҡорт халыҡ мәҡәле бар. "Бәндә һөйләр, тәҡдир көләр" тигән әйтемдә лә шундай уҡ йөкмәткеләге хәҡиҡәт ята. Башҡорт телендә ошондай аҡыллы ла, халҡыбыҙҙың асылын, холҡон, йәшәйеш рәүешен, йола-ҡағиҙәләрен үҙ эсенә алған мәҡәл-әйтемдәр ифрат күп. Ә хәҙер был мәҡәлдәрҙәге аҡылды тормошта булған бер ваҡиға менән нығытып ҡуяйыҡ.**



Бынан бер нисә йыл элек бер районда (быныһы сер булып ҡалһын) һикһәнен ҡыуалаған бер ҡарттың ҡырҡ йәшлек ҡатынға өйләнеүе һәм уларҙың малайҙары тыуыуы тураһында ишеткәйнем. Әлбиттә, был хәл уларҙың ауылдаштары тарафынан бер төрлө генә итеп баһаланмаған. Сабый тыуыуын ҡырынға һаплаусылар ҙа шул саҡ бигерәк күбәйеп киткән икән. Ҡапылғарай ғына ышанмаҫлыҡ булып тойолған был ваҡиғаға әллә күпме нарыҡлама-баһа бирелгән. Күпселек яңы тыуған сабыйҙың ҡарттыҡы булмауы, был мәсьәләгә шикләнеп ҡарауы хаҡында белдергән. Хатта сабыйҙы ауылдағы башҡа ирҙәргә сырамытып йөрөүселәр ҙа булған. Был хаҡта ҡарттың йөҙөнә бәреп әйтеүсе лә табылған.

- Ҡатының һинә тиклем ҡулдан-ҡулға йөрөнө бит. Уның ҡапҡаһын төндәрен ел генә шығырлатҡан тиһеңме? Беҙгә ышанмаһаң, ана ДНК анализ үткәртеп ҡара, һинеке кеүек йәштә әле беҙҙең яҡта берәүҙең дә атай була алғаны юҡ, фәлән-фәсмәтән, - тигән был хаҡта әйтергә ҡыйыулығы еткән теге кеше.

Дөрөҫтөрмө-юҡмылыр, яңы ғына атай булыу шатлығын кисереп, ҡанатланып йөрөгән ҡарт, имеш, шулай тип яуап биреп, тегенең ауыҙын шапылдата япҡан, тиҙәр:

- ДНК анализы үткәреп, гонаһҡа батырғамы ни минә? Ул баланы бит минә ҡартайған көнөмдә йыуанысым булһын өсөн Аллаһы Тәғәлә бүләк итеп бирҙе. Шулай булғас, анализды Аллаһы Тәғәләнән алырғамы хәҙер минә, уның изге ғәмәлдәрен шик аҫтына ҡуйырғамы? Юҡ, ундай гонаһҡа батасағым юҡ...

Бына шундай яуап ауылды шымып ҡалырға мәжбүр иткән. Хәйер, әгәр ҙа уларҙың балаһы тыумаған булһа, был никах хаҡында бер ниндәй ҙа ғәйбәт һүҙ һөйләнмәҫ ине лә, был хаҡта, моғайын, беҙ ҙа бер нәмә лә белмәҫ инек. Ә бит кешелек тарихына боролоп ҡараһаң, һикһән йәшлек әбейҙәрҙең дә бәпәйләүе, йөҙөн тултырған ҡарттарҙың да атай булыуы хаҡында бихисап миҫалдар бар. Шуға күрә бында һүҙ кешенең нисә йәшендә атай йә әсәй була алыуы йә алмауы хаҡында түгел, ә дәлилләнмәгән, сәбәбе булмаған хәл-ваҡиғаларҙың, ҡылыҡтарҙың һәм ғәмәлдәрҙең ни рәүешле халыҡҡа һөйләнелеүе, күптәргә еткерелеүе тураһында барырға тейештер. Ҡарттың зирәклегенә лә шаһитбыҙ беҙ был осраҡта.

Беҙҙең яҡта мәрхүмдең өсөнә, етеһенә, ҡырҡына, йылына аят башҡарғанда һәр ваҡыт "фәлән-фәләндең улы", "фәлән-фәләндең ҡыҙы" тигән саҡта әсәй кешенең исеме әйтелә. Башҡа яҡтарҙа, һәр ерҙә лә атай кешенең исеме телгә алына. Ошо хәлдең асылын белер өсөн бер мәл атайым мәрхүмдән һорай ҡуйҙым.

"Әүәле бер гонаһһыҙ саф ҡыҙ бала ҡулдә һыу ингәндән һуң ауырға ҡалып, бала тапҡан. Кешене донъяға тыуҙырған әсәй кешенең кем булғаны бер ниндәй ҙа шик ҡалдырмай. Тик бала табыу йорттарындағы үтә һирәк яңылыш бала алмаштырыу осраҡтарын ғына иҫәпләмәгәндә, кешене донъяға тыуҙырған әсәй кешене икенсе кеше менән бутау мөмкин түгел. Ә атайҙарға килгәндә, хәл ҡатмарлыраҡ, йәғни балаһы кемдән тыуғанын тик әсәй кеше белгән осраҡтар бихисап. Һуғыш мәлендә бындай хәлдәр күп булған. Шуға күрә лә мәрхүмдең рухына доға, аят һүҙе тәғәйен барып етһен, уны теге донъя ғазаптарынан аралаһын, йәннәткә өлгәшергә ярҙам итһен өсөн дә беҙҙең атай-олатайҙар мәрхүмдең әсәһенең исемен атап доға башҡаралыр инде, күрәһең", - тип аңлатҡайны атайым минә был ҡыҙыҡлы йола хаҡында. Беҙҙә әле булһын аят мәрхүмдең әсәһенең исемен әйтеп башҡарыла.

Ҡыҙыҡ, ә бит тап ошо йола Ҡөрьәндең "Әл-Әхзәб" сүрәһендәге 5-се аятында яҙылған шартты үтәүгә булышлыҡ итә кеүек. Унда бер кешене икенсе кешенең атаһының исеме менән әйтергә бер кешенең дә хаҡы булмауы хаҡында әйтелә. Тик кешенең ысын атаһын белмәгән осраҡта ғына икенсе кешене уның атаһы тип күрһәтеп яңылышыу унда гонаһҡа тиңләнмәй. Әгәр ҙа был хаҡта күңелдәге насар ниәт менән һүҙ әйтелһә, ул гонаһҡа тиңләнә. Был осраҡта ҙур яза бирелеүе тураһында ла әйтелә был сүрә аяттарында. Хәҙер инде ошо сүрәлә әйтелгән гонаһлы ғәмәлдә башҡармаҫ өсөн мәрхүмдең әсәһенең исемен әйтеп, яңылышыуға юл ҡуймауҙы тәьмин итеүгә килһәк, беҙҙең яҡта һаҡланып килгән дини йоланы тик хупларға ғына ҡала. Ошо урында йәһүҙиләрҙең силсиләһе әсә ягынан тәҙәләүе юктан ғына килмәгәнлеге лә аңлашыла төшә кеүек. Бында уларҙың хәҡиҡәтте һаҡлар өсөн ошо юлға барыуҙары бәхәсһеҙ тойола.

"Бәндә һөйләр, тәҡдир көләр" әйтемен икенсе төрлө ябайлаштырып "Тел һөйәкһеҙ, ни уйлаһаң да, һөйләй инде" тип тә әйтәләр. Әйтемдең ябайлаштырылған вариантын ишеткәнен һөйләүсенең аҡланыуы итеп тә ҡабул итергә булалыр. Ысынлап та, нимә ишетәһең, шуны башҡаларға таратаһың да, үҙең былларҙың барыһында ла "теләндең һөйәкһеҙ булыуына" һылтанаһың. Әммә ишеткәнеңде ни рәүешле итеп кемгә генә һөйләмә, хәҡиҡәтте таныған тәҡдиреңң бар бит әле. Ул һинең ялғанлауыңа тамаша ҡылып, рәхәтләнеп көлә генә бирә. Кеше хаталана, яҙмышы яҙлыға, ә бына тәҡдир тигәнең һис үҙгәрешһеҙ. Кеше ни тиклем ялғанлай, ни тиклем күп алдаша, уның тәҡдире лә шундай уҡ кимәлдә көләкәс булалыр, күрәһең.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## ҒӘЖӘП БИТ!

# ҠУРАЙ МОҢОН...

## дельфиндар ҙа ярата!



**Башҡорт халыҡ милли музыка ҡоралы ҡурайҙың тауышын "ел моңо" тип атайҙар. Был юҡҡа түгелдер.**

Башҡортостан музыканты һәм композиторы Roza Fa дельфиндар өсөн ҡурайҙа уйнауын һәм көй яҙғамында уларҙы саҡырыуын төшөрөп күрһәткән. Видео асыҡ диңгеҙҙә төшөрөлгән. Яҡташыбыҙ әйтеүенсә, ҡурайҙа уйнарға өйрәнеү уйы уға төүгә тапҡыр ирекле дельфиндар араһында йөҙгәндә килгән. Ике йылдан һуң ул асыҡ диңгеҙгә милли уйын ҡоралы менән сыҡҡан. "Сәйәхәтебеҙҙең төүге көнөндә үк беҙҙе сәләмләү һәм ҡурай моңон тыңлау өсөн яхта янына бик күп дельфиндар йөҙөп килде. Аҙаҡтан дельфиндар тураһында китапта улар тураһында беренсе мәғлүмәттең бер монахтың боронғо манускриптында барлыҡҡа килеүен күрҙем, унда монахтың дудкала уйнауы, ә яр буйында дельфиндарҙың йөҙөп йөрөүе һүрәтләнгән", - тип яҙа музыкант.

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# УРМАН БАШҠОРТТАРЫНА СӘЙӘХӘТ

**XIX быуат аҙағында - XX быуат башында йәшәгән рус табибы, медицина докторы Дмитрий Петрович НИКОЛЬСКИЙ 1899 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыҡҡан "Башкиры. Этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" тип исемләнгән үтә ҡыҙыҡлы китап авторы булараҡ билдәле. Унан башҡа Д.П. Никольский 1895 йылда "Землеведение" ғилми журналында "Из поездки к лесным башкирам" тигән этнографик мәҡәлә баҫтыра. Был мәҡәләлә Архангел заводы, Тирәкле, Уҫманғәле, Инйәр ауылдары һәм Көньяҡ Уралдың башҡа урындары иҫкә алына. Автор урындағы башҡорттарҙың көнкүреше һәм йәшәү рәүеше, ялан һәм урман зоналары башҡорттары араһындағы айырмалыҡтар хаҡында ла бәйән итә.**

Йүгерештән һуң бик оҙон һәм шыма ҡолғаға үрмәләү буйынса ярыш башланды. Кем уның осона тиклем үрмәләп менә, шуға ниндәй ҙә булһа бәләкәйерәк бүләк тапшырыла. Бында үҫмерҙәр иң оҫта үрмәләүселәр булып сыҡты. Ошо ярыштар барған саҡта өйҙәрҙән алыҫ түгел урында йәш ҡатындар һәм ҡыҙҙар түңәрәкләп йөреп йырланылар.

Әммә бындай байрамдарҙа иң ҡыҙыҡлыһы - көрәш. Ярышҡа тик бер ауылдың ғына түгел, бер нисә ауылдың көрәшсеһе сыға - һәр бер ауыл үҙ көрәшсеһен сығара. Көрәште иң тәүҙә бәләкәй балалар башлап ебәрә, шунан үҫмерҙәр көрәшә. Уларҙан аҙаҡ ысын көрәш башлана.

Көрәшселәр түңәрәкләп ултырышҡан тамашасылар уртаһына сығып баҫа. Улар көрәш башланғанға тиклем эске кейемдәренән һәм күлдәктәренән башҡа барса әйберҙәрен сисеп һала, билбауҙары менән бер-берелен урап тота. Улар, билбауҙарына тотоноп, алға табан эйелә һәм бер-берелен йығып һалырға йә иһә, күтәрә биреп, үҙҙәре аша ырғытырға тырыша. Ҡайһы берҙә көрәш бик оҙаҡҡа китә һәм еңеүсеһеҙ генә бөтә. Еңеүсегә приз бирелә.

Көрәштән, йүгерештән һ.б. һуң йырсылар сыға. Башҡорттар йырҙарын оҙон көйлә һәм тиҙ йырлана торғанға бүлә. Улар араһында айырым йыраусылар һәм бигерәк тә ҡурайҙа уйнаусылар бар. Башҡорттар, башлыса, берәмләп йырлай; хор менән йырлауҙы ҡышҡы кисәләрҙә ултырғанда, туйҙарҙа һәм ҙур байрамдарҙа ғына ишетергә мөмкин.

Башҡорттарҙа, йырҙар менән бер рәттән, хатта уларҙан да алдымыраҡ, инструменталь музыка ла үҫешкән. Музыкаль инструменттарҙан иң ныҡ таралғаны - "ҡурай" тип атала.

Ул - һыҙғыртҡыстың бер төрө, уны яланда үҫкән, бармаҡ йыуанлығындағы бер үҫемлек һабағынан яһайҙар. Һабаҡты ике осонан киҫеп алалар, шунан һуң бер яғынан 4 тишек, икенсе яғынан бер тишек яһайҙар. Был инструменттың тауышы шым һәм ягымлы. Ҡурайсылар халыҡ араһында киң танылыу таба, уларҙы туйҙарға, кисәләргә, байрамдарға һәм башҡа ошондай саралар ға саҡыралар. Һуңғы ваҡытта башҡорттар араһында гармоника ла осрай башланы, уны төпкөлдә ятҡан Башҡортостанға хеҙмәтен тамамлаған һалдаттар алып ҡайта.



Урман башҡорттары тормошоноң мәҙәни-көнкүреш яғын ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлағандан һуң, уларҙың әлегә тиклем тулыһынса ултыраҡ тормошҡа күсеп бөтмәйенсә, ярым күсмә йәшәү рәүешен дауам итеүҙәрен билдәләп, физик типтары хаҡында ла бер нисә һүҙ әйтеп үтәйек. Бында башҡорттарҙың дала һәм урман (йәки тау) башҡорттарына бүленеше хаҡындағы мәсьәләне ентекләп ҡарап тормайбыҙ, сөнки ул һуңғы ваҡытта антропологтар араһында күп кенә бәхәстәр тыуҙыра, шулай ҙа, беҙҙең күҙәтеүҙәребеҙгә ярашлы, ошо икегә бүленеште берләштерер ҡарарға ярамай: антропологик һәм этнографик яҡтан улар араһында, туғай һәм таулы черемистарҙағы кеүек үк, айырмалар бар.

Беҙҙең күҙәтеүҙәребеҙ тау башҡорттарының тән төҙөләшөнөң яҡшы булыуын, уның өлөштәренең пропорционаллеген, тире аҫтындағы май ҡатламының йоҡалығын һәм мускулдарының үҫешкәнлеген күрһәтә. Йыуандарға ҡарағанда сандырҙар йышыраҡ осрай. Күкрәк әйләнәһе һәр саҡта ла буйҙарының яртыһынан оҙонораҡ. Дөйөм алғанда, буйҙары уртасанан оҙонораҡ, шулай ҙа урта буйлылар ҙа байтаҡ ҡына осрай. Асыҡ урындарында тән тиреләре ҡара һөрөнкө, һорғолт сағылышлы, йыш ҡына май биҙҙәренең үҫешкән булыуы арҡаһында ялтырабыраҡ тора. Баш формаларына килгәндә, урман башҡорттарын түңәрәк башлыларҙан бигерәк оҙонса башлыларға индереп була; биттәре оҙонсараҡ, бигерәк тә профилдән ҡарағанда; бит һөйәктәренең диаметры ҙур түгел. Бик һирәк, хатта ҡағиҙәнән тыш тип әйтергә кәрәк, киң, табаҡ битлеләр осрай. Маңлайҙары бейек, тура. Танауҙары йышыраҡ тура һәм бейек, ҡайһы берҙә ҙур булмаған, уртаса көмрө танаулылар осрай. Ирендәре ҡалын түгел; ауыҙ һыҙаттары гоизонталь. Ҡаштары йә дуғалы, йә тура һәм ҡуйы; күҙҙәре тура киҫелешле, түңәрәгерәк формалы. Күҙ ҡаралары йышыраҡ һоро йә иһә ҡара төҫлө, күгерәк күҙлеләрҙе ғәҙәттән тыш, тип әйтергә була. Сәстәре, башлыса, ҡуңыр йә иһә ҡара төҫтә; һаҡалдары һирәк, мыйыҡтары ҡырып йә иһә йолҡоп алынған була. Ҡолаҡтары ҙур, ҡарпыҡ. Тештәре йышыраҡ эре һәм тура, кариеслы тештәренең проценты байтаҡ (күптәре тәмәке тарта). Ишетеү һәм күреү органдары яҡшы үҫешкән.

Бындағы ҡатын-ҡыҙҙар, даланыҡылар менән сағыштырғанда, оҙонораҡ буйлы, кәүҙә төҙөләштәре яҡшы, оҙонсараҡ ҡуңыр йөҙлө, оҙон һәм тар танаулы, ҙур булмаған ауыҙлы һәм ҡараһоро күҙле. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәшәү шарттары һәм кейәүгә иртә сығыу башҡорт ҡатындарын тиҙ арала, ситтән ҡарағанда, ҡарт итеп күрһәтә. Йыйылған мәғлүмәттәр башҡорт ҡатындарының әллә ни күп балалы булмауына дәлил - ғәҙәттә уларҙың балалары дүрт-биштән артмай. Климактерик халәттәре 40-45 йәштәр араһында башлана, ә ир-аттар ҡайһы берҙә ҡартайғансы дәртле һәм көслө булып ҡала. Башҡорттарҙа балалар үлеме бик ҙур һәм йыш ҡына 70 процентҡа тиклем етә.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**

**(Аҙағы. Башы 3-10-сы, 13-15-се һандарҙа).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

## ҠОЛЛОҠҠА ЭЛӘККӘН...

### һәм суҡындырылған



**Башҡорт тарихында башҡорт ихтилалдарын баҫтырғандан һуң крепостнойлыҡҡа бирелгән башҡорттар, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары һәм балаларҙың артабанғы яҙмышы аҙ өйрәнелгән. Әлбиттә, улар суҡындырыла, рус исемдәре ҡушыла. Борис Тарасовтың "Россия крепостная. История народного рабства" китабында һүҙ башҡорт ихтилалынан һуң Санкт-Петербургҡа, XVIII быуаттың билдәле ғалимы һәм шағиры Василий Тредьяковскийға крепостнойлыҡҡа барып эләккән башҡорт ҡатыны хаҡында бара. Бөгөн гәзит уҡыусыларға шул китаптан ирекле тәржемәләге өҙөк тәҡдим итәбеҙ.**

"Сығанаҡтарҙа 1746 йылғы шундай ҡыҙыҡлы бер эш һаҡлана. Ул "Профессор Тредьяковскийҙың гренадер ҡатынын үҙләштереүе тураһында" тип атала.

Хәрби коллегияға адресланған ялыуҙа: "Нева гарнизон полкының гренадеры Мәдем Бетков (башҡорт) шикәйәтендә әйтелеүенсә, Санкт-Петербургта ул рекрутлыҡҡа алынғанда тыуған ерендә - Ҡаҙан губернаһында ҡалған ҡатыны Ентлавлета Однокулова (документтарҙа башҡортса исем-фамилиялар шулай боҙоп яҙылған. - **Ред.**) менән осраша. Бетков хеҙмәткә алып кителгәндән һуң бер ни тиклем ваҡыт үткәс, уның ҡатыны ниндәйҙер офицерҙар тарафынан Санкт-Петербургҡа алып киленә һәм өс йыл элек Санкт-Петербург Фәндәр академияһының профессоры Тредьяковскийҙың улы Василий Кирилловҡа бүләк ителә. Әле ул шунда йәшәй һәм хеҙмәтсе булып эшләй. Шуға күрә гренадер Бетков ҡатынын кире ҡайтарыуҙы һорай", - тиелә.

**Борис Тарасовтың "Россия крепостная. История народного рабства" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

## БАШҠОРТТАР

### Башҡорттарҙың ризығы

Һике өҫтөндә, йортта йәки ергә ултырып ашар алдынан, әгәр һыйлау тирмә эсендә булһа, кейеҙ өҫтөнә ашъяулыҡ йәйелә. Хужа йәки уның оло улы ҡомған һәм тас тотоп, ҡунаҡтарҙың ҡулын йыуҙырып сыға. Һуңынан ҡунаҡтар бишбармаҡ һалынған ҙур ағас һауыттар тирәләй теҙелеп ултыра. Бишбармаҡлы һауыттарҙа, әгәр улар бер нисә булһа, һарыҡ итенән, майҙан һәм һалманан тыш, бер нисә ҙур киҫәк ит йәки ҡаҙы ята. Ҡунаҡтарҙың береһе, ҡулына бысаҡ алып, итте киҫәктәргә турай, ә икенсеһе итте һәм ҡаҙы киҫәктәрен ҡунаҡтарға тарата. Ризыҡ ейеү ваҡытында байрам итеүселәр иң тәмле, иң яҡшы, иң майлы киҫәктәрҙе эргәһендәге йәки үҙе хөрмәт күрһәткән кешеһенең ауыҙына ҡаптырған. Ваҡыты-ваҡыты менән табынға тамашасыларҙың йәки балаларҙың берәйһе саҡырылған һәм һыйларға теләүсе "һоғон" тип, уға ит һоғондорған. Хужа, ғәҙәттә, табында ултырмаған, ҡунаҡтарҙы һыйлауҙы хәстәрләгән. Ниһайәт, бишбармаҡ ашалып бөтөп, һауыттар алына. Хужа ҡорот һалынған һурпалы тустаҡтан башта үҙе ауыҙ итҡәс, уны ҡунаҡтарҙың береһенә, ғәҙәттә, иң абруйлыһына бирә. Ул, тустаҡтағы һурпанан ауыҙ итҡәс, уны күршеһенә тапшыра. Шулай итеп, һурпалы тустаҡ табында урап сыға. Ашҡа доға ҡылынғас, барыһы ла тороп, ҡабат ҡулдарын йыуа һәм унайлыраҡ ултырып, ҡымыҙ йәки сәй эсә башлай.

**Ҡаҙы** - йылҡы ҡаҙыһынан эшләнгән өй "колбасаһы", тәмле һәм абруйлы ризыҡтарҙың береһе. Ҡаҙы бишбармаҡ эсенә лә һалынған, айырым да ашалған. Ул йылҡы эсәгенә майлы ит тултырып әҙерләнә һәм ҡояшта ҡаҡлана, ҡулланыу алдынан бешерелә.

Бер ни тиклем һуңыраҡ башҡорттарҙа **сүспәрә** һәм **бәлеш** барлыҡҡа килә. Әммә уларҙы башҡорт халҡының милли ризығы тип атарға ярамай икән? Сүспәрә - һыуҙа бешкән итле билмәндәрҙең бер төрө, ә бәлеш - һарыҡ итенә һуған, һарымһаҡ ҡушып ҡыҙҙырылған эслек һалынған ҡамыр ризығы. Ғәҙәттә, ул бай башҡорттарҙың ашамлығы тип һаналған.

Иҫерткес эсемлектәрҙән башҡорттарҙа **әсе бал** һәм **буҙа** булған. Әсе бал - көслө эсемлек. Уны әҙерләү өсөн 2-3 килограмм кәрәҙле балды эҫе һыуҙа болғағандар һәм бер тәүлеккә сүпрә йәки шыйыҡ ҡамырҙа ебетелгән арпа ҡушып ултыртҡандар. Сүпрә әҙерләү өсөн башҡорттар элек ҡомалаҡ ҡулланған. XVII - XVIII быуаттарҙағы барлыҡ яҙмаларҙа ла тиерлек аҫаба ерҙәргә припущенниктарҙы индергәндә уларҙың да ҡомалаҡ йыйыу хоҡуғы булыуы теркәлә. Ҡомалаҡ, күрәһең, килем сығанағының береһе булып торған һәм уны һатҡандар ҙа. Әммә ҡайһы бер яҙмаларҙа, хатта аҫаба ерҙәргә икенсе олоҫ башҡорттары индерелгәндә лә, ҡомалаҡты бары тик үҙ мәнфәғәтең өсөн генә йыйырға рөхсәт ителгән. Ҡайһы бер урындарҙа баллы һыуҙы бер ни тиклем шытҡан арпа йәки тары менән әсеткәндәр. Әсегән балды бер нисә көнгә йылы урынға ҡуйғандар. Эсеү өсөн ул әсеүенең икенсе көнөнә үк әҙер булған, әммә өс көндән һуң тейешле ҡеүәткә еткән.

**(Дауамы бар).**

**Театр - үҙе бер башҡа ғәжәйеп донъя, менәр йылдар дауамында үсешкән һәм үҙгәрә барған иң боронғо һәм мауыҡтырғыс сәнғәт төрө. "Әгәр театрҙың асылы күңел асыу тамашаһында ғына булһа, бәлки, уға шул тиклем ҙур көс һалырға ла кәрәкмәҫ ине. Әммә театр ул - тормош көҙгөһө", - тигән бөйөк театр реформаторы Константин Станиславский.**

**Сираттағы әңгәмәбеҙ Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры директоры Зиннур Фәрит улы СӨЛӘЙМӘНОВ менән.**

# "ТЕАТРҺЫҘ МИЛЛӘТ ЮҠ..."

**Һеҙ сығышығыҙ менән сәнғәткә бирелгән, уға хеҙмәт иткән ғаиләнән. Ҡартатайығыҙ Әһлей Фазлый улын, атайығыҙ Фәрит Әһлей улын күреп белергә лә насип булғайны. Һөнәр һайлағанда икеләнеп тормағанһығыҙҙыр, тим. Үҫегеҙ һәм ижад баҫҡыстарығыҙ тураһында әйтеп үтһәгеҙ ине...**

- Баймаҡ ҡалаһында тыуып-үҫтем. Атай-әсәйем Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылынан. Әйе, ғаиләбеҙ сәнғәткә бик яҡын, уға хеҙмәт иткән кешеләр. Атайым Фәрит Әһлей улы район хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеген етәкләне. Мин ҡартатайым ҡурайы, скрипкаһы моңо аҫтында үҫтем, тип әйтә алам. Әлбиттә, сәнғәткә яҡын торҙом. Баймаҡтың 3-сө мәктәбендә уҡыным, үткәрелгән барлыҡ сараларҙа ла әүҙем ҡатнаша, сценарийҙар яҙа инем. Шулай ҙа мин тарихсы булырға хыялландым. Мәктәптә уҡыуҙың һуңғы ике йылында тарих уҡытыусыһы менән имтихандарға ныҡ әҙерләнеүем хәтерҙә ҡалған. Ул заманда юридик белем модала булды бит. Атайым да әйткәс, ошо һөнәр буйынса имтихан тотоп ҡараным. Конкурс бигерәк юғары ине, инә алманым. Был хәл 1995 йылда булды. Икенсе йылына документтарымды хыялымдағы БДУ-ның тарих бүлегенә алып барҙым. Тарихты һәйбәт белгәс, имтиханды яҡшы бирҙем, тик, конкурстан үтә алмай, тағы тороп ҡалдым. Ҡайтып, аңҡы-тиңкә йөрөгәндә ул саҡта Баймаҡ район мәҙәниәт йортонда баш режиссер булып эшләгән Земфира Алтыншина Өфө сәнғәт академияһына барырға кәңәш итте.

Шулай итеп, яҙмышым мине сәнғәт өлкәһенә килтереп бәйләне. Күңелдәге ижадҡа ынтылыш үҙенекен итте, бирелеп уҡыным. Стәрлетамаҡ студияһының (беҙҙең төркөмдә Стәрлетамаҡ театры өсөн әҙерләнеләр) художество етәксеһе Гөлли Арыҫлан ҡыҙы Мөбәрәкова булды, белемде Рафил Рәүил улы Нәбиуллин кеүек даныҡлы сәхнә оҫталары бирҙе. Артислыҡҡа уҡыһам да, гел режиссер булырға теләнем. Уҡыуҙы тамамлап, 2000 йылда эшкә килгәс, Стәрлетамаҡ театрының художество етәксеһе Гөлдәр Мозафар ҡыҙы Ильясованың, минә спектакль ҡуйырға рөхсәт итегеҙ, тип теңкәһенә тейеп бөттөм. Ниһайәт, ике йыл үткәс, балалар өсөн Яңы йылға әкиәт эшләргә фатиханын бирҙе ул. Шулай итеп, режиссерлыҡҡа юл ярҙым. Йылап өлкәндәр өсөн дә спектаклдәрем сәхнәгә сыҡты. Артабан Мәскәүҙә Щукин исемендәге театр институтын тамамлап, дипломлы режиссер булып киттем. Александр Поламишев, Сергей Яшин кеүек ҙур шәхестәрҙең ҡулында уҡыуы - үҙе ҙур бәхет булды.

Артабан мине Стәрлетамаҡ театрында режиссер итеп күсерҙеләр. Курсташым, продюсер Әлиә Яхина менән 2014 йылда "Заман драматургияһы һәм режиссураһы үҙәге"н ойошторҙоҡ. Үҙәккә бәйле эштәр менән йыш ҡына Өфөгә йөрөргә тура килде. Төрлө театрҙарҙа спектаклдәр ҡуйҙым, Татарстанға ла барып еттем. Былтыр Ҡаҙандың Тинчурин театрында 50-се спектаклем донъя күрҙе.



**"Заман драматургияһы һәм режиссураһы үҙәге"нә ентеклерәк туҡталып китәйек әле. Ниндәй маҡсат тотҡайнығыҙ был эште башлап, уның һөҙөмтәләре булдымы, хәҙер уны дауам итеү зарурлығы юҡмы икән?**

- Пьесалар, сәхнәгә сығарырлыҡ материал юҡ, тип йыш зарланабыҙ. Әлиә менән, һуҙҙән эшкә күсәйек әле, тип, "Заман драматургияһы һәм режиссураһы үҙәге"н булдырҙыҡ. Уның сиктәрендә ун йыл дауамында драматургтар өсөн махсус семинар-лабораториялар үткәрҙек, райондар буйлап экспедициялар ойоштороҙоҡ, спектаклдәр сығарҙыҡ. Үҙебеҙҙән дә, ситтән дә күренекле белгестәрҙе саҡыра инек. Мәҙәниәт министрлығынан ярҙам күп булды, грант конкурстарында ҡатнаштыҡ. Барлыҡ проекттарыбыҙ үҙебеҙҙең халыҡ өсөн эшләнде. Ун йыл эсендә иллегә яҡын сара үткәрҙек. Әлбиттә, драматургияла яңы исемдәр ҙә асыҡ.

Милли театр сәнғәте һуңғы йылдарҙа драма әҫәрҙәренә ҡытлыҡ кисерә. Көн ҡаҙағына һуктырған яңы темалар юҡ. Үҙәк булдырып, беҙ милли драматургияны тергеҙеү маҡсатын күҙҙә тоттоҡ. Проза яҙғандар драмаға ла иғтибар итә башланы. Әйтәйек, Мөнир Ҡунафин, Зәһрә Бураҡаева, Шәүрә Шәкүровалар драматургияға килде, Сәрүәр Сурина менән байтаҡ проекттар эшләнек. Яңы исемдәрҙән шулай уҡ Ангиза Ишбулдинаны билдәләп китергә мөмкин. Артабан ул Екатеринбургта драматургия курстарында уҡыны, пьесалары ҡуйыла. Әлеге көндә Санкт-Петербургта магистратурала уҡып йөрөй.

"Заман драматургияһы һәм режиссураһы үҙәге" башҡарған эшмәкәрлеккә бөгөн дә мохтажлыҡ бар һәм, әлбиттә, уны дауам итергә кәрәк. Театрыбыҙ янында драматургия мәктәбен булдырыу планы бар, тик нисек килеп сығырын ваҡыт күрһәтер.

**Документаль материалға, тормош күренештәренә ҡоролған вербатим тәжрибәһен башҡорт театр сәхнәһенә башлап һеҙ сығарҙығыҙ шикелле, яңылыш-маһам. Был һеҙҙең ижади эҙләнеүҙәрегеҙме, әллә репертуар төрләндереү маҡсатын тотоп эшләнгән эшегеҙме?**

- Вербатим, йәки документаль театр - үткән быуатта барлыҡҡа килгән тамаша төрө. Типологик яҡтан ул уйлап сығарылмаған (нон-фикшн) әҙәбиәткә тап килә. Спектакль кешеләрҙең тура телмәрен һүҙмә-һүҙ ҡабатлау нигеҙендә төҙөлә. Рәсәйҙә вербатим күптән барһа, Башҡортостанда уны беҙ башланыҡ.

Өйҙә генә ултырып, өҫтәл артында уйҙырма сюжет ҡороп яфаланмаҫ өсөн, яҙыусыға тере материал, персонаж типаждары кәрәк. Районлар буйлап драматургтар өсөн экспедицияларҙы беҙ сюжеттар эҙләү, ысын булған ваҡиғалар тураһында белешеү, кешеләр менән аралашыу маҡсатынан ойошторҙоҡ. Балаҡатай, Күгәрсен, Йылайыр, Хәйбулла, Бөрйән, Баймаҡ, Әбйәлил райондарына барҙыҡ. Институттың театр факультетынан Рима Харисова үҙенең студенттарын да ошо экспедицияларға ылыҡтырҙы. Улар материал туплау менән шөғөлләнде. Йылайыр районына Академтеатр менән бергә сыҡтыҡ. Һөҙөмтә буларак ике өлөштән торған "Ете быуын... Һаҡлаусылар" һәм "Ете быуын... Йәштәр" вербатимы сәхнәгә сыҡты. Улар тамашасыны аптыратып һәм һоҡландырып ҡына ҡалманы, тетрәндерҙе лә, уйландырҙы ла.

**Зиннур Фәрит улы, театр сәнғәтенең бөгөнгө хәле нисек? Үҙем журналист һәм яҙыусы ла буларак, баҫма киң мәғлүмәт сараларының, әҙәбиәттең һәм китап нәшриәтенең бөгөн тәрән көрсөктә икәнен белгәүрә бирәм был һорауҙы.**

- Халыҡ булғанда, минеңсә, әҙәбиәт бер ҡасан да бөтмәйәсәк. Матбуғат, ысынлап та, формаһын үҙгәртә, сөнки заман үҙгәрә. Заман менән бергә үҙгәрмәһәгеҙ, ни хәл итәһең, ғәйеп үҙегеҙҙә, тигәндәй. Төрлө техника барлыҡҡа килгән һымаҡ, мәғлүмәт сараларының да элеккеләре юғала бара, электрон рәүешкә күсә. Виртуаль донъяға инеп бөтөп барабыҙ хәҙер. Яһалма интеллектты, нейроселтәрҙе инҡар итеү мөмкин түгел. Улар бөгөн журналист эшен дә, композитор, рәссам эшмәкәрлеген дә тулыһынса үҙ өҫтөнә алырға һәләтле. Ошоларҙы иҫәпкә алмаһаҡ, әлбиттә, киләсәк юҡ. Интернет ҡанундары ааяһыҙ. Шул уҡ ваҡытта ижади эшкә эксклюзивлыҡты - ваҡиғаларҙа, ул йәки был хәлгә ҡарата үҙенең ҡарашын, мөнәсәбәтен, хис-тойғоларын, йәғни индивидуаллекте - тик кеше генә бирә ала. Үкенескә ҡаршы, хәҙер матбуғат баҫмалары ҡалыплашыу юлына баҫты. Үҙ ҡарашлы, үҙ фекерле журналистар бик һирәк. Шул уҡ ваҡытта мода тигән нәмә лә бар бит әле: иртәнсәк кофе эсеп, ҡулға шыптырҙатып гәзит тотоп ултырыу яңынан ғәҙәткә инеп китмәҫ тип, кем әйтер. Тормош хәҙер тиҙ үҙгәреүсән, барыһы ла булыуы ихтимал. Кеше раритетка ла тартылыусан икәнен онотмайыҡ.

Театрға килгәндә, хәл икенселәй. Театр - мәңгелек, тиһәк тә яңылышмаҫбыҙ. Сәхнә сәнғәтенә ике мең ярым йылдан ашыу һәм ул һаман йәшәй. Ошо үткән дәүерҙәрҙә Ер шары, кешелек ниҙәр генә күрмәне, ә театр һаман бар. Сөнки кеше тере сәнғәткә ярата. Уны хатта кино ла, башҡаһы ла алыштыра алмай. Сәхнәнән тере диалог, йыр, музыка инструменттарында уйнау, бейеү арбау көсөнә эйә. Заманса иң камил аппаратураны тоҡандырып йыр тыңлау, бәлки, ниндәйҙер ҡәнәғәтләнеү бирәләр, ләкин барыбер мәжлестәрҙә, концерттарҙа йырланған йырҙарҙан, артист уйнауынан тәьҫирләнеүгә етмәй инде ул.

Театрға кеше үҙен таныу, күңелен өйкәгән һорауҙарға яуап алыу, ҡайһы саҡ ял итеү ниәте менән дә бара. Сәхнәлә тере уйын, тормош күренештәре сағылдырыла һәм һин үҙеңдә уның эсендә кеүек тояһың - был, ысынлап та, театрҙың мәңгелеге билдәһе. Беҙ йәмғиәттә йәшәйбеҙ, кеше кешегә мохтаж. Фатирҙарыбыҙға инеп бикләнһәк тә, сығып аралашҡыбыҙ килә. Театр нәк ошо мохтажлыҡты ҡәнәғәтләндерә. Бәлки, сәхнә үҙенең консервативлығы менән дә алдыралыр. Заманса алымдарҙы ҡулланып ҡарайбыҙ ул, мәҫәлән, бер мәл спектаклдәр барышында экран ҡуйыу ғәҙәткә инеп китте. Хәҙер ул мода үтеп бара, сөнки тамашасы, шоуҙан бигерәк, кешенең ябай аралашыуын, фәлсәфә ҡороуын, кеше яҙмышы тарихын ҡарағыһы килә, шунан кинәнес ала.

Ғөмүмән, бөгөн театр сәнғәте республикала юғары үсеш кимәлендә, тип әйтә алам. Островский, театрһыҙ милләт юҡ, тигән. Милли театр булһа, халыҡ юғары сәнғәткә ынтыла.

Әлбиттә, үҙебеҙгә генә хас проблемаларыбыҙ ҙа бар. Төү сиратта был милли драматургияға ҡағыла. Ул булмаһа, милли театрға юғалыу ҡурҡынысы янай. Дөйөм алғанда, театр йәшәй һәм йәшәйәсәк, ә бына милли театрҙар яҙмышы үҙебеҙҙән тора. Драматургтар аҙ, уның ҡарауы, прозаиктарыбыҙ күп. Театрыбыҙҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов, яҡшы пьесаларға ҡытлыҡ булғас, әйҙәгеҙ, прозаны сәхнәләштерәйек, тип, Таңсулпан Ғарипова, Гөлсәриә Гиззәтуллина һәм башҡа авторҙар әҫәрҙәрен сәхнәгә сығарҙы һәм был эште дауам итә.

**Бөгөн республика театрҙары сәхнәһендә барған спектаклдәр теҙмәһенә күҙ һалам да, жанр ҡытлығы юҡмы икән, тигән уйға ҡалам. Сөнки күпселек пьесалар "комедия", "моңһоу комедия", "лирик комедия", "музыкаль комедия" билдәһе менән ҡуйыла...**

✔ *Бик күп нәмә ғаиләнән килә. Әгәр ата-әсәләр уҡытыусыларға ҡарата ыңғай мөнәсәбәттә булһа, балаһы алдында уларға ихтирам белдерһә, уҡыусы мәктәпкә яҡшы кәйеф менән килә, уҡытыусыны ихлас тыңлап, һөҙөмтәле белем ала.*



- Кеше театрға ял итер өсөн дә йөрөй, тип әйткәйнем үрҙә. Бигерәк тә бөгөнгө ҡатмарлы ваҡытта, ысынлап та, комедия һорау менән файҙалана. Беҙҙең театрға килгәндә, жанрҙар төрлөлөгөн тотабыҙ. Бөгөнгө репертуарға күҙ һалһаҡ, "Ай тотолған төндә" - трагедия, "Кара йөҙҙәр" - драма, "Бөйрәкәй" - трагедия, "Ат уйнатып алдан бара" - патриотик сәхнә әҫәре, "Амеля" - драма, "Һиңһеҙ килгән яҙҙар" - мелодрама. Комедиялар иһә - "Мөхәббәт ҡоштары", "Кейәүҙәр", "Фарман ханым". Беҙҙә төрән темалар, ҙур проблемалар күтәргән спектаклдәр байтаҡ. Мәҫәлән, әлеге заманда трагедия юғалып ҡалған жанрҙар иҫәбендә. Рәсәй театрҙарында бик һирәк уйнайҙар трагедияны, ә беҙҙә ул бар. Эйе, халыҡ күберәк комедияны, мелодраманы үҙ итә.

Репертуар тамашасыға яраҡлашып төҙөлә, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ ине. Тамашасы менән бергә йөшәйбеҙ, сөнки театр - бөгөнгө йәмғиәттең көҙгөһө. Беҙ бит айырылғыһыҙ бер бөтөн. Репертуар дәүләт заданиеһы, спектаклдәр һаны, касса йыйымы пландарын да иҫәпкә алып төҙөлә. Бер-бер артлы драмалар ҡуйылһа, зал бушап ҡала, тимәк, улай ярамай, комедия менән аралаштырырға кәрәк. Шундай нескәлектәре күп репертуар төҙөүҙең.

**Республикала исемдәре билдәле драматургтар бармаҡ менән генә һанарлыҡ бит. Йыш ҡына, театрҙар үҙебеҙҙең авторҙарҙы ҡуймай, тигән зарланыу һүҙҙәрен ишетергә лә тура килә...**

- Ә ҡайҙа һуң авторҙар, драматургтар? Беҙ үҙебеҙ ҙә аптырайбыҙ: нишләп заман менән бергә атламай яҙыусылар, нишләп театрға аҙ йөрөйҙәр, нишләп режиссерҙар менән аралашмайҙар, яҙыу кимәлен камиллаштырмайҙар? Аптырағас, үҙебеҙгә эҙләнергә, юҡты бар итергә тура килә. Пьеса сәхнәгә сыҡһын өсөн бер нисә шарт тап килергә тейеш. Ул иң элек театрға тап ошо ваҡытта һәм ошо труппаға ярашлы булырға, бөгөнгө көн һорауҙарына яуап бирергә тейеш. Кимәле тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Уйнар өсөн характерҙар, образдар, сюжет кәрәк. Характеры булмаған персонаждың кәүҙәләндереү, тамашасы алдына сығып, һүҙ бутҡаһы бешереү артист өсөн ҡыҙыҡ түгел. Драматургия - ул иң ҡыйын жанр. Ул паздар кеүек ҡорола. Тамара Искәндәрийә әйтмешләй, юғары математикаға тиң ул драматургия. Прозаны меңәрләп бит итеп яҙырға мөмкин, ә сәхнә әҫәре идеяһын иң кубендә ҡырҡ биткә һыйҙырырға кәрәк, һәр һүҙ ҡәҙерле, уны тейешле урында ғына мәғәнәле итеп ҡулланы фарыҙ. Кульминация, образдар үҫеше һәм башҡаларҙы ла күҙ унынан ысҡындырырға ярамай. Ошо талаптарға еңел ҡараған драматургтар күп ул. Тик беҙ һәр саҡ яңы әҫәрҙәр, яңы авторҙар көтәбеҙ.

**Шаулап-гөрләп "Театр яҙы - 2026" үтеп китте. Ул республиканың театр сәнғәтен һаҡлау һәм үҫтереү, профессиональ бәйләнештәрҙе нығытыу һәм сәхнәнең көнүҙәк тенденцияларын асыҡлау маҡсатын күҙҙә тотто. Ошо маҡсатына өлгәштеме икән фестиваль?**

- "Театр яҙы" фестивале һуңғы тапҡыр 2017 йылда үткәйне. Тұғыҙ йыл арауыҡ - байтаҡ ваҡыт. Республика Башлыҡы Радий Хәбировтың ҡарары менән быйан ары фестиваль йыл һайын булырға тейеш. Ҡуйған маҡсаттарҙың барыһына ла өлгәштек, тип әйтеү, бәлки, дөрөҫ тә түгелдер, иң мөһиме, эш башланды. Уҡыу программаһы, театрҙарҙың спектаклдәрен ҡарау, баһалау, тәнҡит һүҙҙәре ишетеү, үҙ-ара аралашыу - барыһы ла ижад, эш өсөн файҙаға ғына. Ғөмүмән алғанда, "Театр яҙы" Башҡортостан театрҙарының бөгөн нимә менән йәшәүен, режиссерҙарҙы һәм актерҙарҙы ниндәй мәсьәләләр борсоуын, сәхнә үҫешен нимә билдәләгәнен күреү мөмкинлеген бирҙе. Беҙҙең өсөн республиканың театр йәмәғәтселеген берләштереү һәм ижади аралашыу мөхитен булдырыу бигерәк тә мөһим ине.

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры республикабыҙҙың театр сәнғәте флагманы булды һәм, дәрәжәһен төшөрмәй, бөгөн дә уңышлы эшләп килә. Ижади коллектив ниндәй пландар менән йәшәй?**

- Эйе, театрыбыҙ тотороҡло эшләп килә. Труппа көслө. Баш режиссерыбыҙ Айрат Әхтәм улы Абушахманов дәрәжәле, ҙур абруй ҡаҙанған ижади шәхес. Ул Рәсәй кимәлендә үткән төрлө театр сараларында даими ҡатнаша. Репертуарыбыҙ бай, жанрҙар төрлөлөгө менән дә алдырабыҙ. Башҡорт дәүләт академия драма театры Рәсәйҙең билдәле коллективтары иҫәбенә инә. Ике тапҡыр "Алтын битлек" Рәсәй милли театр премияһы лауреаты булды, йыл һайын номинант булараҡ билдәләнә, йә иң әһәмиәтле спектаклдәрҙең лонг-лист исемлегенә инәбеҙ. Быйыл Санкт-Петербургтың Александринский театры сәхнәһендә уйнаныҡ. Бындай мөмкинлек һәр коллективҡа ла бирелмәй. Шулай уҡ Мәскәүҙә, Ҡаҙанда, Венгрияла, Ҡаҙағстанда гастролдәрҙә булдыҡ. Милли театрҙар ассоциацияһында торабыҙ, коллегабыҙ Иршат Ишбулат улы Фәйзуллин - уның Совет ағзаһы. Быйыл ситтән саҡырылған ике режиссер менән эшләнек. Улар - Санкт-Петербургтан Степан Пектеев һәм Ҡырғыҙстандан Уланмырҙа Ҡарыпбаев. Уланмырҙа менән тағы бер спектакль ҡуйырға иҫәп. Ғөмүмән, алға ҡарап, заман һулышын тойоп эшләйбеҙ, ҙур пландар менән йәшәйбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Зиннур Фәрит улы әңгәмәне "Театрға йөрөгөҙ!" тигән саҡырыу менән тамамланы: "Театрға йөрөргә, театр менән йәшәргә кәрәк. Ә драматургтарҙы бергә эшләргә саҡырам. Яҡшы пьеса яҙырға өйрәнергә иһә беҙгә килегеҙ, театрға йышыраҡ йөрөгөҙ, театр мөхитенә башҡолло сумығыҙ. Театр бит - ҡыҙыҡлы, уйҙырмалы, хыялдар менән бәйле айырым донъя. Аллаға шөкөр, башҡорт театры йәшәй һәм, әлбиттә, бында тамашасыларыбыҙҙың да өлөшө бик ҙур".**

Рәсүл БАЙГИЛДИН
әңгәмә ҡорҙо.

*ДИРЕКТОР МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# ЫСЫН УҠЫТЫУСЫ...

## мәктәпкә аҡса эшләр өсөн килмәй

**Кем ул мәктәп директоры? Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, директорҙарҙы махсус рәүештә бер ҡайҙа ла уҡытмайҙар, ул шул уҡ уҡытыусы. Тик бер нәмәне оноторға ярамай, директор ҡулында "түргә әлә торған сабата"һы була. "Сабата"һын түргә эләме-юҡмы, был уның шәхси эше. Сибай ҡалаһының Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейы директоры Дилә Урал ҡыҙы ФӘТҠУЛЛИНА менән һөйләшкәндә уның эш кабинеты түренә ҡарап-ҡарап ҡуйҙым. Әлегә унда сабата элерҙәй ҡаҙаҡ күренмәй. Моғайын, күренмәҫ тә. Ул асыҡ сырайлы, асыҡ фекерле йәш етәксе, әлегә баш булырға өйрәнә, яңы ысулдар эҙләй, асыштар яһай. Иң мөһиме, ана шул эҙләнеүҙәрендә ул үҙе етәкләгән уҡыу йортоноң матур йолаларын, ныҡлы нигеҙен һаҡлай. Шуға ла башҡорт лицейының асылы, сағыу йөҙө бар. Әңгәмә - директор менән.**



### Кадрҙарға ҡытлыҡ бар

Сибай ҡалаһының 13-сө башҡорт мәктәбе, хәҙерге көндә Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейы, 1993 йылда үҙенең эшмәкәрлеген тик башланғыс кластар менән башлап ебәрә. Сибай институты директоры урынбаҫары Вәкил Исмәғил улы Хажиндың тәҡдиме буйынса ул ваҡытта мәктәптә малайҙарҙы һәм ҡыҙҙарҙы айырып уҡытыу буйынса тәжрибә лә үткәрәләр. Һәм, ысынлап та, был тәжрибә юғары һөҙөмтәләр бирә. Тик бөгөнгө мәғариф системаһындағы кадрҙар көрсөгөн иҫәпкә алғанда, малай-ҡыҙҙарҙы айырып уҡытыу мөмкинлеге юҡ. Мәҫәлән, беҙҙә ни бары биш ир уҡытыусы эшләй, шуныһына ла ҡыуанабыҙ әле.

Эйе, кадрҙарға ҡытлыҡ кисерелә. Быны мәктәптә эш хаҡының түбән булыуы менән аңлатырға була. Ҡыҙыҡ һәм ҡыҙғаныс, әммә эш хаҡының аҙ булыуы мәктәпкә осраҡлы уҡытыусылар килеп эләкмәүенә лә булышлыҡ итә. Осраҡлылар файҙалы эшләй алмай. Ысын уҡытыусы, иң беренсе сиратта, балаларҙы яратырға тейеш, сөнки класта ултырған һәр бала атай-әсәйҙең ҡәҙерле балаһы. Балаға дөрөҫ йүнәлеш бирер өсөн уҡытыусылар уларҙың һәр береһенең һәләтен танып, уның шәхес булып формалашыуында төп ролдәрҙең береһен үтәргә тейеш. Был юғары пафослы һүҙҙәр түгел. Үҙемде һис тә осраҡлы кеше һанамайым, сөнки башланғыс кластарҙан уҡ уҡытыусы булырға хыялландым. Беренсе уҡытыусым Мәһҙиева Земфира Бикмырҙа ҡыҙы уҡыусыларын ныҡ яратты, шуға күрәләр, уҡытыусы булыу теләге бәләкәй саҡтан уҡ барлыҡҡа килде. Ысын уҡытыусы мәктәпкә аҡса эшләр өсөн килмәй, был темаға бик күп кешеләр менән фекерләшкәнем бар. Мәктәптә һөнәрендә, балаларҙы яратмайынса эшләп булмай, шуныһы уҡытыусы дәрес биреүсегә әйләнә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ундайҙар бар, улар менән көрәшергә кәрәк, ләкин аҡса ҡолдарын алмаштырырлыҡ һөнәренә тоғро кадрҙар юҡ. Эш хаҡы ысынлап та түбәнерәк, шуға ир уҡытыусылар - вахтаға китә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың күптәре матурлыҡ индустрияһын һайлай.

### Ышаныслы команда

Мин иҫәп буйынса был мәктәптең һигеҙенсе директоры, эшемде 2021 йылдың июнь айында башланым. Әлеге көндә мәктәптә 49 уҡытыусы: шуларҙың өсәүһе, институт тамамлап, быйыл килде. Биш уҡытыусыбыҙ Башҡортостан Республиканың атҡаҙанған уҡытыусыһы исеменә лайыҡ, етеһе республиканың мәғариф алдынғыһы, ике уҡытыусыбыҙ Рәсәй Федерацияһы мәғариф министрлығының Маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләнгән. Был күрһәткестәр, һис шикһеҙ, мәктәп өсөн ҙур ҡаҙаныш. Беҙ бөтә коллектив менән бер принципҡа таянып эшләйбеҙ - бер кем менән дә ярышмайбыҙ, үҙебеҙ менән ярышабыҙ. Бындай йүнәлеш үҙ һөҙөмтәләрен бирә. Мәҫәлән, былтыр беҙҙең ун уҡыусыбыҙ республика кимәлендәге олимпиадала ҡатнашты, быйылғы уҡыу йылында уларҙың һаны артырға тейеш - артҡа сигенеү юҡ. Яңы идеяларҙы тормошҡа ашырғанда ышанаслы команда, дөрөҫ идара итеү булмаһа, эш алға бармай.

Үҙемсә уҡытыусыларҙы дүрт төркөмгә бүләм. Тәүгеләре - дәрес биреүселәр. Улар бик аҙ - биш процент тирәһе. Шунан, эшләгем килә, тик булдыра алмайымдар. Уларға ярҙам итеүсе, өйрәтеүсе кәрәк. Эшләгем килмәй, әммә булдыра аламдар ҙа бар. Ундайҙарҙың, ысынлап та, һәләте бар, тик ялҡаулыҡтары арҡаһында эштәренә енел-елпе ҡарайҙар. Дүртенселәр телһейем дә, эшләй ҙә беләм, тиҙәр. Улар беҙҙең тәжрибәле уҡытыусыларыбыҙ. Кеше 20 йыл буйы мәктәптә эшләп тә уҡытыусы була алмауы ихтимал. Педколледж бөтөп кенә лә ысын уҡытыусы булып киткәндәр бар. Бөтәһе лә кешенең үҙенән, эшенә ҡарата мөнәсәбәтенән тора. Мин холҡо ауырыраҡ булған юғары кимәлдәге профессионал менән эшләргә әҙермен, ә холҡо һәйбәт булып та, насар уҡытҡандар менән эшләй алмайым. Коллектив - ул берҙәм организм, беҙ бөтәбеҙ ҙә бер яҡҡа ҡарап торорға тейешбеҙ, сөнки бер маҡсат өҫтөндә эшләйбеҙ, бер фекерҙәбеҙ, бер йүнәлештә барабыҙ. Һәр инициативаны ыңғай ҡабул итәм.

Хәҙер уҡытыусыларҙың абруйы төшөп бара, тиҙәр. Миненсә, бик күп нәмә ғаиләнән килә. Әгәр ата-әсәләр уҡытыусыларға ҡарата ыңғай мөнәсәбәттә булһа, балаһы алдында уларға ихтирам белдерһә, уҡыусы мәктәпкә яҡшы, ыңғай кәйеф менән килә, уҡытыусыны ихлас тыңлап, һөҙөмтәле белем ала. Икенсенән, ҡалған илле проценты уҡытыусының үҙенән тора. Ул балаларҙы, эшең ярат һа, һәр бер баланы күреп-белеп, уларҙың кәйефен тойоп эшләй белһә генә абруйы артҡандан-арта бара.

### Башҡорт кластары

Биш балалар баҡсаһы, үҙебеҙҙең буласаҡ уҡыусылар менән бик тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ, ундағы балалар мәктәпкә башҡорт телендә иркен һөйләшә белеп киләләр. Балалар һаны артыуы ҡыуандыра, мәҫәлән, 2021 йылда 667 бала булһа, бөгөн беҙҙә 856 бала уҡый. Тимәк, беҙҙең мәктәпте яҡшы беләләр, нәҡ беҙҙә уҡытырға теләйҙәр. Йыл да беҙ беренсе класҡа 90 бала алабыҙ. Өҫтиҫтәнән ашыу тарихы булған лицей милли белем биреү системаһы талаптарына ярашлы эшләүен дауам итә, беҙҙең мәктәптә тик башҡорт балалары ғына уҡый, улар башҡорт телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен төптән өйрәнәләр.

### Өҫтәмә белем

Тәрбиә темаһына килгәндә, үҙем ваҡытында ете йыл тәрбиәүи эштәр буйынса директор урынбаҫары булып эшләгәс, дәрестә тәртип булырға тейеш, тигән принципты беренсе урынға ҡуям. Сөнки тәртип бар икән, бала уҡытыусыны иғтибар менән тыңлай белә, бирген белемде ҡабул итә. Балаларҙы үҫтереү, уларҙың һәләттәрен төрлө яҡлап асыу өсөн бик күп көс һалабыҙ һәм өҫтәмә белем биреү учреждениелары менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ, үҙебеҙҙә балаларға бушлай секциялар булдырабыҙ.

(Дауамы 11-се биттә).

✓ *- Унда ике ҡаҙ бәпкәһе бар. Ҡарап торһаң, үҙе бер әкиәт инде. Бер - береһенән айырылмайҙар. Йәнәш кенә яталар ҙа берәүһе икенсеһен муйыны менән ҡосаҡлай.*



– Ҡаҙҙарҙы йылғаға алып барам, - тип киткәйне, оҙаҡланы Динислам.

Иркен итеп "бассейн" эшләп ҡуйғайны ла ул, һыймай башланылар. Ҡойонабыҙ, тиҙәр ҙә, һыуҙы түгеп-сәсеп, үҙҙәре лә бысранып бөтәләр. Зыу килеп, кәртәгә һыймай йүгерешеп алып китәләр. Күтәрелеп осорға маташҡан булалар хатта, тик ҡанаттары әлегә ҡыҫҡа, ҡауырһындары шыйыҡ.

- Һыу буйына алып барырға мәле етте, - ти ҙә көн һайын шунда китә ире. Ҡаҙҙарынан алда үҙе китә. Тегеләре бер көтөү булып артынан эйәрә. Күмәктәр шул - быйыл да ҡырҡты алдылар. Кәрәк бит

- Һин уларҙың һыуҙа баҫтырышҡандарын, сумып-сумып йөҙгәндәрен ҡарап торһаң! Тәпәйҙәрен һоноп, кирелеп-һуҙылып, сирәмдә рәхәт сигеп ятҡандарын күрһәң!

Телефонына төшөрөп алғандарын күрһәтә Сәлимәһенә..

Йөрөйҙәр инде әүрәп, бала һымаҡ. Ярай, әйҙә, йөрөһөн. Кеше ирҙәре һымаҡ, ерек араһында һыра һемереп ултырмай бит.

- Донъяңды онотоп, оҙаҡ йөрөмә, ҡайт. Төшкөләккә гел һуңлайһың, - тип ҡалды Сәлимә - Ҡайт, көттөрмә мине.

- Иҫемдә, иҫемдә! Әйтмәһәң дә белеп торам инде, - тип китһә лә, ана, һаман юҡ.

- Аръяҡ яр һөҙәк, туғайы ла иркен. Ҡоштарға хөрриәт ул яҡта... - тип ҡуя үҙе.

Аръяҡтың ниндәй икәнен ире һөйләмәһә лә белә Сәлимә, ул - аръяҡ ҡыҙы. Ә Динислам - бирьяҡтыҡы. Үтә киң дә, тәрән дә булмаған Бәрҙәле йылғаһының туғайлы яғы - аръяҡ, тау итәге - бирьяҡ. Элек-электән шулай килә. Бәләкәй саҡта аръяҡтар менән бирьяҡтар араһында бәхәстәр ҡубып ала ине. Ә Сәлимәгә бирьяҡ яғы яҡын ине, ниңәләр, һүҙҙәре лә йылыраҡ, яғымлыраҡ тойола ине. Шуға ул һүҙ көрәштереүҙәргә ҡушылманы, үсекләшмәне. Бирьяҡҡа килен булып килерен белгәндер... Ә Асиялар, Әүбәкерҙәр - бына улар кем еңерҙән керешерҙәр ине!

- Аръяҡтар, ҡамыт аяҡтар! Арҡыры аяҡтар!

- Бирьяҡ - биреле яҡ! Бирьяҡ - тиҫкәре яҡ, кире яҡ!

- Буһасы! Ә һеҙҙең зату бер нәмәгеҙ ҙә юҡ! Мәктәп тә, клуб та, магазин да - вис беҙҙең яҡта!

- Килеп кенә ҡарағыҙ беҙҙең яҡҡа! Туҡмалып ҡайтырһығыҙ!

Дөмбәҫләшеүгә үк барып еткәне булманы былай. Ҡышын Бәрҙәлелә шәре сығып, боҙ туңһа, малайҙар сәкән һуғып уйнайҙар ине. Шул саҡ ҡубып алғылай ине аръяҡ - бирьяҡ алышы.

- Э-эй...Балалыҡ инде....

Сәлимә асыҡ тәҙрә янына килеп баҫты. Ана, аръяҡ, ана, уларҙың өйө. Ус төбөндәгеләй күренеп ята аръяҡ ауыл бынан. Һыу буйы ғына күренмәй, юғиһә, Динисламға йә ҡул болғар, йә йоҙроҡ күрһәтер ине.

Ана, Һырғалаҡ тауы. Ул да яҡшы күренә бынан. Ә ул аръяҡта ла, бирьяҡта ла түгел, ул ауылдың түбән осонда, бирьяҡтарҙың тауына аръяҡтарҙың туғайы барып терәлгән ерҙә. Һырғалаҡ тауында, һыу ингән ауыл быуаһында үсекләшеү юҡ, бында бөтәһе лә бер тиң, татыу.

Ә йәш саҡтар, киске уйындар, туғайҙа дөрләгән усаҡтар, һандуғаслы бөҙрә талдар үҫкән Бәрҙәле буйы, йәйге ҡыҫҡа төндәр - былар ҙа бөтәһе өсөн дә берҙәй ҡәҙерле. Шулай ҙа аръяҡтыҡылар ауылдан ике саҡрымдай алыҫлыҡта ятҡан туғайҙа үҙҙәрен хужаларса тотҡан булалар ине. Алдараҡ баралар, утын кәсәрләйҙәр, усаҡ тоҡандыра торалар.

- Оһо! Ҡунаҡтар килгән икән! Әйҙүк, әйҙүк! -тигән булып ебәрәләр.

Әгләмдең үҙе сығарған йырын уның гармунына ҡушылып, бер-береһенә һыйынып, усаҡ ҡуҙына йылынып, йырлашып ултырған таңдар оноторлоҡмо ни!

*Һин, тип янып-көйгәнемдә*
*Ҡарап та күрмәйһеңме?*
*Мин аңлата белмәйемме,*
*Һин аңлай белмәйһеңме?*

Һәр береһе күңеленә яҡын алып, яратты был эскерһеҙ йырҙы. Осрашыуҙарҙы хәҙер ҙә иң тәүҙә шул йырҙан башлайҙар. Киске уйындарҙан ҡайтҡанда егеттәр генә йырлап инәләр ине ауылға. Бер шулай йырлашып Аҡташҡа етеп килгәндә Динисламдың "Һин аңлай белмәйһеңдер" тип ҡолағына шыбырлап, ҡулдарын нығ итеп түшенә ҡыҫҡанын нисек онотһон Сәлимә? Бөгөнгөләй иҫендә. Динисламға ҡарамай ғына, "Алйот!" тигән булғайны, ҡулдарын тартып алып, ут ҡапҡан бит остарына баҫҡайны.

Э-э-й...Йәшлек, йәшлек...

Ә бер тапҡыр Сәлимә нимәгәләр абындығы ла, һәр саҡтағыса, янында йөрөгән егеттең устарын ҡыҫып тотоп алды. Нығ ҡыҫҡандыр - Динислам сытырайып китте хатта.

- Ауырттымы ни? Эй, бәләкәсте... Ҡана, ө-өф итәйем, - тип егеттең ҡулдарын үҙенә тартты Сәлимә.

- Бәй, усыңа ни булған ул, нишләттең ҡулыңды?

Динисламдың ялланып, ҡыҙарып торған әсе устарына алмаш-тилмәш тын өрҙө. Башын ҡалҡытып, Динисламға ҡараны. Ә Динислам тора ауыҙ йырып, ҡыуанып.

- Рәхәә-әәт, әй, - ти үҙе.

- Нимә булды, әйт һуң. Рәхәт, тип, көлөп тик торасы. Алйот кеше һымаҡ.

- Ҡайыш, Сәлимә, ҡайыш...




Парҙарын бирмәгән егеттәрҙең устарына ҡайыш менән һуғалар ине был уйында. Ә ул ана нисек икән... Башҡаса был уйынға ҡатышманы Сәлимә, Динисламға ҡайыш үҙе өсөн әләгеп торғанын аңланы.

Сәлимәгә йәшлектең онотолмаҫ мәлдәре әле лә шул уҡ туғайҙалыр кеүек. Һис тә үтмәгән ул, бер ҡайҙа ла китмәгән, бөтмәгән, һаман да шунда уларҙың йәш сағы. Туғайҙа усаҡтарҙы башҡалар яҡһа ла, башҡа йырҙар йырланһа ла.

Кит әле, бынау Динислам! Былай оҙаҡламай торғайны, ни булған быға бөгөн? Төш ауҙы бит инде күптән.

Сәлимә ҡапҡа төбөндәге эскәмйәгә сығып ултырҙы. Әҙерәк көтөр ҙә үҙе төшөр һыу буйына. Икмәге бешеп сыҡты. Төрөп кенә һалып ҡуйҙы - йылы ғына көйө ятһын.

- Һары май ҡушып икмәк тызырып алһаң, асыҡтырмай ҙа, арытмай ҙа, - тиергә ярата ире. - Икмәк ашап үҫергә тейеш ауыл малайы.

Динислам дөрөҫ әйтә - аръяҡта ер иркен. Элек унда иген баҫыуы булған, тиҙәр. Иркенлек, тигеҙлек шунан киләләр. Унда өйҙәр ҙә ике урам булып ултырған. Яр ситенән башлана ла урманға тиклем һуҙыла урамдар. Ә Динисламдар яғында урам берәү генә, уныһы ла ярты: тәҙрәләш күршеләр юҡ быларҙа. Уның ҡарауы, тау итәгенә теҙелгән өйҙәрҙең тәҙрәләренән, ҡапҡа төптәренән аръяҡтарҙы ҡарап йәшәй бирьяҡтар. Аръяҡ иртәнге ҡояшҡа ун - ун биш минут алдараҡ иркәләнә башлаһа, бирьяҡ киске ҡояш шәфәғендә күҙ бәйләнгәнсе наҙлана.

Сәлимә йылғаға табан атланы. Ҡулына сыбыҡ тотоп алды. Ҡаҙҙарын ҡарарға китеп барғанды һорашмай ҙа белеп торһондар. Ҡаҙҙарын ҡарар, баҫманы ла күреп ҡайтыр.

Ҡаҡ ҡайын таҡталары үлем тейгеһеҙ, ямғырға ла, ҡарға ла бирешмәй, бешеккән был яҫы баҫма. Ике яҡтың ирҙәре әллә ҡасан һалған баҫма, ул Сәлимә иҫ белгәндә бар ине инде. Унан саҡ ҡына өҫтәрәк ҡаҙ-өйрәк өсөн быуа ла быуылған. Ҡаҙ бәпкәләрен ҡурсалап, ун-ун биш көн Динислам шул быуа янында йөрөй.

- Бәләкәй бәпкәләрҙе өлкәндәре һыйҙырмай, ҡыҫырыҡлайҙар, унда ла дедовщина булып ала!

- Өй ҡаҙҙары унда хужа, беҙҙең электр бәпкәләрен быуанан талап, баҫтырып сығарып ебәрәләр. Яҡлаусы ата-инәһеҙ етемдәр икәнен ҡайҙан беләләр, ҡара әле һин! Ну мин үҙемде таныттып бөттөм уларға. Яр башында тороп, бер һыҙғырып ебәрһәм, тегеләр шундуҡ - шым!

- Беҙҙекеләр ҙә бирешмәй хәҙер, нығындылар, - тип төшкөләккә ҡайтып етә ине. Ә бөгөн ни булған быға? Бөгөн генә лә түгел, һуңғы арала ниңәлер йышыраҡ тоткарлана башланы әле ул. Кисә: "Нишләп оҙаҡланың?" - тип һорағайны: "Малайҙар менән һөйләшеп торҙоҡ", - тип яуапланы. Малайҙары ла үҙе кеүек алтмышҡа баҫҡандар инде, ялдалар хәҙер.

- Стаж етә лә ул, йәш тулмай, - тип башлайҙарҙыр инде хәбәрҙәрен.

Йә ҡайныһы Усман, Сәлимәнең атаһы, килеп, һөйләшеп ултыралар, йә Рәзифә еңгәһе тап була.

- Арҡан кеүек ишелешеп кенә йәшәгеҙ, - тип теләктәр теләп, үҙҙәрен ҡауыштырған ошо Рәзифә еңгәләрен икеһе лә яҡын күрә улар. Тик уның менән оҙаҡлап һөйләшеп тороп булмай - бер урында тик кенә тора белмәй ул. Хәбәрен килеп етер-етмәҫ элек башлай, ҡул бирешеп һаулыҡ һорашып, бит һыйпаған арала хәл-әхүәл һораша, үҙенекен китеп барышлай һөйләп өлгөрә.

Сәлимә өйҙә толҡа тапмай - яңғыҙлыҡҡа күнегә алмай һаман. Эше күмәк араһында булды - мәктәп бал ҡорто кеүек геүләп тора бит. Ялға сыҡҡаны бирле шул тиклем өйрәнгән иренең янында булыуына. Балалар ни, ҡунаҡ ҡына бит хәҙер, һәр береһеенән үҙ донъяһы, үҙ гәм-хәстәре.

- Тиҙ ҡайт, ти ҙә тораһың, әй. Кендегең минә ҡуша йәбешкән әллә? - тип көлә-көлә сығып киткәйне бөгөн.

- Йәбешкән шул. Оҙаҡлама, тигәс, оҙаҡлама. Әйттем - бөттө!

- Иҫемдә, иҫемдә

Иҫемдә, тип алдаштыра ла, донъяһын онота үҙе.

Баҫманан йәйләп ҡына атланы Сәлимә. Туҡтай- уҡтай атланы. Бер килке аҡҡан һыуға ҡарап торҙо. Күктәге аҡ болоттар бала саҡтағы кеүек, һыу менән бергә баҫма аҫтынан үтә сығып, йөҙөп китәләр икән һаман.

Йылға үҙе киң түгел. баҫма оҙон - ике ярҙан аша үткәреп һалынған. Машина ла, егеүле ат та һыйып үтерлек, тик улар өсөн түбәндәрәк күпер бар.

Кемдә генә, ниндәй генә хәтирә һаҡланмай был баҫма хаҡында? Сәлимә менән Динисламда ла бар ундай хәтирәләр. Нисә тапҡыр үткәндер Динислам Сәлимәне баҫманан сығарып оҙатып ҡуйғанда?.. Сәлимәне, кәләшен, оҙатып алғанда, етәкләп алып килде баҫма янына, күтәреп алып сыҡты үҙ ярына. Арғы ярҙа ул еҙнә аҡсаһы, бәке таратты, услап-услап ергә кәнфит һипте, ә был яҡта Сәлимә янсыҡ, сигелгән ҡулъяулыҡ, балдаҡ -һырғалар, ебәк таҫмалар өләште.

- Э-эй... Оноторлоҡмо ни? Иҫемдә, иҫемдә, - тип ҡабатлап торорлоҡ та шул...

Ҡаҙҙар яр буйлап таралышҡан. Һыуҙан әле генә сыҡҡандары ҡағыныпелпенеп алалар, ҡайһылары иренеп кенә, ятҡан ерҙән генә, үлән семтеп ҡаба. Ҡайһылары быуала көйө ойоған. Бына Динисламдың ҡаҙҙары. Үҙҙәре айырым йөрөй. Туғайҙың уйпатыраҡ ерен үҙ иткән улар.

- Унда ике ҡаҙ бәпкәһе бар. Ҡарап торһаң, үҙе бер әкиәт инде. Бер - береһенән айырылмайҙар. Йәнәш кенә яталар ҙа берәүһе икенсеһен муйыны менән ҡосаҡлай. Барһаң, үҙенә лә күрһәтермен. Ғәжәп инде... Мин ул икәүгә исем дә ҡуштым. Көтөргә алып ҡалырбыҙ, йәме.

Бынау икәүҙер Динислам әйткәндәр. Уларға ниндәй исем биргәнен дә аңланы Сәлимә.

Бала һымаҡ әүрәп йөрөрлөк тә икән шул бында. Ана бит, Сәлимә лә Динисламды алып ҡайтырға, тип килгәнен онота яҙған.

Ә Динислам юҡ. Сәлимә тағы тирә - яғына ҡаранды. Ни

✓ **"Хөрмәтле ата-әсәләр, беҙ бер кәмәләбеҙ. Беҙҙең төп пассажирыбыҙ - бала. Икенсе ярға нисек алып сығыуыбыҙ ишкәктәрҙе бергәләп ишеүгә нык бәйле. Зинһар, кәмәне сайҡалтмағыҙ".**



уйларға белмәй торғанда, ҡапыл Динисламдың көр тауышын ишетеп, терт итеп ҡалды. Ул телефондан һөйләшә ине. Ә үҙенә шылтыратҡан кеше менән ул ниңәлер шулай ҡысҡырып һөйләшә - ғәҙәт иткән.

- Исемдә, исемдә! Уны онотоп буламы ни?

Үҙе ҡайҙа һуң? Тауышы бар, үҙе юҡ. Тауышы ла әллә ҡайҙан, аҫтан килә кеүек.

- Мин һинең адресыңды юғалттым бит! Нишләп һин үҙең бер ҙә яҙманың? Ҡалай вәғәҙәләр биреште бит айырылышҡан саҡта. Эх һин!- Иренең тауышы өҙөк-өҙөк ишетелә башланы.

- Әә... Ммм.. Ну... Эйе - эйе... Ю-уҡ!

Сәлимә баҫма буйлап, ҡайтыр яҡҡа ыңғайланы. Ашаған еренә мал да ҡайта, ҡайтыр әле. Һыу буйлап эҙләп йөрөмәҫ бит инде. Йылғаға барғанын да әйтмәҫ. Бая, өйҙә саҡта шылтыратҡанда, абонент телефондан һөйләшә, тиҙәр ине, шунан бирле һөйләшәме ни был абонент? Кит әле...

Баҫманы сыҡҡас, артына боролоп, һыу буйын тағы күҙҙән үткәрҙе һәм тап шул саҡта баҫма аҫтында ятҡан Динисламын күреп ҡалды. Малайҙарса йөҙтүбән ятып, терһәктәренә таянған да, аяҡтарын болғай-болғай телефондан һөйләшеп, күләгәлә, йәшел сирәмдә ята. Баҫма таҡтаһы бөткән ерҙәге аралыҡтан яр буйы яҡшы күренә. Сәлимә гел, эйелә биреп, ҡарап үтә ошо ерҙе.

Ә Динислам телефондан һөйләшә. Донъяһын онотҡан. Ә теге остан ҡатын кеше яуап бирә. Яғымлы, шат тауыш. Сәлимә баҫма осондағы таҡтаға ултырып, аяҡтарын ергә терәне - ниңәлер быуыны бөткәндәй булды.

Һөйләшеү генә етмәне, буғай, быларға - телефондың теге осонда йыр башланылар. Динислам дауам итте:

*Почему ты от меня ушла?..*
*Может, потому что*
*я - солдат...*

Был әрме йырҙарын Сәлимә лә белә. Динислам менән йырлай торғайнылар йәш саҡта. Ниңә, ул да ҡушылып йырлай ала, һүҙҙәрен күптән ятлап бөткән.

*Ведь ему служить*
*не целый век.*
*В гимнастерке тоже человек.*

Башын эйеп, яй ғына атланы Сәлимә. Ҡыйын ине уға. Динисламдың бөгөнгө ҡылығы хыянатҡа тиң ине Сәлимә өсөн.

Ҡапҡа төбөнә килеп еткәс, артына әйләнеп ҡараны. Ҡайтып килмәйме? Яулығын һыпырып, тирләгән битен, йәшле күҙҙәрен һөрттө. Ҡыл өҙөрлөк тә хәле ҡалмаған, арыпталып ҡайтты һыу буйынан Сәлимә.

Яурынына Динислам ҡағылыуҙан уянды.

- Тор, әй. Аш ашап алдым мин, рәхмәт. Сәйҙе яңырттым. Майлап, икмәкләп сәй эсеп алайыҡ та, Аҡташҡа барып киләйек.

- Мин барма...

- Барабыҙ. Машина менән.

Ауылдың үрге осонда Аҡташ тигән ер бар, шуны әйтә Динислам. Ғәжәп ул Аҡташ - тип-тигеҙ ерҙә эре-эре ап-аҡ таштар ята. Ауылдағы башҡа тауҙарҙың, Һырғалаҡ тауының таштары күк, ә былар - сылт аҡ. Бер нисәүһе ерҙә лыпын ята, ҡалғандары уларға һөйәлгән. Был тирәлә бындай аҡ таштар башҡа юҡ - эҙләп ҡарағандар. Ә быларҙы, әйтерһең, кемдер, ҡасандыр, ҡайҙандыр тейәп килтереп, бушатып киткән. Элегерәк кемдәрҙер килеп, шул тирәлә уранғылай башлағас, ауыл ҡарттары уларҙы ҡыуып ебәргән.

Туғайҙан ҡайтышлай йәштәр Аҡташта туҡтап китәләр ине. Зәбир менән Әүбәкер талдан ишеп ҡупшы ғына баҫма эшләгәйнеләр кисеүҙән өҫтәрәк. Шул баҫма аша сығалар ҙа Аҡташҡа киләләр. Аҡташта Әғләм гармун уйнай - уйнай ҙа, күреген бикләп, яурынына аҫып ала. Ауылға ингәс, йәштәр таралыша. Ә Динислам Сәлимәне таҡта баҫма аша арьяҡҡа сығарып ҡуя ине.

- Кил әле, Сәлимә, еләк сәскәһен ҡара әле. Еләккә ошонда килербеҙ.

Сәлимә йәш сауҡалыҡ араһында торған Динислам эргәһенә килә.

- Кит әле! Аяҡ баҫыр урын юҡ та баһа. Ҡайҙан күреп ҡалдың был ерҙе?

- Юҡты эҙләп йөрөгәндә, килеп юлыҡтым.

- Таптыңмы һуң юҡ нәмәңде?

- Таптым, әй!

Аҡташ янына килделәр

- Ярай, табылғас, яҡшы булған. Ә баҫма аҫтында кемде табып алдың һуң? Йырлаша-йырлаша һөйләшә инегеҙ бер ҡатын менән?

Динислам, кем менән һөйләшкәнен онотҡан, тиерһең, аптырап, Сәлимәгә ҡарап торҙо.

- Исемдә лә исемдә, ти инең дә баһа. Оноттоң да ҡуйҙыңмы? Кем ине ул ҡатын? Тамараң инеме әллә? Әйтәм, русса йырлаша инегеҙ...

- Ниндәй ҡатын? Ниндәй Тамара?

- Баҫма аҫтындағы ҡатынды әйтәм.

Динисламға, ниһайәт, барып етте Сәлимәнең төртмә һорауҙары.

- Йөрәкте яра яҙҙың, әй. Алйот. Мирғәлим ине бит ул, хеҙмәттәш! Тауышы шулай уның. Ҡыҙҙар һымаҡ һылыу ҙа ине үҙе. Аяҡтары һинекенән дә төҙөрәк. Саҡырып алырбыҙ әйме, эштәр бөткәс. Әллә ҡасаныш Тамараны ҡайҙан соҡоп сығарҙың?

- Фотоһы ла бар ине бит альбомында. "На долгую память. С любовью. Твоя Тамара" тигән яҙыулы.

- Ә, Томканы әйтәһеңме? Беҙ ҡайтыр мәлдәрәк килгәйне часҡа медик булып. Сат йәбеште бит миңә был. Ҡал, ти, яратам, ти, һинһеҙ йәшәй алмайым, ти башланы. Саҡ ҡотолондо. Мирғәлимгә рәхмәт - нимә тигәндер тегегә - ҡырын-мырын ҡарай башланы, һөйләшергә теләмәй... Ә миңә нимә - мине Сәлимәм көтә!

- Ә ниңә хат яҙманың һуң өс ай буйы?

- Ҡайҙан? Хат яҙырға ваҡыт та юҡ, яңылыҡтар ҙа юҡ. Ҡайтырға әҙерләнә инек бит. Иҫтәлекккә альбомдар эшләйбеҙ, фотолар төшәбеҙ, парадный кейемдә әҙерләйбеҙ. Һалдат ҡайышының йондоҙон алтындай ялтыратабыҙ. Тағы шуныһы - дедтар хат яҙмай унда, хат яҙыу - салагалар эше, белдеңме?

Балҡып, ялтырап ҡайтып төшкәйне Динислам. Уның сибәрлеген күреп, тыны ҡыҫылып, йөрәге туктай яҙғайны Сәлимәнең. Эй, ул саҡтар...

- Һин бында ҡара әле, Сәлимә. Бына!

Динисламдың усында сәй ҡурғашына төрөлгән бәләкәй генә төйөнсөк ята ине. Сәлимә уның төйөнсөктө тағатҡанын көттө.

- Табылыр һымаҡ булып тик торҙо күңелгә. Эҙләмәгән ер, уйламаған уй ҡалманы. Юҡ, тигәс, юҡ. Ә үҙемдең, әллә нисә йыл үтһә лә, төңөлгөм килмәй! Таптым бит, таптым! Мә, Сәлимә...

Сәй ҡурғашында көмөш балдаҡ ята ине.

- Һинә, тип, үҙем һуҡҡайным ошоно. Армияға китерҙән алда һинең бармағыңа кейҙеремен, тип уйлағайным. Ошонда килгәйнек хушлашырға, исеңдәме? Балдаҡты кейҙерә алмай киттем. Ҡайҙа төшөп ҡалғандыр кеҫәмдән - баш етмәне. Бая Мирғәлим менән һөйләшкәндән һуң киттем Аҡташҡа. Барып ҡайтайым, эргә-тирәһен тәртипкә килтерә торайым, тип. Шунда күреп ҡалдым. Сәпсек ояһындай ғына уйымда беҙҙе көтөп ятҡан...

- Ә быныһы ниндәй шырпы?

- Шырпы түгел ул, теге, йәтәс һөйәге. Исеңдәме?

Сәлимәнең онотҡаны ла юҡ. Йәштәр көнө ине. Байрам ине. Уйын-көлкө, ярыштар, йыр бейеү. Гөрләп торҙо ул көн туғай.

Кискә табан, байрам таралғас, сәй эсеп ҡайтайыҡ, тип, ашъяулыҡ тирәләй ултырыштылар. Йәтәс һөйәген Динислам шунда күреп ҡалған. Бер яғын үҙе ҡыҫып тотто, ә икенсе асаһын - Сәлимә

- Шарты нисек булһын?

- Шарты ни шул инде - кем ота, шул отолған кешене ҡыҫып ҡосаҡлай ҙа ирендәренән һурып-һурып тороп, оҙа-ааҡ итеп үбә!

Егеттәр Динисламдың отағына шикләнмәй ҙә.

- Бөгөнгө көн һаналмай! - Ҡыҙҙар ҙа өндәшмәй ҡалманы.

- Көмөш балдаҡ - минеке, ә йәтәсең үҙеңә булһын! Мә!

Үҙе, ҡапыл ынтылып, Динисламды ҡосаҡланы ла ирендәренән үпте.

Күҙҙәрен нурландырып, иренә ҡараны.

- Исемдә, тип әйттеңме шул?

- Ҡайҙан? Ауыҙым буш түгел ине бит!

*ДИРЕКТОР МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# ЫСЫН УҠЫТЫУСЫ...

## мәктәпкә аҡса эшләр өсөн килмәй

**(Башы 9-сы биттә).**

Мәсәләң, спорт мәктәбе менән берлектә тик беҙҙең мәктәптә генә өҫтәл теннисы буйынса көн һайын үткәрелгән секциялар бар. Беҙҙең теннис командаһы Сибай ҡалаһын ғына түгел, Урал арьяғы данын яҡлап, республика кимәлендәге ярыштарҙа ҡатнаша. Волейбол буйынса ла беҙгә тренер килә, балалар менән шөғөлләнә. Балалар ижады үҙәге менән дә тығыҙ бәйләнештәбеҙ, беҙҙең уҡытыусылар уларға барып, рәсми рәүештә эшкә теркәлеп, төрлө түңәрәктәр алып баралар. Әйтәйек, Кәлимулла Ильясов шашка, шахмат, ҡурай, ҡумыҙ түңәрәктәрен алып бара. Ул уҡытмай, өҫтәмә белем биреү педагогы булып һанала. Бындай түңәрәктәрҙең файҙаһы бик күп. Мәсәләң, быйыл "Шаяниум"да беҙҙең "Бишбармаҡ" командаһы республикала беренсе урын алды. "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсында йыл да беҙҙең мәктәп уҡыусылары ҡала исемен яҡлап сыға, был йүнәлештә лә һөйбәт эшләйбеҙ. Үҙ хореографыбыҙ беренсенән дүртенсегә тиклем һәр класта аҙна һайын берәр бейеү дәрестәре үткәрә. Әлиә Таңғатар ҡыҙы Исрафилова һәр класҡа айырым бейеү өйрәтә. "Байыҡ" телевизион конкурсында ҡатнашҡаныбыҙ бар. Ике йыл элек бейеүселәребеҙ Сочи ҡалаһына фестивалгә барып, өсөнсө урын алып ҡайттылар.

### Заманы шундай

Элек беҙ уҡыған ваҡыт менән сағыштырғанда, бөгөнгө уҡыу программаһында материал шул тиклем күп бирелгән, етмәһә, уны балалар ҡыҫҡа ваҡытта үҙләштерергә тейеш. Замана балаларының телефонға нык бәйле булыуы арҡаһында программаларҙы тулыһынса үҙләштереү тағы ла ауырға төшә. Мәктәпкә килгән күп балаларҙың телмәрен үҫтереү өсөн индивидуаль шөғөлләнеү талап ителә, шуға күрә логопедтарға ихтыяж нык арта бара. Беҙҙең менән хеҙмәттәшлек иткән үҙ логопедыбыҙ, унан тыш психолог һәм социаль педагог штаты бар. Заманы шундай: бөгөнгө көндә психологик яҡтан балаларға нык иғтибар бүлергә кәрәк.

### Ишкәктәрҙе бергә ишәйек

Сибай ҙур ҡала түгел, ата-әсәләр менән бер-беребеҙҙе күреп беләбеҙ, уларҙы һәр бер сараға йәлеп итергә тырышабыҙ. Шуға төрлө урынһыҙ дәғүәләр белдереүгә урын ҡалмай. Проблемалы хәлдәр булһа, ата-әсәләргә мөрәжәғәт итәбеҙ, саҡырып, һөйләшеп, бер-беребеҙҙе тыңлап, ишетеп, берҙәм фекергә килергә тырышабыҙ. Уҡыу йылы башланыу менән көҙгө йәрминкә байрамы үткәрҙек, тупланған аҡсаның бер өлөшөн Махсус хәрби операцияға ебәрҙек. Ата-әсәләр араһында дүрт көн дауам иткән волейбол ярышы үтте. Беҙ йылына ике тапҡыр дөйөм ата-әсәләр йыйылышы үткәрәбеҙ. Йәйге каникул ваҡытында мәктәптә ниндәй үҙгәрештәр булған, нимәләр һатып алғанбыҙ, нимәне ремонлағанбыҙ, бөтәһе лә асыҡтан-асыҡ һөйләнелә. Ата-әсәләр, бәлки, ишетеп арығандыр ҙа, әммә йыйылыштарҙы шундай һүҙҙәр менән тамамлайым: "Хөрмәтле ата-әсәләр, беҙ бер кәмәләбеҙ. Беҙҙең төп пассажирыбыҙ - бала. Икенсе ярға нисек алып сығыуыбыҙ ишкәктәрҙе бергәләп ишеүгә нык бәйле. Зинһар, кәмәне сайҡалтмағыҙ".

### Берҙәм форма

Былтыр көҙ республикабыҙҙың мәғариф системаһынан бер төркөм Алтай республикаһына барып, балалар баҡсаһынан педагогия колледжына тиклемге төрлө учреждениеларҙың эшмәкәрлеге менән таныштыҡ. Интернат системаһына килгәндә, унда ошо йүнәлештә бер генә гимназия-интернат һаҡланып ҡалған, ә беҙҙең республикала әлеге мәлдә 56 милли мәктәп бар, бынан тыш, полилингваль мәктәптәр асыла. Унда бөтә республика буйынса ырыу тамғалы берҙәм уҡыу формаһы индерелеүе хайран итте. Был эш унда балалар баҡсаһынан уҡ башлана. Был йүнәлеш бик фәһемле тип уйлайым, сөнки ул балаларҙы тәртипкә өндәй, һәр бала үҙенең ырыуын белә. Беҙҙең лицейҙа үҙебеҙҙең уҡытыусылар коллективының берҙәм формаһы бар, 2022 йылда махсус рәүештә Өфөнән "Ағиҙел" тегеү фабрикаһынан килеп, һәр беребеҙҙең үлсәмдәрен алып, тегеп бирҙеләр. Ҡала, республика кимәлендә берәй сара үтә икән, беҙ мотлаҡ рәүештә үҙебеҙҙең берҙәм формала ҡатнашабыҙ, был беҙҙе башҡаларҙан айырып тора. Әгәр киләсәктә балаларҙан берҙәм форма талап итһәк, иң тәүҙә үҙебеҙ уларға өлгө булырға тейешбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Етәксегә килгәндә, етәксе һүҙе етәкләүҙән алынған. Үҙ фекере, ныҡлы йәшәү принциптары, тормошҡа үҙ ҡарашы булғанды етәкләү кәрәкмәй, ул үҙе етәкләй, тигән уйға килдем Дилә Урал ҡыҙы менән һөйләшкәндә.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ОҘАҠ ЙӘШӘРГӘ ТЕЛӘҺӘҢ...

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар арауығында 100 йәш һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшереүҙәр авторы Леонард Пун белдереүенсә, оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тиң ынғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш итә. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

■ Дәүләт Думаһы депуттары фастфуд ҡаптарына кешеләрҙе ҡурҡытыусы һүрәттәр баҫырға тәҡдим итә. "Известия" яҙыуынса, законды уйлап табыусылар әлеге мәлдә тейешле закондарға үҙгәрештәр әҙерләй. Фастфуд рекламаһында был продукттарҙың зыяны тураһында мәғлүмәт мотлаҡ булырға тейеш, ти депутаттар. Һимереү, үпкә, йөрәк, бөйөр, бауыр зарарланыуы хәүефе хаҡында белгәндәр был ризыҡтар менән артыҡ мауыҡмаҫ ине, моғайын. Составында трансжир, тәм көсәйтеүсе, тиҙ эшкәртелә торған углеводтар, май, тоҙ булғанлыҡтан, фастфуд төрлө сирҙәргә килтерә. Ҡаптарҙың тышыны ошо сирҙәрҙең һүрәтен ҡуйырға уйлайҙар ҙа инде. Сауҙа үҙәктәре фастфудты алкоголь менән тәмәкегә тиңләнелеүен артыҡ сара, тип иҫәпләй. Быға тиклем Роспотребнадзор һөтлө коктейль менән туңдырма етештереүҙә ҡулланылған ҡатнашмаларҙа хлорамфеникол тигән антибиотик тапҡайны. Микробтарға ҡаршы көрәшеүсе был матдә елеккә зыян килтерә.

■ Иртән әфлисун һуты эсеү күпкә файҙалыраҡ, тип билдәләй ғалимдар. Улар 20-40 йәштәге кешеләр араһында тикшеренеүҙәр үткәреп ҡараған. Көн һайын һыңауҙарҙа ҡатнашыусылар картуф, омлет һәм ветчиналы сэндвич ашаған. Әммә беренсе төркөм татлы һыу, икенсеһе ябай һыу, ә өсөнсөһө яңы һығылған әфлисун һуты эскән. Анализдар күрһәтеүенсә, әфлисун һуты үҙен иң файҙалы эсемлек итеп таныткан: "әфлисунлы" төркөмдәгеләрҙең ҡанында глюкоза иң аҙы, ә иммун системаһы өсөн яуап биргән матдәләр күберәк булып сыҡҡан. Шулай уҡ иртәнге аш ваҡытында иң яҡшы эсемлектәр булып йәшел сәй һәм ябай һалҡын һыу иҫәпләнә.

■ Диабет менән яфаланыусылар әстерхан сәтләүеге ярҙамында ҡан тамырҙары һығылмалығын арттыра ала. АҠШ-ның Нью-Хейвен университеты ғалимдары белдереүенсә, был иң уңайлы һәм ябай ысул булып тора. Тикшеренеүселәр уртаса 58 йәштәрҙәге диабет сирлеләр төркөмөн күҙәткән. Сирлеләр көнөнә мотлаҡ 56 грамм әстерхан сәтләүеге ашаған һәм эксперимент аҙағына уларҙың ҡан тамырҙары һығылмалығы артҡан, дөйөм һәм "зарарлы" холестерин күләме кәмегән. Сәтләүектәрҙең юғары калориялы булыуын иҫәпкә алып, дауаланған саҡта ғалимдар тән ауырлығын даими күҙәтеп торорға кәңәш итә.

ТУҒАНЛЫҠ ЙОЛАҺЫ

# ЫРЫУҘАШ ТИГӘН ЯҠЫНЛЫҠ БАР

## Сәфәребеҙ - Ырымбур еренә

**Былтыр Ишембайҙа үткән юрматы башҡорттары ырыуы йыйынында Ырымбур өлкәһенән ҙур ғына делегация ҡатнашҡайны. Өлкәнең Новосергеевка районы биләмәһендәге Ҡыуайыр йылғаһы буйҙарын төйәк иткән Мерәҫ ауылы юрматылары ине улар. Стәрлебаш районы юрматылары бигерәк тә шат булды был ҡунаҡтарға, сөнки улар районың Аллағыуат ауылынан күсеп китеп, Мерәҫ тигән ауылға нигеҙ һалған юрматылар тураһында иҫтәлекте хәтерҙәрендә һаҡлайҙар ине әле.**



*Мерәҫтә яугирҙарға стела.*

Документтарҙа ла теркәлгән ул тарих: юрматы улысы сташинаһы Аллағыуат Ҡолошов исеме менән бәйле Аллағыуат ауылы ревизия яҙмаларында 1751 йылда теркәлгән. XVIII быуат урталарында, башҡорт ихтилалдарынан һуң, Ырымбур юлын ҡарап-тәрбиәләп тороусыларҙан да булған (ямская повинность) Аллағыуат тоҡомдары күпмелер ерен юғалта. Шул сәбәпле Аллағыуат ауылы өс тапҡыр урынын алыштыра. Ә бер төркөм аллағыуаттар Ырымбур яҡтарына сығып китеп, әлеге Мерәҫ ауылына нигеҙ һала ла инде. Мерәҫ ауылы рәсми сығанаҡтарҙа тәүге тапҡыр 1786 йылда телгә алына. Шулай итеп, Мерәҫкә Башҡортостандың Аллағыуат һәм Сытырман ауылдарынан сыҡҡан Тәтегәс түбәһе вәкилдәре нигеҙ һалыуы тураһындағы тарих телеләрҙә лә, быларҙа ла юҡҡа сыҡмаған, хәтерҙә лә, телдә лә һаҡлана.

Был юлы сит өлкәлә йәшәгән ырыуҙаштар янына сығышы менән Аллағыуат ауылынан булған БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Данир Әхмәҙи улы Ғәйнуллин етәкселегендәге делегация юл тотто. Мерәҫтәр Өфөнән, Стәрлебаш районынан килгән ырыуҙаштарҙы туғандарса йылы ҡаршы алды. Ике быуат элек айырылған һәм оҙаҡ ваҡыт аралашмаған нәҫелдәрҙең яңынан берләшеүе билдәһе булды был сара. Шуға ла уртаға һалып һөйләшер һүҙҙәр бихисап ине. Ауылдың мәҙәниәт йортонда ойошторолған түңәрәк ҡорҙа һүҙ юрматы ырыуы, уның тарихы тураһында барҙы. Мерәҫтәр үҙҙәренең үткәнә һәм әлеге ваҡыттағы тормоштары менән таныштырҙы. "Колхоз саҡта ла, совхоз ваҡытында ла беҙҙең хужалыҡ гөрләп торҙо, өлкәлә алдынғы булып, телдән төшмәнек. Мәктәптә башҡортса уҡыныҡ. Әле лә мәктәбебеҙ бар, медпункт бар. Мәсетебеҙ генә юҡ..."- тиҙәр улар.

Нимәһе ҡыҙыҡ: хәтер генә түгел, ырыу билдәләре, мәсәлән, һалауар, сатучин, айсыуаҡ, биҙәү салбар, күсей, алағанат, мерәҫ, нуғай аралары, шулай уҡ Асҡаров, Мортазин, Сатучин, Мәүләтҡолов фамилиялары ла Аллағыуаттағыса һаҡланып ҡалған. Хатта йәҙ-һыҙатта, телмәрҙә лә уртаҡлыҡ барлығын тойорға була ине.

Осрашыу ҙур концерт менән тамамланды. Ауыл халҡы Стәрлебаш районының, Ырымбур ҡалаһы башҡорттарының "Яйыҡ" ансамбле сығыштарын алҡышлап ҡаршы алды. Ә инде Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Искәндәр Ғәзизовтың йырҙары сараға нығыраҡ йәм өҫтәне.

Нимәгә айырыуса иғтибар ителәм: сығыш яһаусыларҙың һәр береһе тиерлек "Беҙ - башҡорттар, беҙ - мерәҫтәр" тип ғорурлыҡ белдерҙе. Ғорурланырлыҡ та шул! Бында беҙ ырыуҙаштарҙы ғына түгел, Башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәрҙәре тураһындағы бәйәнде лә ишеттек. Мерәҫ - Сәғит Мерәҫов, Кәрим Иҙелгужин, Ҡасим Аҙнабаевтарҙың да тыуған ауылы. Белеүегеҙсә, данлыҡлы, шул уҡ ваҡытта йөрәкте инрәтер яҙмышлы сәйәси золом ҡорбандары булған данлы милләттәштәр улар. Бер аҙ тарих:

***Башҡорт милли азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе Сәғит Мерәҫовтың*** сәйәси эшмәкәрлеге уның 1917 йылдың майында Мәскәүҙә үткән I Бөтә Рәсәй мосолмандары съезында ҡатнашыуынан башлана. Ошо съезға килгән башҡорт делегаттары тарафынан Башҡорт өлкә бюроһы төҙөлә, уның составына Зәки Вәлиди, Аллабирҙе Йәғәфәров һәм Сәғит Мерәҫов һайлана. Бюро ағзаһы булараҡ, Сәғит Мерәҫов Ырымбурҙа I Башҡорт ҡоролтайына әҙерләнеү һәм башҡорт улыс сараларын ойоштороу менән шөғөлләнә. 1917 йылдың июлендә уҙған I Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт мәркәз шураһы рәйесе урынбаҫары итеп һайлана. "Башҡорт иттифаҡы бюроһының мөхбире" гәзитен ойоштора, һуңынан "Башҡорт" гәзитенең мөхәррире булып эшләй. 1917 йылдың декабрендә уҙғарылған III Бөтә башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостан автономияһының Кесе Ҡоролтайы һәм Башҡорт Хөкүмәте ағзаһы итеп һайлана. Артабан да ул төрлө яуаплы вазифалар биләй. 20-се йылдарҙа ғилми һәм уҡытыу эше менән шөғөлләнә, Академүҙәктә эшләй, "Башҡорт аймағы"н нәшер итеүҙә ҡатнаша. 1922 йылда Башҡорт АССР-ы Мәғариф халыҡ комиссариатының фәнни бүлеге эргәһендә Башҡортостан көнкүрешен, мәҙәниәтен һәм тарихын өйрәнеү буйынса йәмғиәт ағзаһы итеп һайлана. Р. Г. Игнатьев яҙып алған Салауат Юлаевтың 7 шиғырын тәүге тапҡыр башҡорт теленә тәржемә итә, 1922 йылда уларҙы баҫтырып сығара. Башҡорт алфавитын эшләүҙә ҡатнаша, башҡорт тарихын, әҙәбиәтен һәм фольклорын өйрәнә. "Башҡорт тарихына бер ҡараш" тип тигән хеҙмәт яҙа.1920 йылдар аҙағы - 1930 йылдар башында милләтселектә ғәйепләнеп, эҙәрләнеүҙәргә дусар була. 1932 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында вафат була.

***Икенсе шәхес Кәрим Иҙелгужин.*** 1912 йылда ул Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. Унан ҡайтҡас, милли хәрәкәткә ҡушыла. Тамъян-Ҡатай кантонының хәрби комиссары була, Тамъян-Түңгәүер, Туҡ-Соран, Арғаяш кантондары башҡарма комитеттарына етәкселек итә. 1925 йылда ул "Башҡортостан" гәзитенең мөхәррире итеп тәғәйенләнә. Был мәлдә Кәрим Абдулла улы Иҙелгужин башҡорт халҡы тарихын нығлап өйрәнә. Шуның һөҙөмтәһендә "1917-1919 йылдарҙа башҡорттар хәрәкәте" тигән китап яҙа. Был китап әле лә әһәмиәтен юғалтмаған.1928 йылда Кәрим Абдулла улы Иҙелгужин Башҡортостан мәғариф халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. 1931-1934 йылдарҙа ул Ленинградта ғилми-тикшеренеү педагогия институты аспирантураһында уҡый. Уны тамамлағандан һуң, Өфөгә ҡайтып, Башҡортостан ғилми-тикшеренеү педагогия институтын ойоштороу һәм асыу эшенә тотона, уның директор урынбаҫары вазифаһын намыҫлы башҡара.1936 йылдың сентябрендә К. А. Иҙелгужин ҡулға алынып, контрреволюцион эшмәкәрлектә ғәйепләнә. Уның ғүмере 1937 йылдың 8 декабрендә Коми АССР ында урынлашҡан төрмәләрҙең береһендә өҙөлә.

***Тағы бер шәхес Ҡасим Аҙнабаев*** - комсомол һәм партия органдары ветераны, журналист. Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1965). Сәйәси золом ҡорбаны. Иң ауыр, ғәҙелһеҙлектең, шәхес культының сәскә атҡан йылдарында, 1937 йылдан алып "Башҡортостан" гәзитенең яуаплы мөхәррире була. 1938 йылда ялған ғәйепләү буйынса репрессиялана һәм 1956 йылға тиклем төрмәләрҙә (1938-1946 йылдарҙа һәм 1949-1954 йылдарҙа), лагерҙарҙа, һөргөндәрҙә була. 1957 йылдан алып 1971 йылғаса, пенсияға киткәнгә тиклем, Башҡортостан китап нәшриәтендә өлкән мөхәррир булып эшләй. Республика матбуғатына етәксе-

лек итеү буйынса яуаплы вазифаларҙа эшләп, Ҡасим Ҡотлобирҙе улы бер үк ваҡытта ҙур фәнни-педагогик эш алып бара, партия хеҙмәткәрҙәренең һәм журналистарҙың квалификацияһын камиллаштырыу курстарында лекциялар уҡый.

Бына шундай билдәле шәхестәрҙең тыуған төйәге ул Мераҫ ауылы. Әлбиттә, һәр ауылда бындай ғорурланып та, әсенеп тә иҫкә алыр тарих һәм шәхестәр бар. Тик уларҙы өйрәнеүселәр генә бик күренмәй. Ә бына Мераҫта Гөлниса Сатучина, Урал Ильясов кеүек тыуған яҡ тарихын өйрәнеүселәр булыуын белдек, сығыштарын ишеттек. Ә бит ошондай ауылдарҙың тарихын өйрәнеү шәжәрә тамырҙарын аяҡҡа баҫтырыуҙы ғына түгел, башҡорт халҡы үҙләгенең үҙгәрә барған донъяға яраҡлашыу һәм һаҡланып ҡалыу процестарын да күҙаллата. Шуға ла ырыуҙаштарҙың туғанлыҡты юллап аралашыуы байрам итеп кенә түгел, ә үҙебеҙҙе тиңдәр араһында тиң итеп йәшәтеү, милләт булараҡ һаҡланып ҡалыуҙың бер сараһы итеп тә ҡаралырға тейештәр.

## Йәштәр ҙә осрашты

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың "Атайсал" мәҙәниәт үҙәгендә юрматы ырыуы йәштәре йыйыны булып үтте. Ишембай, Стәрлебаш, Мәләүез, Стәрлетамаҡ, Федоровка, Ғафури райондары биләмәләрендә тыуып үҫкән юрматы ырыуы йәштәре, бер майҙанға йыйылып, шәжәрә ағасындағы нәҫел-нәсәбе менән танышты, тарихи хәтергә байҡау яһаны, осрашыуға килгән оло быуын вәкилдәре - Юрматы ырыуы советы ағзаларының кәңәш-фекерҙәрен тыңланы, үҙ-ара йәнле итеп аралашты.**

Йыйылыусылар юрматы таланттарының етди, эшлекле сығыштарҙы аралаштырған йыр-бейеүҙәрен тамаша ҡылды, бигерәк тә алыҫ ерҙе яҡын итеп килеп еткән ырыуҙаштарҙың - Мәләүеҙҙән Гөлсирә Абдуллина һәм Гөлдәр Даутованың, Стәрлетамаҡтан Айбулат Мансуровтың, Стәрлебаш районынан Ҡәҙриә Зөбәйерованың, Ишембайҙан Альбина Солтанованың, Әнилә Әлмөхәмәтованың, билдәле ҡурайсыбыҙ Илнур Хәйруллиндың, шулай уҡ Стәрлебаштан данлы "Стәрлебаш бөркөттәре" халыҡ эстрада-фольклор коллективының сағыу сығыштары алҡыштарға күмелде. Тамаша һуңында иһә бөтә зал композитор Юлай Үҙәнбаевтың Ғәлиә Кәлимуллина һүҙҙәренә яҙылған "Юрматы" гимнын Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Юнир Һағынбаевҡа ҡушылып, күмәкләп башҡарҙы.

*Аҡтайлаҡ, аҡтайлаҡ,*
*Юрматылар йәшәй ил данлап,* - тиелә гимнда.

Эйе, Юрматы ырыуы - тәрән тамырлы, бай тарихлы, күп һанлы данлы шәхестәр тәрбиәләгән ырыу. "Йылдар үтә, замандар алмашына, әммә ырыуыбыҙҙың бай мираҫы, ҡаһарманлыҡ тарихы - ул һәр саҡ беҙҙең менән, беҙҙең ҡаныбыҙҙа, йөрәгебеҙҙә", - тип һығымта яһаны осрашыуҙы алып барыусы һәм ойоштороусы юрматы йәштәре Айтуған Байисламов менән Зилара Хәмитова.

Форсаттан файҙаланып, йәш быуын вәкилдәре менән тыуған төйәк, тыуған халыҡ мәнфәғәтендә атҡарыла торған ҡайһы бер мәлдәр тураһында фекерләшеп алдыҡ. Иң тәүҙә, әлбиттә, ошо ҡорҙо ойоштороусыларҙың береһе Айтуған Баисламовтың әйткәндәрен тыңланыҡ. "Минең тыуған төйәгем - Ишембай районының Эткол ауылы, - тине ул. - Һөнәрем буйынса - табипмын. Тыуған төйәк үсеше өсөн ҙур финанс сығымдар талап итеүсе ниндәйҙер проекттарҙы тормошҡа ашырыу әлегә беҙҙең, йәштәрҙең, ҡулынан килмәй, әлбиттә. Ә шулай ҙа тап бөгөндән беҙ эшләй алырлыҡ эш - ул саралар үткәреү. Районда ла, Өфөлә лә йәштәрҙе йыйып, уларҙы берҙәмлеккә өндәү, үҙ-ара таныштырыу, шулай уҡ күңелдәрендә тыуған яҡҡа һөйөүҙе нығытыу өсөн төрлө осрашыуҙар ойоштороу беҙҙең ҡулдан килә. Шулай уҡ йәштәргә үҫеш мөмкинлеге биргән, аң даирәһен киңәйткән лекциялар, оҫталыҡ дәрестәре лә бик кәрәк. Мәҫәлән, Юрматы ырыуы йәштәре йыйыны ла тап ошо маҡсаттарҙы күҙҙә тотоп ойошторолдо: тарихты, шәжәрәләрен белһендәр, башҡорт ғаиләһе традицияларына байҡау яһаһындар, тинек.

- Йәштәребеҙҙең ошондай йыйындарының файҙаһы булыр, Аллаһ бойорһа, сөнки халҡыбыҙ берҙәм булғанда ғына ҙур эштәр атҡарып сығырға мөмкин. Үҙебеҙҙе тиңдәр араһында тиң итерлек итеп һаҡлап ҡалыр, тамырҙарыбыҙҙы, телебеҙҙе онотмаҫ өсөн ошолай бергәбергә йыйылыуҙар, аҡһаҡалдар әйткәнде ҡолаҡҡа индереү бик тә кәрәк, - тине тағы бер юрматы вәкиле Мәғарифты үҫтереү институтының гуманитар белем биреү кафедраһы доценты Гөлфиә Әлмөхәмәтова.

## Әйткәндәй...

**Һүҙ ҙә юҡ, һуңғы ваҡытта башҡортобоҙ ырыуҙары вәкилдәре бик тә ныҡ әүҙемләште. Әле табындар, әле әйләләр, әле түңгәүерҙәр, әле ҡатайҙарҙың, бөрйән, үҫәргән, ҡыпсаҡ, тамьяндарҙың үткәргән саралары, осрашыуҙары тураһында ишетеп-күреп торабыҙ. Бик мәслихәт!**

Тағы бер матур йолаға йән өрөлә: юғарыла яҙылғанса, ҡасандыр үҙҙәренең ауылынан күсеп китеп, башҡа ерҙәргә барып төйәкләнгән ырыуҙаш-ауылдаштар ҙа әүҙемләште. Күптән түгел Ишембай районы Ҡанаҡай ауылында шундай матур осрашыу үтте. Стәрлебаш районы Елембәт ауылы делегацияһы килде бында туғанлыҡты юллап. Билдәле булыуынса, Ишембай районын һыулаған Һәләүек буйы ауылдары бик боронғо. Рәсәйгә ҡушылғандан һуң ғына уларҙы барлап, теркәп ҡуя башлағандар. Ревиз яҙмаларында Ҡанаҡай-Шипай-Елембәт ауылы 1757 йылда тәүгә теркәлгән. Ул саҡта улыс старшинаһының исеме Ҡаныҡай Кинйәғолов булған. 1816 йылдарҙа әлеге Ҡанаҡайҙан Елембәт Абдулхәйеров етәкселегендәге бер төркөм бүленеп китеп, Стәрлебаштағы Елембәткә нигеҙ һалған. Архив материалдарында Ҡанаҡай-Шипайҙа мәсет һәм училище булған, тип яҙылған (ниндәй училище икәнен асыҡлайһы бар). Ғөмүмән, ҡайҙа, ҡайһы төбәктә ырыуҙаштар, милләттәштәр йәшәүе тураһындағы мәғлүмәт халыҡ хәтерендә һаҡлана, телдән дә һөйләйҙәр, тик уларҙы иғтибарға ныҡлап алып, өйрәнеүсе, китап итеп төпләүселәр генә һирәк. Йәштәребеҙгә, балаларыбыҙға бына ошо бурысты ла еткерә йөрөргә кәрәк бит ул.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**


*Мераҫ ауылының фольклор төркөмө.*

## ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Тал ҡурҙайы
**(Садовая камышевка)**



Ҡамыш туғайына оҡшап тора, бары тик ҡойроғоноң өҫтө генә йәшкелт йәки ерән түгел, ә көлһыуыраҡ, аяҡтары асыҡ һоро.

Кесерткән күпләп үҫкән ерҙә, баҡсаларҙың үлән баҫып киткән дымҡыл урындарында йәшәй. Нуриман районының Нимесләр ауылы эргәһендә тап иткәнебеҙ булды. Утын әҙерләп алынған ерҙә туҙып ятып ҡалған ағас сыбыҡтарына ҡунып һайрай ине ул.

Башлыса төндә генә һайрай. Йыры - башҡа ҡоштарҙан отоп алынған төрлө-төрлө өҙөктәрҙән ғибәрәт. Шулай ҙа уларҙы бер "көй"гә һалып йырламай, һәр "өҙөк" 2-3 тапҡыр башҡарыла ла, уларҙың араһында пауза яһала, был мәлдә асыҡ ҡына "чек-чек" тип ҡысҡырып та ала. Тауышының көсө, шулай уҡ моңо йәһәтенән төнгө ҡоштар араһында ҡалышһа, һандуғастан ғына ҡалышалыр.

### Сыбар ҡурҙай
**(Камышевка-барсучок)**



Турғайҙан вағыраҡ, кәүҙәһенең өҫкө яғы ерән, башы, арҡаһы буйлы һыҙыҡтар менән биҙәлгән, ҡорһағы - ҡыҙғылт аҡ. Сағыу ҡашы күҙгә ташланып тора. Йырлаған саҡта осоп өҫкә күтәрелә лә, яңынан ергә ҡуна.

Башҡа ҡоштарҙы ҡабатлап йырлай. "Цирири-цирири, тр-тр-тр, кли-лили-лили, чи-чи-терере" - ул һәр ижекте ҡабаланып бер нисә тапҡыр ҡабатлай ҙа ҡабатлай. Хәүефләнгән мәлендә аҫсарлаҡ кеүегерәк тауыш бирә.

Һаҙлыҡтағы һәм дымҡыл яландағы бейек булып үҫкән үләнгә, ҡамышҡа, ҡыуаҡтарға оя ҡора. Бындай урындарҙа сыбар ҡурҙай ғәҙәти ҡош.

### Ҡамыш ҡурҙайы
**(Тростниковая камышевка)**



Турғай ҙурлығында, өҫкө яғы асыҡ һоро, аҫҡы яғы ҡыҙғылт аҡ, ҡойроғоноң өҫтө ерән. Ҡашы асыҡ төҫтә, аяҡтары - ҡара һоро.

Ныҡ тәрән булмаған һыу яткылыҡтары тирәләй үҫкән ҡамышлыҡтар һәм ҡыуаҡтарға оя ҡора.

Йыры - һыҙғырыуҙарҙан, шыҡырлауҙарҙан тора. Һәр ижекте 2-3 тапҡыр ҡабатлай, мәҫәлән, "сыррыҡ-сыррыҡ-яҡ-яҡ-яҡ", киҫкен итеп "сырр" тип ҡысҡыра.

Урал аръяғында ғәҙәти ҡош, күлдәр бирәһендәге ҡыуйы үләндә күпләп йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**



## 27 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.50 Д/ф "Чернобыль. Как это было". [16+]
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "В парке Чаир". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.30, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тёплый ветер с севера". [16+]
0.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Хор". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Навигатор истории. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. Дети. [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Башкортостан#вместе. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00, 3.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/с "Города-герои". [16+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Отпуск, который не состоялся". [12+]**
**1.30 Спектакль "Руди - never off". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 28 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "В парке Чаир". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тёплый ветер с севера". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Запасной игрок". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00, 3.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Меня ждут на Земле". [12+]**
**1.30 Спектакль "Я помогу тебе, папа". [12+]**
**2.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 29 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "В парке Чаир". [16+]
0.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тёплый ветер с севера". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Запасной игрок". [12+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Формула здоровья. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Деловая среда. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 К Международному дню танца "Байык-2025". Гала-концерт. [12+]**
**2.00 Спектакль "Галиябану". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 30 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 17.00, 22.45 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.15, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "В парке Чаир". [16+]
23.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Удивительные люди". [12+]
0.15 Х/ф "В ожидании чуда". [16+]
3.43 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Запасной игрок". [12+]**
**11.00 Д/с "Вопрос науки". [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Навигатор истории. [12+]**
**16.15 Уралым. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Материнство и детство. [12+]**
**17.15 Специальный репортаж. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Формула здоровья. [12+]**
**20.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Меж высоких хлебов". [12+]**
**1.30 Спектакль "Пустая колыбель". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 1 МАЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Белые росы". [12+]
8.00 Х/ф "Верные друзья". [0+]
10.15 Х/ф "Женитьба Бальзаминова". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Табор уходит в небо". [12+]
14.10 Х/ф "Белое солнце пустыни". [0+]
15.50 Д/ф "Империя: Александр I". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Александру Зацепину - 100!" Юбилейный концерт. [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.55 Х/ф "Я делаю шаг". [12+]
1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
3.45 Т/с "Дневник свекрови". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 2.10 Большой праздничный концерт "Песни русского мира".
13.20 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
15.15 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.30 Х/ф "Первый на Олимпе". [12+]
23.25 Х/ф "Чемпион мира". [6+]
4.03 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Автограф. [12+]**
**9.00 Территория женского счастья. [12+]**
**9.15 Материнство и детство. [12+]**
**9.30 "Йома". [6+]**
**10.00 Т/с "Запасной игрок". [12+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 Тирмәкәй. [6+]**
**11.30 "1 мая". Детский концерт. [6+]**
**12.00 Спектакль "Сила любви". [12+]**
**15.00 "Во имя жизни". Вечер памяти Радика Гареева. [12+]**
**17.30 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Формула здоровья. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Первый троллейбус". [12+]**
**1.30 Спектакль "Сумерки". [12+]**
**3.00 Колесо времени. [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 2 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.10, 6.10 Х/ф "Белая ночь, нежная ночь..." [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Х/ф "Табор уходит в небо". [12+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.15 Премьера. "Хочется праздника". [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.10 Т/с "Шифр". [16+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 Премьера. Ежегодная церемония вручения премии "Шансон года". [12+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
4.30 Х/ф "Под одной крышей". [12+]
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.45 "Наши. Военкоры". [12+]
12.15 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Аншлаг и Компания". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Училка". [16+]
0.40 Х/ф "Управдомша". [12+]
4.02 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.45 Хазина. [6+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 "Семья". Детский концерт. [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30, 4.45 Навигатор истории. [12+]**
**12.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Материнство и детство. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**0.45 Х/ф "Дорога к дому". [12+]**
**2.00 Спектакль "Дальше - тишина". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 3 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.15 Х/ф "Мэри Поппинс, до свидания". К 70-летию Натальи Андрейченко. [0+]
16.55 "Эксклюзив". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. "До Ре". [12+]
21.00 "Время".
23.00 Весенние игры "Что? Где? Когда?". [16+]
0.00 "Большая игра". [16+]
1.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
4.25 Х/ф "Полцарства за любовь". [12+]
6.00 Х/ф "Заезжий молодец". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Весёлые ребята". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.40 Т/с "Мастер и Маргарита". [16+]
3.26 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.45 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Ап-асыҡ. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Формула здоровья. [12+]**
**16.30 Д/ф "Герои. Два капитана". [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Д/с "Города-герои". [16+]**
**18.15 Спектакль "Эшелон". [12+]**
**19.45, 3.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Х/ф "Мой сосед - пришелец". [16+]**
**1.15 Спектакль "Путем взаимной переписки". [12+]**
**3.15 Д/с "Города-герои". [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Апрель - Май (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (10) дүшәмбе | 3:56 | 5:46 | 13:30 | 18:17 | 20:40 | 22:30 |
| 28 (11) шишәмбе | 3:54 | 5:44 | 13:30 | 18:19 | 20:42 | 22:32 |
| 29 (12) шаршамбы | 3:52 | 5:42 | 13:30 | 18:20 | 20:44 | 22:33 |
| 30 (13) кесе йома | 3:50 | 5:39 | 13:30 | 18:21 | 20:46 | 22:34 |
| 1 (14) йома | 3:51 | 5:37 | 13:30 | 18:22 | 20:48 | 22:35 |
| 2 (15) шәмбе | 3:50 | 5:35 | 13:30 | 18:23 | 20:50 | 22:36 |
| 3 (16) йәкшәмбе | 3:48 | 5:33 | 13:30 | 18:25 | 20:52 | 22:37 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

*БАҠСА*

# ТОМАТ



**Томат ултырта торған тупраҡты артыҡ ашларға кәрәкмәй. Әгәр ҙә яҙын түтәлгә тиҙәкте күп һалһаң, томат яҡшы үҫәсәк, әммә сәскәгә тумаланырға ашыҡмаясаҡ.**

• Шул саҡта үҫентенең бер нисә ботағын өҙөп ташларға һәм фосфорлы ашламалар менән туҡландырырға кәрәк. Иң яҡшыһы - һыуҙа иҙелгән тиҙәк (10:1), 10 литр һыуға 40 грамм суперфосфат һәм 1 стакан көл өҫтәргә.

• Әгәр ҙә томат үҫентеләре яй үҫә, япраҡтары һарғая икән, күптәр уға дым етмәй, тип, күп итеп һыу һибә башлай. Дөрөҫөрәге, уға туҡланыу өсөн микроэлементтар етешмәй.

• Азот етешмәһә, үҫемлек үҫмәй, һабаҡтар тиҙ гена ҡатып бара. Уңыш ваҡ була һәм тиҙ өлгөрә.

• Һабаҡ нәҙек, япраҡтар ваҡ һәм шәмәхә төҫөндә икән, томатҡа фосфор етешмәй.

• Калий етешмәгәндә япраҡтарҙың ситтәре һарғайып кибә, һуңынан улар һарғая һәм ҡойола башлай. Томаттарҙа ҡара-һоро һыҙыҡтар барлыҡҡа килә.

• Баҡыр етешмәһә, томаттың сәскәләре ҡойола.

• Баҡсасылар әйтеүенсә, томат үҫентеһен 1 тапҡыр йодлы һыу һипһәң (3 литр һыуға 1 тамсы йод), ул яҡшыраҡ үҫә, ботаҡтарҙы ла күберәк еблә, тиҙерәк сәскә ата. Томат күпкә эрерәк була һәм бер нисә көнгә иртәрәк өлгөрә.

# АЛЛЫ-ГӨЛЛӨ СӘСКӘЛӘР



**Баҡсала йәшелсә, еләк-емештән тыш сәскә лә үҫтергегеҙ килһә, күп йыллыҡтарына өҫтөнлөк бирегеҙ. Сәскәне һайлағанда, гәҙәттә, уның матурлығы менән бер рәттән, һыуыҡтарға бирешмәүе, артыҡ иғтибар талап итмәүенә лә ҡарарға кәрәк.**

***Астильба*** - күләгәлә яҡшы үҫә һәм сәскә ата. Шуға ла уны баҡсаның яҡтылыҡ ныҡ төшмәгән урындарына ултырта алаһығыҙ. Астильбаның тәпәш сорттары ла, бейеклеге 1 метрға еткәне лә бар. Аҡ, ҡыҙыл, алһыу төҫтә сәскә ата. Сәскәләр 10 аҙнаға тиклем ултыра. Астильбаға ваҡытында һыу ҡойоп торһаң, етә. "Aphrodite", "Cattleya" сорттары матур.

***Анемона*** - күп йыллыҡтар араһында иң матур һәм нәзәкәтле сәскәләр, моғайын. Төҫө аҡтан алып сағыу ҡыҙылға тиклем. Ҡара тупраҡта һәм күләгәлә яҡшы үҫә. Беҙҙең тәбиғәт шарттарында "Honorine Jobert", "Septembercharm" гибриттары ҡулайлы.

***Гелениум*** - оҙаҡ сәскә атыуы менән һоҡландыра. Ҡайһы бер сорттары йәй буйына сәскә ата. Улар ҡояш ярата, иң мөһиме, ваҡытында һыу һибеп тороу. Сортына ҡарап, йәй башында йәки көҙ сәсәләр. Тәҡдим ителгән сорттары - "Waltraud", "Rubinzwerg", "Septembergold".

***Яран гөлө*** - ҡышлаған гөлдө йәйгелеккә баҡсаға сығарып ултыртһағыҙ, ул эре сәскәләре менән ҡыуандырыр. Яран гөлө оҙаҡ сәскә атмаһа ла, һуңынан уның япраҡтары сағыу ҡыҙғылт төҫкә инә һәм үҙенсәлекле биҙәк өҫтәй.

***Котовник*** - халҡын тәбиғәтле төбәктәрҙә яҡшы үҫә. Сәскәһенең формаһы һәм төҫө менән бер аҙ лаванданы хәтерләтә. Артыҡ ҡарау талап итмәй, ауырыуҙарға бирешеп бармай, төрлө урында ла үҙен яҡшы тоя. Тәүге тапҡыр сәскә атҡас, сәскәһен ҡырҡып алһаң, ул яңынан сәскә атасаҡ. Котовникты үҫтерергә булһағыҙ, уның "Walker Low", "Six Hills Giant" сорттарына иғтибар итегеҙ.

***Мәк*** - үҙенең сәскәләренең ҙурлығы һәм матурлығы менән арбар. Мәктең иртә сәскә ата торған сорттары - май-июнда, һуң ата торғандары июнь-июлдә сәскә ата. Ҡояшлы урында, кальцийға бай тупраҡта үҫә.

***Рудбекия*** - һарғылт-һары төҫтәге был сәскә йәй аҙағына, көҙ башына сәскә ата. Тамыры нык йәйелеп китеп, бөтөн баҡсаны баҫып алыуы ла бар. Дымлы тупраҡты, ҡояшты ярата. Иң яҡшы сорты - "Goldstrum".

***Хоста*** - был сәскәне астильба янына сәсһәгеҙ, бик матур күренәсәк. Хоста сәскәһенең япраҡтары ҙур. Ҡыңғырауле аҡ йәки алһыу сәскәләре июндә сәскә ата. "Hosta Sieboldieana", "Hosta Fortunei" сорттары матур.

# ҠАУЫНДЫ МИСКӘЛӘ ҮҪТЕР



**Ҡауынды мискәгә сәсеүҙең үҙенең ыңғай яҡтары бар, урынды ла күп алмай. Бының өсөн 200 литрлы иҫке ҙур тимер мискәне ҡулланам.**

Тәүҙә мискәнең тышын аҡ буяу менән буярға кәрәк. Уны яртыһына үлән, бесән, һалам тултырып, өҫтөнән 3-4 биҙрә ҡара тупраҡ һалам. Өҫтөнә марганцовкалы йылы һыу ҡоям да, бер нисә көнгә өҫтөн баҫырып ҡуям. Тупраҡты мискә тулғансы һалмағыҙ.

Орлоҡтарҙы шыттырғас, мискәгә сәсәм дә, пластик шешә менән ҡаплап ҡуям, ә өҫтөнән тағы ябам. Ҡауын шытып сыҡҡас, көн торошона ҡарап, шешәләрҙе алам. Мискәнең уртаһына берәй таяҡ ҡаҙап, уға полиэтилен бәйләйем, төнгөлөккә уның менән мискәне ябам, көндөҙ кәрәк булмағанда, алып ҡуяһың. Химикаттар ҡулланмайым, кесерткән үләне төнәтмәһе ҡоям.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# РИНГТА - АРТУР СОБХАНҒОЛОВ

**Билдәле боксер Артур Собханғолов Тажикстандан донъя чемпионаты призеры, Олимпия уйындарында ҡатнашыусы Баходур Усмонов менән рингта осрашасаҡ.**



12 раундтан торған алыш 24 апрелдә Өфөлә үтәсәк. Профессиональ рингта еңелеү белмәгән Артур Собханғолов еңеүҙәр серияһын дауам итеп, Халыҡ-ара бокс федерацияһы рейтингында артабан да юғары урындарға күтәрелмәксе. Әле ул һигеҙенсе килһә, Усмонов унан өс баҫҡысҡа түбәндәрәк. Артур Собханғолов - Рәсәй чемпионаттарында күп тапҡыр миҙал яулаған, IBA.PRO версияһы буйынса Европа чемпионы билбауына эйә булған боксер. Быйыл февралдә Собханғолов филиппин спортсыһы Верджил Виторҙы техник нокаут менән еңеп, ҙур уңышҡа өлгәште.

Шулай уҡ турнирҙа Башҡортостандан тағы ла ике боксерҙың сығыш яһауы көтөлә. Өс тапҡыр Рәсәй чемпионы, 2024 йылдағы БРИКС уйындары еңеүсеһе Азалия Әминева Нигериянан Синтия Огунсемилоре менән осрашыуҙа уҙ ауырлыҡ категорияһында Азия чемпионын асыҡлаясаҡ. Профессиональ боксер Данис Ғабдрафиков шулай уҡ Азия чемпионы билбауы өсөн Ҡаҙағстандан Рәхәт Сейтжан менән алышасаҡ. Турнир Халыҡ-ара бокс ассоциацияһы президенты Умар Кремлев, Рәсәй һәм БР Бокс федерациялары ярҙамында ойошторола.

Ошондай кимәлдәге турнирҙар һәм башҡорт боксерҙарының халыҡ-ара аренала сығыш яһауы республикала был спорт төрөнөң юғары кимәлдә үҫешеүе хаҡында һөйләй. Республика Хөкүмәте рәйесе Андрей Назаров бокстың төбәктә төп дисциплиналарҙың береһе булыуын билдәләне.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 апрель "Килен"** (З. Мусина, Ф. Ғарипов, инсц. З. Бураҡаева), драма. 16+
**26 апрель "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+
*Әлмәт Татар дәүләт драма театры гастролдәре*
**27 апрель "Итальян"** (К. Гольдони, С. Таһировский), комедия. 16+
**28 апрель "Ат ҡарағы"** (Т. Миңнуллин, А. Жаббаров), драма. 12+
**29 апрель "Ел артынан"** (Х. Хоссейни, К. Тукаев). 16+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24 апрель "Антоний. Клеопатра"** (У. Шекспир, И. Ҡаҙаҡбаев), мөхәббәт тарихы. 19:00. 16+
**25 апрель "Цирк на поляне"** (М. Непряхин, О. Мусина), әкиәт. 12:00. 0+
**25 апрель "Антоний. Клеопатра"** (У. Шекспир, И. Ҡаҙаҡбаев), мөхәббәт тарихы. 18:00. 16+
**26 апрель "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев, М. Ҡолбаев), әкиәт. 12:00. 0+
**28 апрель "Аладдин"** (И. Казакова, Р. Хәкимов), мажаралы ваҡиға. 10:00 һәм 11:00. 6+
**28 апрель "Аҡбуҙат"** (И. Ҡаҙаҡбаев, З. Бураҡаева), фэнтези. 19:00.12+
**29 апрель "У ковчега в восемь"** (У. Хуб, М. Ҡолбаев), ғаилә спектакле. 12:00. 6+
**29 апрель " Я вернусь"** (И. Лоҡманов). 19:00. 12+
**30 апрель "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Ҡолбаев), драма. 12:00. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**24 апрель "Путь Победы"** (Д. Гәрәева, К. Баязитова). 12:00. 6+
**24 апрель "В последний путь под рок-н-ролл"** (В.Денисов). 19:00. 16+
**25 апрель "Сказка о Царе Салтане"** (А.Пушкин). 12:00 һәм 15:00. 0+
**25 апрель "Етем төлкө"** (А. Волков), башҡорт халыҡ әкиәте. 14:00. 0+
**25 апрель "Любовное приключение"** (В.Аношкин). 18:00. 16+
**26 апрель "Вечно эта 345-ая!"** (Ж.Кусаинова). 12:00 һәм 15:00. 6+
**28 апрель "Путь Победы"** (Д. Гәрәева, К. Баязитова). 11:00. 6+
**29 апрель "О героях былых времен"** (М. Батурин). 19:00. 12+

### Башҡорт дәүләт филармонияһы

**24 апрель "Шелест жёлтых страниц. Портрет времени в музыке и слове"** Валентина Топычканова (вокал) һәм Олеся Исламованың (нәфис һүҙ) концерт-спектакле. 12+
**24 апрель "Йырҙарымда халыҡ тарихы"** Айгөл Һағынбаеваның өр-яңы концерт программаһы (бәләкәй зал). 12+
**25 апрель "Баш ҡаланың йәш таланттары"** Өфө ҡалаһының 10-сы балалар музыка мәктәбе сығыш яһай. 6+
**26 апрель "Бүреләр"** рок-төркөмө һәм Башҡортостан Республикаһының Т. Сәйфуллин исемендәге дәүләт академик хор капеллаһы концерты. 16+
**28 апрель** Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы **Рөстәм Гәндәлиповтың** Халыҡ-ара бейеү көнөнә ҡарата концерты. 12+
**28 апрель** Филармонияның "беренсе скрипка"һы **Марат Саҙриевтың** юбилей концерты (бәләкәй зал). 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**25 апрель "Дюймовочка"** (Г.Андерсен, Л. Ниғмәтуллина), әкиәт. 13:00. 0+
**25 апрель "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (Х.Латыпова, С. Латыпов), музыкаль комедия. 12+
*Адыгея Республикаһы Театрҙар берләшмәһе гастролдәре*
**28 апрель "Капитанская дочка"** (А.Пушкин), драма. 12+
**29 апрель "Морские приключения"** (Д. Салимзянов), әкиәт. 6+
**29 апрель "Выпьем за любовь"** (А. Щеглов), комедия. 16+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24 апрель "Берҙәм халыҡ - ил терәге!"** XXXV концерт миҙгелен ябыу. 6+
**26 апрель "Сказка о купце и его работнике Балде"** (А.Пушкин), әкиәт. 12:00. 6+
**26 апрель "Эх, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**24 апрель "Берҙәмлектә - моң, дәрт, көс!"** XXXII концерт миҙгелен ябыу. 6+
**29 апрель "Дуҫлыҡ менән көслөбөҙ!"** "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле концерты. 6+
**30 апрель "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама (БДАДТ-ы гастроле). 12+

### БР Милли музейы

**24 апрель "Участие народов Башкортостана в ликвидации последствий аварии на ЧАЭС"** күргәҙмәһен асыу. 11:00. 12+
**24 апрель "Еңеү диктанты"**. 12:00. 12+
**25 апрель "Курс юного археолога"** мәғрифи-ағартыу сараһы. 12:00. 6+
**25 апрель "Кейеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+
**25 апрель "Башкорт ҡатын-ҡыҙҙары күкрәксәһе стилендә брошь"** оҫталыҡ дәресе. 15:00. 6+
**29 апрель "Помню, что случилось не со мной"** А.С. Фадеев һүрәттәре күргәҙмәһен асыу. 15:00. 6+
**30 апрель "Кейеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+

ИЖАДСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ИЛАҠТАР ОБРАЗЫН ЯРАТМАЙЫМ

**Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театрында эшләүсе Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Әлфирә ҒӘЛЛӘМОВА ошо көндәрҙә матур ғүмер байрамын билдәләй. Ошо уңайҙан ижади шәхес менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



**➔ Уҡытыусылар ғаиләһендә тыуған бала ни сәбәпле сәнғәт юлын һайлаған?**

- Эйе, атайым Хәләф Вәлит улы Ғәлләмов һәм әсәйем Рәшиҙә Фәхриәз ҡыҙы Стәрлетамаҡта педагогия институтында бергә уҡығандар. Мин дә артист булырмын тип һис тә уйламағайным. Атайым мине табип итеп күрергә теләгәйне, әлбиттә. Бер иптәш ҡыҙыма эйәреп кенә Өфө сәнғәт институтына документтар алып барып тапшырҙым. Унда уҡырға инергә теләүсе ҡыҙҙар-егеттәрҙе күреп, һушым китте, араларында шул тиклем төҫкә-башҡа матурҙар күп ине. Тик 150 кеше араһынан 15 кенә абитуриент студент булып китте. Шул 15 кеше араһына әлегеүемә үҙем дә аптыраным. Сәнғәт институтына ингәндә бит башта ижади һынауҙарҙы үтергә кәрәк. Этюдтың нимә икәнен дә белмәйенсә лә уҡырға инеп киткән кеше мин. Курсташтарым-Башҡортостандың халыҡ артистары Фирҙәт Ғәлиев, Иҙрис Кәлимуллин, Рәсимә Гәйфуллина, Зифа Дәүләтбаева, Илсур Хәбиров, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Земфира Хөсәйенова, актер Альберт Шәйхетдиновтар менән бергә уҡыуым менән ғорурланам. Ә Башҡортостандың халыҡ артисы Ғәяз Алтыншин курсташым ғына түгел, класташым да ине. Бер кластан ике артист сығыуы төпкөл Бөрйән өсөн ул ваҡытта көтөлмәгән хәл дә булды. Тимәк, мәктәптә мәҙәниәт йүнәлешенә айырым иғтибар бирелгәндер.

Беҙҙең курс баштан уҡ баш ҡалала асылаcаҡ Йәш тамашасылар театры (ТЮЗ, хәҙерге Милли йәштәр театры) өсөн актерҙар әҙерләүгә махсуслашты. Шуға ла башҡалар Өфө сәнғәт институтында 4 йыл уҡыһа, беҙ 5 йыл белем алдыҡ. 5-се курста иһә диплом эше булараҡ сит ил, рус, башҡорт классикаһы, хәҙерге заман әҫәрҙәренән 10 спектакль сығарҙыҡ. Йәғни, театр асылыуға репертуар әҙерләнек һәм шул эштәребеҙ менән, ысынлап та, Йәш тамашасылар театрына аяҡ баҫтыҡ.

1992 йылда Сибай театрына эшкә килдем һәм бер ҙә үкенмәйем. Башҡортостандың халыҡ артистары Рәмилә Хоҙайҡолова, Зифа Баязитова, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Риф Сәйфуллиндар мине үҙ ҡанаты аҫтына алды һәм үҙ өлгөләрендә ысын артист булырға ярҙам итте. Бөгөн дә мин улар минә остаз һәм кәңәшсе.

**➔ Тимәк, 38 йыл хеҙмәт стажығыҙҙың 34 йылын Сибай театрына бағышлағанһығыҙ?**

- Эйе, ғүмер тигәнең аҡҡан һыу кеүек икән шул. Яңы ғына килгән кеүек булһам да, өс тиҫтәнән ашыу йыл ваҡыт үткән. Бөгөнгөләй иҫемдә, иң тәүге ролем Дамир Ғәлимов сәхнәләштергән Флорид Бүләковтың "Һөйәһеңме-һөймәйһеңме?" әҫәрендә йәш Фатима булды. Минең иң яратҡан ролдәремдең береһе, ул артабан ижад итер өсөн ҙур этәргес көс булды. Ғөмүмән, Сибай театрында 100-ҙән ашыу образ тыуҙырҙым. Минең театрҙағы эш дәүеремдә генә Нәжиб Асанбаевтың "Өҙөлгән өмөт"өн 4-се тапҡыр тергеҙҙек! Тағы бер нисә спектаклдә лә шулай ҡабатлап күрһәтәбеҙ, сөнки улар заман үҙгәрһә лә, актуаллеген юғалтмаған әҫәрҙәр. Сәхнәгә сыҡһам, барлыҡ шик-шөбһәләр, ауырыуҙар, ауыртыныуҙар юҡҡа сыға, булмышым асыла, унда ғына хис-тойғоларыма ирек бирәм, йәшәйем һәм ҡанатланам. Тик илаҡ бисәләрҙең ролдәрен яратмайым, ҡайһы бер ролдәремдә илау бар, уларҙы "был мин түгел, мин түгел", тип саҡ уйнап сығам.

**➔ Артист эше сәхнәнән генә матур күренеүен беләбеҙ. Ә сәхнә артында ниҙәр бар?**

- Ябай кешенеке кеүек тормош, тик күпкә ауырыраҡ һәм ҡатмарлыраҡ. Сөнки, беҙ башҡалар ял иткәндә эшләйбеҙ, халыҡтың күңелен күрәбеҙ, ялдарын биҙәйбеҙ, туҡтауһыҙ гастролдәргә сығабыҙ. Артистарҙың да бит ғаиләләре, йорттары бар. Унда беҙ ябай ҡатын, әсә. Тик театрға бирелеп эшләһәң генә уңыштарға өлгәшергә була, шуға күрә беҙ ғаиләбеҙҙе, яҡындарыбыҙҙы бик һирәк күрәбеҙ. Ҡыҙым Азалия ла үҫкәндә мине күрмәне тиерлек. Ярай әле, әсәйем бар, мин өйҙә булмағанда ейәнсәрен ул ҡараны.

**Гөлдәр ҠАДАЕВА**
**әңгәмәләште.**

ТЕЛҺӨЙӘР

# КҮҢЕЛЕҢ ӘҮЕЛЙЕМӘҺЕН!

**Башҡорт теле - үҙенсәлекле лә, бай ҙа оло әүҙәй. Шул әүҙәйҙәге һирәк осраған йә онотола барған һүҙҙәре лә әүҙәйгә тиң. Ә беҙ уларҙы онотторМАУ яҡлы.**

**Әтмә.** Ҡаҙ, өйрәк тәпәйендәге йөҙөү ярыһы йәки ин һала торған урын. *Ҡоштоң һул аяғындағы әтмәһе. Киң әтмә.* Ҡолаҡтың аҫҡы, кимерсәкһеҙ өлөшөн дә ҡайһы бер урында "әтмә" тиҙәр. *Әтмәне ыуғылау йоҡоно осора. Ауыр алҡа әтмән ауырттырмаһын.*

**Әтәмбәй.** Һарыҡ, кәзәнең көҙ тыуған бәрәсе; көҙләүес, бүлтерек. *Ҡара әтәмбәй. Әтәмбәй тиҙ үҫте.* Сәсмәй үҫкән тыу ашлыҡ та ҡайһы бер һөйләштә "әтәмбәй" тип йөрөтөлә. *Әтәмбәй арыш. Ыҙан буйын һоло әтәмбәйе баҫҡан.* "Ситтән күсеп килеп ултырған кеше, килмешәк, припущенник" тигән мәғәнәһе лә бар "әтәмбәй"ҙең. *Урындағы халыҡ әрһеҙ әтәмбәйҙәрҙе өнәмәгән. Яҙын иген икмәгән әтәмбәйгә моң булыр (әйтем).*

**Әүҙәй.** "Әүҙәй " диалектта ҙур майҙанды билегән ҡуйы эре ағаслыҡты белдерә. Руссаһы "лес, бор". *Ҡала янында ҡарағай әүҙәйе йәшелләнеп ултыра. Әүҙәйҙә ҡышын саңғы шыуалар.*

**Әүелйеү.** "Әүелйеү" - тимәк, йоҡоға талыу, йоҡомһорау. *Бала уйнаған ерендә әүелйеп киткән. Уны ҡараған өләсәһе лә әүелйеп ултыра.*

**Шулай итеп, һүҙ әүҙәйебеҙ ишәйә генә торһон!**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕРӘҮҘЕҢ ЯҢЫҺЫНАН...

## үҙеңдең иҫкең яҡшы

Бар булһаң, биргәнеңде әйтмә, ир булһаң, еңелгәнеңде әйтмә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һөйләшерлек кеше менән һөйләшмәһәң, кешене юғалтаһың. Ахмаҡ менән һөйләшһәң, һүҙҙәрҙе юғалтаһың. Аҡыл эйәһе кешеләрҙе, һүҙҙәрҙе лә юғалтмай.

**(Конфуций).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Йылға буйында бик матур бер боронғо ҡала урынлашҡан булған. Ул ике генә, әммә бик оҙон урамдарҙан торған. Шуға ла ул бик үк бәләкәй ҡала булып иҫәпләнмәгән һәм Беренсе урам халҡы һәр ваҡытта ла Икенсе урамда ниҙәр булып ятҡаны тураһында хәбәрҙар булмаған.**

**Берҙән-бер көндө Беренсе урам кешеләре үҙҙәренә табан Икенсе урамдан бер дәрүиш килә ятҡанын шәйләп ҡалған. Килеп еткән дәрүиш, сәләм биргән. Әммә Беренсе урам кешеләре уның сәләменә түгел, ә күҙҙәре йәшләнеүенә иғтибар иткән һәм аптырап ҡалған. "Дәрүиш илай икән, тимәк, Икенсе урамға бик ҙур бәлә килгән..." - тип ысҡындырған берәү. Ысынында, дәрүиш һуған кимерә килгән һәм күҙҙәре шуға йәшләнгән булған. Ләкин был бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмаған.**

**Әлеге берәүҙең "Икенсе урамға оло бәлә килгән!" тигәнен ишеткән кешеләр был хәбәрҙе ауыҙҙан ауыҙға тапшырған. Уларҙың "...оло бәлә килгән!" тип ҡысҡырышҡанын Икенсе урамда ла ишеткәндәр. Оҙаҡламай бында ла ығы-зығы башланған, барыһы ла Беренсе урамға ниндәйҙер оло бәлә килгәне тураһындағы хәбәргә йөрәгенә яҡын ҡабул иткән. Тик бер генә кеше Беренсе урамдан Икенсеһенә йөрөп сығып, бер ни ҙә булмағанын күргән һәм был хәҡтә ике урамдың кешеләренә лә һөйләргә маташҡан. Тик уны берәү ҙә тыңларға теләмәгән, "Беҙ беләбеҙ, күрше урамға оло бәлә килгән!" тип ҡысҡырышҡан улар.**

**Бындай паника күҙ асып йомған арала ике урам кешеләрен дә солғап алған. Оҙаҡламай Беренсе урам кешеләре -Икенсе урамға, Икенсе урам кешеләре Беренсе урамға ҡотолғоһоҙ бәлә килеүенә шикләнмәгән дә хатта. Ике урам халҡы ла үҙҙәренә лә оло бәлә ябырылыу ихтималлығын иҫкәртер өсөн тиҙ арала был ҡаланы ташлап китергә ҡарар иткән. Матур был боронғо ҡала бушап ҡалған. Тик йылдар үткәс кенә был урынға кешеләр килеп урынлаша башлаған һәм ике бәләкәй ҡала хасил булған. Унда йәшәүсе кешеләр ҡасандыр бында ҙур ҡала урынлашыуы, тик был ҡалаға берҙән-бер көндө ниндәйҙер оло бәлә ябырылыуы, шуға ла уның халҡының ҡаланы ташлап китеүе тураһында риүәйәттәр һөйләр булған..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 26016

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 23.04.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 23.04.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 24.04.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2677
Заказ - 713